✓ Һин нимә менән генә шөғөлләнһәң дә, ҡыйыулыҡ кәрәк. Сөнки һин нимә генә эшләмә, алға барыу өсөн ниндәй генә юлды һайлама, "Һин яңылышаһың" тип әйтә торған кеше барыбер осраясаҡ. Ауырлыҡтар булып тора, шуға ла һайлаған юлыңды тәнҡитләүсе менән тиҙ генә килешеүең дә бар. Үҙ маҡсатыңды булдырып, уға табан ныҡышмалы барыу өсөн дә ҡыйыулыҡ талап ителә. Донъяла күп еңеүҙәргә урын бар һәм ул еңеүҙәр һинең ҡыйыу эш итеүеңдә көтә.

Ральф ЭМЕРСОН.

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

3 - 9 ДЕКАБРЬ (АҠЪЮЛАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№49 (467)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Исламдың төп асылы...**

финанс эштәрендә лә сағыла



5

**Заманса башҡорт йыры...**

тамырһыҙ ағас була күрмәһен



6

**Мифтахетдин Аҡмулла**

(1831-1895)



7

**Мәңгелек әрнеү,**

йәки Бер башҡорттоң ситтәге яҙмышы



8-10

14 **ТВ-программа**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы тамамлана. Һеҙ ниндәй гәзит-журналдарға өҫтөнлөк бирҙегеҙ?

***Фәнил ФӘЙЗУЛЛИН, Өфө дәүләт авиация техник университетының философия кафедраһы мөдире, философия фәндәре докторы, профессор, академик:*** Минеңсә, һәр башҡорт ғаиләһе туған телдәге баҫмаларҙы алдырып уҡып барырға тейеш. Үҙемә килгәндә, бер ҡасан да башҡорт телендә сыҡҡан гәзит-журналдарға яҙылмайынса ҡалмайым һәм өйөмә кәмендә биш-алты дана ваҡытлы матбуғат баҫмаһы алдырам. "Киске Өфө" гәзитен, "Ватандаш", "Ағиҙел" журналдарын яратып уҡыйым. Был баҫмаларға тарихи факттарҙы, милләттең йәшәйешен яҡтыртҡан, киләсәккә өмөт һәм ышаныс уятҡан, төрлө быуындың ихтыяжын һәм ҡыҙыҡһыныуын ҡәнәғәтләндерерлек материалдар тәҡдим итеүе өсөн өҫтөнлөк бирәм. Шулай уҡ үҙем эшләгән уҡыу йорто китапханаһы етәкселегенә лә башҡорт телендә сыҡҡан баҫмаларҙы алдырыу хаҡында белдереп торам һәм яҙылыу кампанияһы тамамланғас, ул баҫмаларҙың китапханаға килеү-килмәүен күҙәтеп барырға тырышам. Сөнки студенттарҙың яҙылыу мөмкинлеге юҡ һәм шуға күрә юғары уҡыу йорттары китапханалары уларҙың иғтибарына республика һәм Рәсәй ваҡытлы матбуғатын тулы кимәлдә еткерергә бурыслы, тип һанайым.

***Вәкифә ХӘЙРУЛЛИНА, иҡтисад фәндәре кандидаты, философия фәндәре докторы, БДУ-ның төбәк иҡтисады кафедраһы профессоры:*** Мәҙәниәттең иң мөһим өлкәләренең береһе - мәғариф өлкәһендә эшләгәнгә күрә лә, үҙем ошо милләт вәкиле булараҡ та, әсә телендә сыҡҡан һәр баҫманы алдырып уҡырға тырышам. Өйҙә уҡып өлгөрмәһәм, китапханаға инеп кенә булһа ла, күҙ йүгертеп сығырға мөмкинлек табам. Тик тәүлектә бары ни егерме дүрт кенә сәғәт, был сикләнгән ваҡыт эсендә күп нәмәгә өлгөрөп булмай. Шуға ла ҡайһы саҡта йәмғиәттә барған ваҡиғалар менән танышыуҙы телевизорҙан яңылыҡтар тапшырыуын ҡарау менән генә алыштырырға тура килә. Мөмкинлек булғанда, иркенләп ултырып гәзит, журналдар уҡып алам.

Һуңғы ваҡытта тормош шул тиклем тиҙ үҙгәрә, унда яңы төшөнсәләр, технологиялар һ.б. барлыҡҡа килә һәм беҙ хәҙер ошо яңылыҡтарҙы үҙләштереүгә күп ваҡыт бүлергә мәжбүрбеҙ. Икенсе яҡтан, беҙ хоҡуҡи йәмғиәткә күсергә ынтылабыҙ. Совет йылдарында Дмитрий Валовой тигән иҡтисад фәндәре докторының китаптары популяр була торғайны. Уның "Воздушный вал" тигән китабын, бәлки, ҡайһы берәүҙәр хәтерләйҙер. Үкенескә күрә, хәҙер беҙҙең йәмғиәт бер аҙ үҙгәртелгән, икенсерәк формаға әүерелдерелгән ана шул "воздушный вал"да йәшәй һымаҡ. Былар барыһы ла беҙҙең ваҡытыбыҙҙы ла, теләктәребеҙҙе лә, мөмкинлектәребеҙҙе лә сикләй. Шуға ла ошондай заманда милли баҫма бөгөнгө көндә, көнүҙәк мәсьәләләрҙе сағылдырыуҙан тыш, уҡыусыла ышаныс, өмөт уятырға тейеш. Тормошобоҙҙоң негатив яҡтары былай ҙа етерлек, кешененең күңелен ыңғай тойғолар менән байытыу яғын күберәк ҡайғыртырға кәрәктер, тием. Милли баҫманың төп бурысы ла кешелә киләсәккә ышаныс булдырыуҙалыр. "Киске Өфө"нән дә, башҡа гәзит-журналдарыбыҙҙан да бына ошондайыраҡ мәҡәләләрҙе һайлап уҡыйым үҙем.

**(Дауамы 2-се биттә).**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# БИТАРАФЛЫҠТЫ ЮЙЫУСЫ БАҪМА



"Киске Өфө" гәзитен гимназияға килтереүҙәрен түҙемһеҙләнеп көтөп алам һәм яратып уҡыйым. Айырыуса гәзит биттәрендә даими бирелеп барған күренекле шәхестәрҙең аҡыллы фекерҙәрен уҡып, үҙемә фәһем алам. Шулай уҡ "Монолог" һәм "Диалог" рубрикаларында донъя күргән аҡыллы ағай-апайҙар менән булған әңгәмәләрҙе уҡырға һәм аңларға, улар ауыҙынан сыҡҡан һәр уй-фекерҙе иҫемдә ҡалдырырға тырышам, сөнки артабанғы тормошомда был һүҙҙәрҙең кәрәкле буласағын беләм. Шулай уҡ Рауфан ағай Мортазиндың комсоэнергетикаға, сәләмәтлеккә ҡағылған материалын да ҡыҙыҡһынып уҡыным һәм күп нәмәләр хаҡында белдем.

Һуңғы һандарҙа сыҡҡан "Шәүрәкәй" хикәйәһе ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы, уның аша мин башҡорт халыҡ йыры "Шәүрәкәй"ҙең тарихын белдем. Беҙгә, йәш быуынға, ҡоро факттар аша түгел, ә нәҡ ошондай хикәйә, шиғыр йәки башҡа материалдар аша милләтебеҙ тарихын, йолаларын, йыр-бейеүҙәрен аңлау ҡыҙыҡлыраҡ та, файҙалыраҡ та, тигән фекерҙәмен. Ғөмүмән, "Киске Өфө" гәзите төрлө йәштәге кешеләргә ҡыҙыҡлы һәм кәрәкле гәзит. Гәзиттәге һәр рубрика, һәр мәҡәлә кешене рухи яҡтан байытыусы, киләсәккә ышаныс биреүсе, бөгөнгә һәм үткәнгә битарафлыҡты юйыусы ул. Кемдәр быға тиклем алдырмаған - алдырһын, уҡымағандар - яҙылып уҡыһын ине, тип теләгем килә. Гәзиттә эшләүсе ағай һәм апайҙарға артабан да ижади уңыштар теләйем һәм рәхмәтемде белдерәм.

**Әлфиә САФИНА,**
**Ҡ. Дәүләткилдеев исемендәге художество гимназияһының 11-се синыф уҡыусыһы.**

✓ Ғаиләм менән башҡорт баҫмаларына даими яҙылып торам. Киләһе ярты йылға яҙылыу өсөн генә 5 мең һумдан ашыу аҡса түләнек. Уҡытыусы булып эшләһәк тә, гәзит -журналдарға ҙур булмаған эш хаҡыбыҙҙы йәлләмәйбеҙ.



ӘЙҘӘГЕҘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ЙОРТ ЙЫҺАЗЫҢ...

## бары тик үҙең теләгәнсә



**Бик ҡыҙыҡлы рубрика астығыҙ. Әлеге көнгә тиклем баҫылып сыҡҡан мәҡәләләрҙә уңған, эшһөйәр, матур тормош көтөүҙең төрлө сараларын уйлап табыусы кешеләр хаҡында уҡып һоҡландым. Аҡса эшләүҙең минең уйыма ла килмәгән төрлө юлдары бар икән шул. Рубрикаға үҙемдең дә ғаиләмә килем килтереүсе шөғөлөм хаҡында яҙып үтергә булдым.**

Бәләкәй саҡтан килә һүрәт төшөрөүгә булған әүәҫлегем. Аллаға шөкөр, ата-әсәйем был һәләтемде ваҡытында күреп-аңлап, уны артабан да үҫтерергә, ошо йүнәлеш буйынса белемемде камиллаштырырға мөмкинлек тапты: бөгөнгө көндә мин юғары белемле рәссаммын. Әлеге көндә бала ҡарап өйҙә ултырам. Бәләкәсем бөтә ваҡытты тиерлек алһа ла, көнөлем тартҡан, тормош рәүешемә әйләнгән һүрәт төшөрөүҙе онотмайым. Эшем бары картиналар яҙыуға ғына ҡайтып ҡалмай, ә ошондай һәләт талап иткән төрлө өлкәләргә лә ҡағыла. Рәссамлыҡ - ҙур сығымдар талап иткән шөғөл, шулай ҙа был өлкәлә сығымдарҙы ғына ҡапларлыҡ түгел, ә ғаилә бюджетына ярҙам итерҙәй аҡса ла эшләргә мөмкин.

Мин, мәҫәлән, өҫтәмә килем алыу өсөн төрлө йорт йыһаздары дизайны эшләйем. Хәҙер барыһы ла үҙ өйөн зауыҡлы, башҡа бер кемдекенә лә оҡшамаған итеп биҙәргә, айырылып торған йорт йыһаздары ултыртырға тырыша. Ә ҡайҙан алырға һуң ундай йыһазды? Тап ошо ваҡытта минең хеҙмәтемдең кәрәге тейә лә инде, сөнки бер генә дана итеп етештерелгән йорт йыһазын магазинда табырмын тимә, унда күбөрәген күмәртәләп эшләнгән, бер төрҙәге мебель һатыла. Әлбиттә, оҙаҡ эҙләгәндә үҙеңдең күңелеңә яткан, башҡа берәүҙә лә булмаған диван, тахта, көҙгө йә башҡа төрлө йорт йыһазы табырға була. Тик улар, эксклюзив булараҡ, үтә лә ҡиммәт. Ә мин, клиенттың теләгенә ярашлы, өйөнөң биҙәлешенә тура килтереп, шул уҡ ваҡытта хаҡты шаштырып та ебәрмәй, йорт йыһазы дизайны эшләп бирәм. Артабан уны бары тик оҫтанан эшләтеп алырға ғына ҡала. Үҙ дизайны буйынса мебель эшләткән йорт хужаһы нәҡ үҙе теләгән ағастан йорт йыһазы эшләтеү мөмкинлегенә эйә булып, тағы ла бер ота.

Эшенә бар күңелеңде биреп, тырышлығыңды, көсөңдө, ваҡытыңды йәлләмәй башҡарһаң, һеҙмәтеңә лә һәйбәт була. Бер кешегә уның теләгенә тура килгән дизайн эшләп бирһәң, һеҙмәтеңде реклама артабан үҙенән-үҙе барлыҡҡа килә. Бөгөнгө көндә клиенттар аҙлығына зарланмайым. Тик аҡса артынан ҡыумайым һәм, тәү сиратта, сифатлы эште алға ҡуям, сөнки бер ебәрелгән хатаны төҙәтеү ауыр буласағын аңлап эш итәм.

Әлиә ӘЛИМОВА.
Өфө ҡалаһы.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### *Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы тамамлана. Һеҙ ниндәй гәзит-журналдарға өҫтөнлөк бирҙегеҙ?*

(Башы 1-се биттә).

***Зөһрә УСМАНОВА, хаҡлы ялдағы уҡытыусы, штаттан тыш хәбәрсебеҙ:*** Кемдәр "Киске Өфө"гә электән яҙыла, улар йыл һайын яратҡан гәзитенә тоғро ҡалып килә, сөнки был баҫманан айырылыуы мөмкин түгел. Ул беҙҙең дуҫыбыҙға, туғаныбыҙға әүерелде инде күптән, нисек уға яҙылмай ҡалырға була! "Киске Өфө"нө уҡыусылар араһында бөтә республика буйынса минең бик күп дуҫтарым, бергә уҡыған, эшләгән элекке курсташтарым, уҡытыусыларым, уҡыусыларым, хеҙмәттәштәрем бар. Тап бына ошо "Киске Өфө" беҙҙе берләштереп тороусы рухи мәккәбеҙ, тип әйтер инем. Күптән түгел генә әле элек бергә эшләгән хеҙмәттәшем Йәмних Ҡашҡаров, Темәстән Сания Әминева менән ошо гәзит хаҡында һөйләшеп алдыҡ. Сания апайҙың туҡһанды үткән атаһының да ошо гәзитте яратып уҡыуын беләм. Гәзитебеҙҙең даими авторы - Сәбилә Сөләймәнова минең уҡытыусым, ул министр булғанда, беҙ уның етәкселегендә эшләнек. Фәүзиә Яхинаның мәҡәләләрен яратып уҡыйым, үҙен берәй күреп, һөйләшкем, танышҡым килә бик тә.

Тик шуныһы борсолдора: быйыл башҡорт матбуғатына яҙылыу барыбер һүлпән бара. Әле бына "Башҡортостан"дың баш мөхәррире Нияз Сәлимов килеп, гәзит уҡыусылар менән осрашыу үткәреп китте, яҙылдым "Башҡортостан"ға ла, сөнки үҙебеҙҙең башҡорт донъяһы, республикабыҙҙың ижтимағи-сәйәси тормошо менән хәбәрҙар булып барыу кәрәк.

Быйыл "Яҡты күңел" тигән китабым баҫылып сыҡты, шуға бик шатмын. "Киске Өфө" гәзитенә шунда сыҡҡан "Кызыл тисбе" тигән хикәйәмде ебәрергә әҙерләп торам. Киләсәктә гәзиттә сыҡҡан мәҡәләләр буйынса фекер алышыуҙарҙа әүҙемерәк ҡатнашырмын, тигән ниәттәмен.

***Фәнур ШАҺИЕВ, уҡытыусы, Учалы районы:*** Ғаиләм менән башҡорт баҫмаларына даими яҙылып торам. Киләһе ярты йылға яҙылыу өсөн генә 5 мең һумдан ашыу аҡса түләнек. Ҡатыным да, үҙем дә ауылда уҡытыусы булып эшләһәк тә, гәзит -журналдарға ҙур булмаған эш хаҡыбыҙҙы йәлләмәйбеҙ. Тәү сиратта "Киске Өфө" һәм "Йәшлек"кә яҙылабыҙ. Икеһе лә бик ҡыҙыҡлы баҫма. Стиль йәһәтенән дә, ваҡиғаларҙы яҡтыртыу алымдары, фекер-ҡараштары менән дә бер-береһен ҡабатламайҙар. Шуға икеһен дә уҡыу теләге һүрелмәй. Балаларыбыҙ өсөн һәр саҡ "Йәншишмә" гәзите, "Аҡбуҙат", "Аманат" журналдары килә. Бынан тыш, ике телдә лә сыҡҡан район баҫмаларын алдырабыҙ. Сөнки улар ҙа материалдар төрлөлөгө менән айырылып тора. Эш менән бәйле баҫмалар - "Башҡортостан уҡытыусыһы" һәм "Ватандаш"ты уҡып барам. Шулай уҡ ваҡыты-ваҡыты менән "Һәнәк", "Шоңҡар" журналдарын да алдырып торам. Унда ла ҡыҙыҡлы, фәһемле мәҡәләләргә тап булаһын. Рәсәй баҫмаларына ла яҙылырға тырышам. Әммә аҡса етмәй киткәндә, уларҙы интернеттан ғына уҡыйым. Элек "Труд" гәзитен уҡый инем, хәҙер "Аргументы и факты", "Комсомольская правда"ға өҫтөнлөк бирәм. Ваҡытлы матбуғатты мәктәп өсөн дә алдыра торғайныҡ. Ләкин быйыл был-ның өсөн аҡса бүленмәне. Уҡыу йортона гәзит-журналдар килмәй хәҙер. Әммә уҡыусылар үҙҙәре яҙыла. Мәктәп коллективына, ата-әсәләргә лә матбуғатты алдырыу кәрәклеген әйтеп киләбеҙ. Хәҙер етдиерәк баҫмаларға яҙылырға тырыша халыҡ. Әммә һәр баҫмала етди мәсьәләләр күтәреү менән бергә төрлө кәңәштәр ҙә, юмор ҙа бирелергә тейештер. Бай йөкмәткеле баҫманы һәр ваҡыт уҡыуы ҡыҙыҡлы.

КЕМ АЛЫҠ?

# ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2012 йылдың тәүге яртыһында гәзитһеҙ ҡалмаҫҡа теләһәгеҙ, уға яҙылырға һуңлап ҡалмағыҙ. Был хаҡта күрше-күләндәрегеҙгә, таныштарығыҙға ла еткерегеҙ, зинһар.**

**Ноябрь айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 30 кешегә 2012 йыл өсөн "Дини календарь" ебәрергә вәғәҙә иткәйнек. Бүләгебеҙ түбәндәгеләр өлөшөнә төштө: Ауырғазы районынан** Сынтимер Сафин, М. Яҡшина, Урал һәм Миңлегөл Ибраҡовтар, **Баймаҡ районынан** Рәмзиә Мостафина, Әнүәр Сәйетколов, Сөнәғәт Үҙәнбаев, Гөлдәр Әлибаева, Гөлсирә Йоносбаева, Мөхәмәт Әбдисов, Р.Рысмөхәмәтова, Хөснулла Айсыуаҡов, Мәхмүҙә Исламғолова, Зөлифә Ҡасҡынова, Хөснулла Ерьесов, М. Йәнъегетов, **Балаҡатай районынан** Сәжидә Әхмәтйәнова, **Бүздәк районынан** Ришат Йоносов, **Бөрйән районынан** Вәлимә Бүләкова, Гөлназ Вәхитова, Рәмилә Юлсурина, **Дәүләкән районынан** Хәниф Әхмәтйәнов, **Ишембай районынан** Фәрит Ишбулдин, **Ейәнсура районынан** Гөлкәй Бикмәхәмәтова, **Ғафури районынан** Рифа Вәлиева, Рәсилә Ғафарова, **Көйөргәҙе районынан** Йәмилә Сурина, **Күгәрсен районынан** Флүзә Рәхмәтуллина, Владик Ҡыҙрасов, **Ҡырмыҫҡалы районынан** Рихард Өмөтбаев, **Мәсетле районынан** Зилирә Зәкирова, **Нуриман районынан** Әнфисә Фазлетдинова, Зәйтүнә Ғафарова, **Әбйәлил районынан** Ишдәүләт Абдуллин, Фәтих Рыҫҡолов, **Әлшәй районынан** Мәрфуға Шәйхетдинова, **Учалы районынан** Әклимә Абдрахманова, Фәрүәз Гәрипов, **Белорет ҡалаһынан** Т.Ильясова, **Өфө ҡалаһынан** Г.Мөхәмәтшин, **Сибай ҡалаһынан** Ишбулды Сирбаев, **Межгорье ҡалаһынан** Әлфиә Зәбдинова, Ф. Әксәнова.

**Ноябрь айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәргә лә 2012 йыл өсөн "Дини календарь" бүләк итмәксебеҙ.**

Ә кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдаштарығыҙға, туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға **270 һум**ға яҙыла алаһығыҙ - почта йәшниге юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ. Киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, редакцияға шылтыратығыҙ.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (көмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға **228 һум**.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **240 һум**.

**Шулай итеп, гәзитебеҙҙең индексы - 50665, ярты йылға яҙылыу хаҡы - 348 һум 24 тин.**

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов билдәләүенсә, "Европа - Көнбайыш Ҡытай" трассаһының бер өлөшө - 300 километр оҙонлоҡтағы Европа кимәлендәге юл республика аша үтәсәк. Проект тормошҡа ашырылғас, Бәләбәйҙән Күмертауға тиклем беҙҙә "1А" класлы яҡтыртылған замансa юғары тиҙлекле магистраль буласаҡ. Бынан тыш, ҡайһы бер федераль трассалар реконструкцияланасаҡ. Киләһе йылға Рәсәйҙең Транспорт министрлығы республика өсөн өс миллиард һум аҡса бүләсәк, улар "М-5" һәм "М-7" трассаларын реконструкциялауға йүнәлтеләсәк.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов "Башҡортостан Республикаһының ауыл ерендә урынлашҡан һаулыҡ һаҡлау учреждениеларының кадрҙар потенциалына дәүләт ярҙамы саралары тураһында"ғы Указға ҡул ҡуйҙы. 2012 йылдың 1 ғинуарынан ауыл дауаханаларында эшләргә теләүсе йәки әле эшләгән юғары белемле йәш белгестәр йөҙ мең күләмендә бер тапҡыр бирелә торған пособие аласаҡ.

✓Башҡорт дәүләт аграр университетының "Колос" махсус студенттар отряды Рәсәй Ауыл хужалығы министрлығының юғары уҡыу йорттары студенттар отрядтары слетынан еңеү менән ҡайтты. Слет Волгоградта үтте. Сарала бөтә Рәсәйҙән 40-тан ашыу студенттар отряды ҡатнашҡан. "Колос" махсус студенттар отряды башҡарылған эш күләме һәм сифаты, юғары тәртип кимәле, ялды ойоштороу, йәмәғәт эштәрен башҡарыу буйынса иң яҡшыларҙан тип танылған. Башҡортостан командаһының еңеүе киләһе йыл конкурсты беҙҙең республикала үткәреү хоҡуғын бирә.

✓Баймаҡ районының Иҫке Сибай ауылында Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең йәмәғәт эшмәкәре, сәсән, импровизатор, "Сибай" йыры авторы, Сибай кантон бүлараҡ билдәле Шаһиәхмәт Утарбай улы Сибаевты хөрмәтләп иҫкә алдылар. Быйыл уның тыуыуына 190 йыл тулды. Әлеге ваҡитта сәсәндең туғандары йәшәгән йортта мемориаль таҡтаташ ҡуйылды.

✓"Рәсәйҙең иң тәҙөк ҡала (ауыл) биләмәһе" исеменә бөтә Рәсәй конкурсына йомғаҡ яһалды. Конкурс һөҙөмтәләре буйынса Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең беренсе дәрәжә дипломы Бөйөк Новгород ҡалаһына тапшырылды, икенсе дәрәжә дипломды үҙ-ара Өфө менән Новосибирск бүлешә, өсөнсө урынға Саранск, Хабаровск һәм Ижевск ҡалалары лайыҡ булды.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# АҘАШҠАНДАН...

## юл һорамайҙар

**Эйе, аҙашҡандан юл һорамайҙар, сөнки аҙашҡан кеше үҙе лә юл күрһәтеүсегә мохтаж. Шул уҡ ваҡытта аҙашҡан кешенең яңылыш күрһәткән юлы ла осраҡлы рәүештә дөрөҫлөккә тап килеүе бар. Тимәк, был әйтемдә "аҙашыу" төшөнсәһенә тағы ла тәрәнерәк мәғәнә һалынғанға оҡшаған. Әйтәйек, тормош юлында, яҙмышында аҙашыусы кешене алайыҡ. Ике осраҡ хаҡында ла уй йөрөтөп ҡарайыҡ.**

Ҡышҡы ыжғыр буранда урманда аҙашып йөрөүсе кеше ике һуҡмаҡ сатына килеп сыҡҡас, ҡайһы яҡҡа китергә белмәйенсә, үҙе һымаҡ уҡ аҙашып йөрөүсе икенсе берәүҙән тыуған ауылына юл һораған, ти. Аҙашып йөрөүсе теге кеше лә шулай уҡ был аҙашыусынан үҙенең ауылына ҡайны һуҡмаҡ алып барғанын белешкән. Шулай итеп, улар бер-береһе күрһәткән һуҡмаҡ буйлап китеп, тәүгеһе - икенсеһенең, унығы быныһының тыуған ауылына барып төртөлгән. Икеһе лә был ауылдарҙың аҡһаҡалдарына барып, үҙҙәренең ниндәй хәлгә тарыуы хаҡында һөйләп биргән. Ике ауылда ла аҡһаҡалдарҙың яуабы бер булған:

-Һин бит аҙашҡан кешенән юл һорашҡанһың. Аҙашҡандан юл һорамайҙар, тигән боронғолар. Ул күрһәткән юлдан китергә ярамай, икенсеһен һайларға кәрәк ине...

Аҙашыусылар тағы ла урмандағы теге ике һуҡмаҡ сатында осрашҡан һәм аҡһаҡалдарҙың һүҙен тотоп, береһе икенсеһе күрһәткән тарафтың тап ҡаршы яғына, икенсеһе беренсеһе күрһәткәндең тап ҡаршы яғына юл тотҡан. Шулай итеп, һәр ҡайһыһы тағы ла тәүге ауылға әйләнеп килгән. Уларҙың тағы ла әйләнеп килеүенә аҡһаҡалдар бот сапҡан һәм ике ауылда ла бер үк төрлө кәңәштәр шулайыраҡ яңғыраған:

-Һин бит тағы ла теге аҙашҡан кешенән юл һорағанһың. Бер ауыҙың беште бит. Аҙашыусының күрһәткән юлы ла, үҙе йөрөгән юлы ла дөрөҫ булмай. Инде уны урманда осратһаң, күрмәмешкә һалыш, ҡаршыңа килеп сыҡһа, ҡапыл боролоп кит...

Аҙашыусылар шулай иткән дә. Улар аҡһаҡалдарҙың "аҙашыусының йөрөгән юлы ла дөрөҫ булмай", тигәнен иҫтә тотоп, теге ике һуҡмаҡ сатына етер-етмәҫ ерҙән бер-береһен күреп ҡалып, кире боролоп китеп, өсөнсө тапҡыр шул уҡ ауылдарға әйләнеп килгән...



Әйҙә, улар иҫтәренә килгәнсе, әйләнсек һарыҡ һымаҡ шулай аҙашып йөрөй бирһендәр, ә беҙ аҙашыу хаҡында һөйләшәйек. Гәзиттә баҫылған "Мин эсеүемде ташланым" яҙмаларымдың "Беҙ - уй ҡоло" тигән һабағында аҙашыусы кешенең ни өсөн бындай хәлгә тарыуы хаҡында яҙып үткәйнем инде. Шуға күрә ундағы фекерҙәремде ҡабатлап тормайынса, шуны ғына әйткем килә: аҙашыу - ул иң тәүҙә фекерләүҙә, баш мейеһендә башлана һәм ул кешенең логиканы юғалтыу һәм тойғоға бирелеү хәленә тиң. Баш мейеһе менән татыу булмаған кеше радиусы өс саҡрымға һуҙылған урманда көндәр буйына аҙашып йөрөүе ихтимал. Аҙашыу ҡурҡыу, икеләнеү, шикләнеү, шомланыу тойғоһо менән дуҫ, урманда аҙашыусы кешенең күңеленә ошо тойғолар инеп урынлашһа, ул кеше "аҙашыу түңәрәге" буйынса һул яҡҡа әйләнеп йөрөй башлай. Үҙ-үҙенә, үҙенең көсөнә, мөмкинлектәренә ышанған кеше бер ваҡытта ла аҙашмай, аҙашҡан хәлдә лә дөрөҫ юлды тиҙ таба.

Бер-береһенең ауылына барып төртөлөүсе ике танышылыбыҙ, шулай итеп, "аҙашыу түңәрәге", икенсе төрлө итеп әйткәндә, үҙенсәлекле лабиринт буйлап һаман да йөрөй бирә. Уларҙың күңеленә ҡурҡыу, икеләнеү, шикләнеү, шомланыу тойғолары тулыһынса инеп ултырған, улар үҙ-үҙенә, үҙенең көс-мөмкинлектәренә ышанмай, тулыһынса башҡаларҙың ихтыярына буйһонған, тик уларҙың һүҙе буйынса ғына хәрәкәт итә. Ҡасандыр тыуған ауылдарына әйләнеп ҡайта алырҙармы икән улар? Әйтеүе ҡыйын.

Ә бит, төптән уйлап ҡараһаң, илебеҙҙән атеизм хөкөм һөргән дәүерендә беҙ барыбыҙ ҙа ана шул ике аҙашыусы кеше хәлендә инек. Әле күптәребеҙ һаман да шул лабиринтта өйөрөлә, һаман да тыуған ауылына, дөрөҫөргә, үҙ асылына, тарихы булмышына әйләнеп ҡайта алмай. Аҙашыуҙар менән тотош ғүмерҙәр үтә, быуындар алмашына, аҙашҡан ҡартатайҙарҙың аҙашҡан улдары - ейәндәрҙе, улары булар-буләсәрҙәрен аҙаштыра.

Бер әңгәмә ҡорғанда Башҡортостандың халыҡ артисы Әхтәм ағай Абушахманов ҡыҙыҡлы фекер әйтеп ысҡындырҙы. Уның иҫәпләүенсә, хәҙерге атайҙарҙың улдарына биргән кәңәше, аҡылы кәрәкһеҙ генә түгел, бөтөнләй яраҡһыҙ икән. Ә бит төптән уйлап ҡараһаң, был һүҙҙәрҙә хаҡлыҡ бар. Сөнки яңы быуын вәкилдәрендә беҙҙәге комплекстар бөтөнләй юҡ һәм беҙҙең тәрбиә ысулы, асылда, йәш кешене үҙебеҙҙең ҡалыпҡа индереүгә ҡайтып ҡала. Космоэнергет Рауфан Мортазин иһә, беҙҙең тәрбиә балаларыбыҙға бөтөнләй яраҡһыҙ, беҙ уларға бары тик рухи һәм милли тәрбиә генә бирә алабыҙ, тип иҫәпләй. Ул үҙенең был дәлилдәрен ерҙең энергетикаһы үҙгәреүе һәм яңы үлсәмгә күсеүе менән аңлата.

Ни өсөн менәр йылдар буйына үҫеп килгән быуын өсөн мөҡәддәс һаналған атай һүҙе, атай кәңәше бөгөн килеп үҫеп килгән быуын өсөн яраҡһыҙ булып сыға һуң? Әйтергә кәрәк, был хәл беҙҙең ил өсөн хас күренеш. Шул уҡ ваҡытта атеизм осоро кисермәгән илдәрҙә һәм дәүләттәрҙә кешелектең был йолаһы һаман да үҙ көсөндә. Мин Башҡортостанға килеп, өйләнеп, балалар үҫтереп, бер ауылда үҙенең эшен асып гөрләтеп йәшәп ятҡан, теле менән дә, холҡо менән дә башҡортҡа әйләнгән Мөшәрип атлы бер үзбәк егетен белә инем. Оҡшай ине уға беҙҙә, беҙҙең, шундай мөмкинлектәребеҙ, иркенлек була тороп та, йәшәй белмәүебеҙгә аптырай ине ул. Ул беҙҙәге үҙенең эшҡыуарлығын бер йәй эсендә еләк йыйып һатып ҡына "Волга" машинаһы һатып алыуҙан башлап ебәргәйне. Шул егетте атаһы килеп, ҡатыны, балалары менән бергә елтерәтеп алып ҡайтып китте. Ҡалғыһы килә ине уның, балалары ла беҙҙең ерлеккә өйрәнгәйне. Үҙе әйтеүенсә, үзбәктәрҙә атайҙың ихтыярына ҡаршы килеү иң ҙур гонаһ һанала икән. Үзбәктәр ҙа беҙҙең һымаҡ СССР-ҙа йәшәне бит, тип әйтер берәү. Эйе, әммә улар диндән айырылманы. Ә беҙҙә атайҙарҙың, ғөмүмән, өлкән быуын вәкилдәренең кәңәше, аҡылы йәштәргә яраҡһыҙ булыуын бары тик "Аҙашҡандан юл һорамайҙар" тигән әйтемгә таянып ҡына аңлатып булалыр.

"Ә нинә беҙҙең атай-олатайҙар аҙашҡан һуң? Улар яңы тормош, колхоз тәҙегән, фашизмды еңгән, һуғыштан һуң емерек илде аяҡҡа баҫтырған. Уларҙың йәшәүе хата булғанмы?" тигән һорау ҙа бында урынлы булыр. Әммә динде, Аллаһы Тәғәләне инҡар иткән идеологияны, мәсеттәрен, сиркәүҙәрен емергән илде, дини руханиҙарҙы юҡ иткән фирҡәне дөрөҫ юлда барған тип әйтеп буламы икән? Юҡ. Шундай илдә йәшәүселәр иһә, 70 йылдан ашыу үҙ тарихынан, диненән айырылыуға, аҙашыуға дусар ителгән. Кемгә нисектер, әммә үҙ халҡының, ырыуының, нәҫеленең тарихын, шәжәрәһен белмәгән динһеҙ атайҙың улына биргән тормош һабағының дөрөҫ булыуына мин шикләнәм барыбер...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

---

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

## НИҢӘ БЫЯЛАҒА БӘРЕЛӘБЕҘ?

Эҫе йәй көнө. Балкон ишектәре шар асыҡ. Балконда бер йәш себен бүлмә эсендәге дәү көүҙәле оло себендең осошон күҙәтә. Уныһы бүлмә буйлап геүләп осоп йөрөй-йөрөй ҙә тәҙрә быялаһына шап итеп барып бәрелә һәм тағы ла ныҒыраҡ гөжләп осоп китә, бер аҙҙан тағы ла шап итеп быялаға барып бәрелә. Был күренеш ярайһы уҡ оҙаҡ ваҡыт дауам итә. Һуңынан дәү көүҙәле себен көс-хәл менән шыуышып, асыҡ балкон ишегенән килеп сыға, ә йәш себен: "Ағай, балкондың ишеге асыҡ икәнен күрә-тора, һеҙ нинә тәҙрә быялаһына килеп бәреләһегеҙ һуң ул?"- тип һорай. Ә дәү себен: "Асыҡ ишектән һәр бер дүрәк себен осоп сыға ала бит, ә бына һин быяла аша осоп сығып ҡара!"- ти уфтанып...

Һайлауҙар алды осоронда ла ошолай асыҡ ишек күрмәй, ары һуғылып, бире һуғылып ҡаңғырған аналитиктар, дәү ағайҙар ишәйҙе. Телевизорымдың төймәләрен баҫҡылап, уларҙы саҡ ҡына тыңлап ҡарайым да, бер-ике һөйләмдән үк кемдең кем икәнлеген аңлап, һүндереп ҡуям. Күбеһе шул быяла аша осоп сығырға өндәй һымаҡ тойола минә. Берәү бөләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтерәйек, тип һөйләй ҙә, шым ғына бөләкәй эшҡыуарҙарға һалымдарҙы ике-өс тапҡырға арттыра. Пенсиялар ҙа, эш хаҡы ла үҫеп тора ул, артынса уҡ аҙыҡ-түлеккә хаҡтар, торлаҡ-коммуналь түләүҙәр ҙә артып китә. Ә беҙ был сәйер күренеште аңлайбыҙ, әммә: "Ағай, ишек асыҡ бит, ниңә быялаға бәреләбеҙ?" - тип әйтә алмай ултырабыҙ. Донъя бутала, тора-бара үҙебеҙ ҙә буталып бөттөк инде...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

---

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Йәмғиәттә тәртип һаҡлау маҡсатында һайлау көнө - 4 декабрҙә Башҡортостанда алты мең эске эштәр органдары хеҙмәткәре эшләйәсәк. Был хаҡта "Башинформ" агентлығына республика буйынса Эске эштәр министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр иттеләр. Әлеге ваҡытта полиция хеҙмәткәрҙәре тәүлек әйләнәһенә участкаларҙы һаҡлай, унда һайлау бюллетендәре килтерелгән дә инде.

✓Ағымдағы йылдың тәүге ун айы эсендә республиканың Халыҡты эш менән тәьмин итеү хеҙмәтенә 5 меңгә яҡын уҡыу йортон тамамлаусы мөрәжәғәт иткән. Уларҙың 3 меңгә яҡыны, йәғни 60 проценты эшкә урынлаштырылған. Эшһеҙлек буйынса иҫәптә тороусы йәштәр составы ошолай: 48 процент - юғары уҡыу йорттарын тамамлаусылар, 41 процент - урта махсус уҡыу йорттарын тамамлаусылар һәм 11 процент - башланғыс һөнәри белем биреү учреждениеларын тамамлаусылар.

✓Думаға һайлауҙарҙа тауыш биреү өсөн республикала 3 миллион 67 мең 700 бюллетень әҙерләнгән. Бюллетень тексы өс телдә баҫылған - рус телендә (дөйөм һандан 78 процент), башҡорт һәм татар телдәрендә (әҙерләнгән бюллетендәр һанынан 22 процент). Ялған бюллетендәрҙән һаҡланыр өсөн алдағы һайлауҙарҙа махсус маркалар ҡулланыласаҡ, улар һайлау бюллетененең уң яҡ өҫкө мөйөшөнә йәбештерелә. Һайлау бюллетендәрен эшкәртеү комплекстары ҡулланылғанда марка бюллетендең кире яғына йәбештерелә. Маркаһыҙ һайлау бюллетендәре тауыштарҙы һанаған саҡта иҫәпкә алынмаясаҡ.

✓Өфөлә Башҡортостан Хөкүмәте менән М.В.Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университеты араһында хеҙмәттәшлек итеү тураһында килешеү төҙәлдө. Документҡа республика Хөкүмәте Премьер-министры Азамат Илембәтов һәм Рәсәй Фәндәр академияһы вице-президенты, Мәскәү дәүләт университеты ректоры Виктор Садовничий ҡул ҡуйҙы. Былдай килешеү тәү сиратта Башҡортостан һәм Мәскәү вуздары араһында студенттар менән алмашыуҙы яйға һалыу өсөн кәрәк, тип билдәләнде. Мәскәү дәүләт университеты ректоры һүҙҙәренсә, бөгөнгә килешеүҙең аналогтары юҡ. Быға тиклем Мәскәү дәүләт университеты Ҡытай Халыҡ Республикаһы менән генә хеҙмәттәшлек итеү тураһында килешеү төҙәгән.

**✓ *Власть асыҡ булырға тейеш. Беҙгә власть вәкилдәре хаҡында халыҡтан алыҫ торған, үҙ мәнфәғәтен генә ҡайғыртҡан ришүәтсе бюрократтар кеүек фекерҙе юҡҡа сығарыу зарур.***



*ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ!*

# "КЕШЕЛӘР ӨСӨН ЭШЛӘРГӘ!"

**Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайға Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһаны. "Кешеләр өсөн эшләргә!"тип аталған йыллыҡ программа документында республиканың ағымдағы йылда ирешкән уңыштарына йомғаҡ яһалып, артабанғы үҫеше өсөн төп йүнәлештәр билдәләнде.**

Республика етәксеһененең был программа-сығышында бөгөн сафҡа ингән һәм алдағы йылдарҙа индереләсәк яңы социаль-иҡтисади объекттар исемлеге телгә алына. Шуға күрә уларҙы ҡабатлап тормайынса, Президент Мөрәжәғәтнамәһенән республика үҫешенә йүнәлеш булырҙай тезистарҙы түбәндәгесә килтерергә мөмкин булыр ине:

-шуны аңлау зарур: халыҡ иҡтисади күрһәткестәр менән йәшәмәй. Һандарҙы ашап булмай, ҡыйынлыҡтарҙан да улар артына йәшеренеү мөмкин түгел;

-власть асыҡ булырға тейеш. Беҙгә власть вәкилдәре хаҡында халыҡтан алыҫ торған, үҙ мәнфәғәтен генә ҡайғыртҡан ришүәтсе бюрократтар кеүек фекерҙе юҡҡа сығарыу зарур. Быны эшләү еңел түгел. Әммә шунһыҙ, халыҡты үҙебеҙҙең әүҙем союздашыбыҙға әүерелдермәй тороп, ҡуйылған маҡсаттарҙың береһенә лә өлгәшә алмаясаҡбыҙ;

-йәмғиәтте туплау өсөн байҙар менән аҙ тәьмин ителгәндәр араһындағы айырмалыҡты кәметеү кәрәк. Был маҡсат - иң мөһимдәрҙең береһе. Бөтә кимәлдәге хеҙмәткәрҙәрҙең килемен эҙмә-эҙлекле арттырыу зарур. Беҙ был эште башланыҡ;

-халыҡ мөмкин булмағанды талап итмәй. Иң мөһиме - беҙ барыһына ла йәшәү өсөн намыҫлы хеҙмәт менән аҡса эшләү мөмкинлеген бирергә тейешбеҙ. Эш урындары, яңы заманса производстволар булдырырға кәрәк. Һәр ерҙә: ауылда ла, ҡалала ла, Өфөлә лә, көньяҡ-көнсығыш райондарҙа ла;

-эшҡыуарлыҡҡа ҡамасаулаған төп проблема - кредит алыу мөмкинлегенең сикләнеүе. Был мәсьәләне хәл итеү өсөн "Башҡортостан Республикаһының микрофинанслау үҙәге" ойошторолдо. Ҡайһы берәүҙәр уны "бәләкәй бизнес өсөн ашығыс ярҙам"тип тә атай;

-ниңә республиканың күп предприятиелары комплектлау өлөштәрен ситтән һатып ала? Уларҙың күбеһен үҙебеҙҙә етештерергә мөмкин бит. Ниңә беҙгә башҡа төбәктәрҙә эш урындары булдырырға һәм шунда һалым түләргә? Быларҙың барыһы ла үҙебеҙгә кәрәк бит;

-хаҡ үҫеше мәсьәләһен хәл итеү өсөн тормошҡа ашырылырға тейешле киләһе бурыс - ул логистик үҙәктәр һәм күмәртәләп һатыу складтары системаһын ойоштороу эшен тиҙләтеү;

-дәүләттең ярҙамынан башҡа ауылдың күтәрелә алмауы көн кеүек асыҡ. Әммә ауыл халҡы булмаһа, беҙ ҙә аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеү мәсьәләһен хәл итә алмаясаҡбыҙ;

-республикала йәштәр араһында эшһеҙлек киҫкен мәсьәлә булып ҡала. Юғары уҡыу йортон йәки техникумды тамамлағандан һуң тәжрибәһе булмаған йәш белгестең берәүгә лә кәрәге юҡ тиерлек. Һуңғы уҡыу йылында һәр студент республика предприятиеларының береһендә ярты йыл дауамында ярты ставкаға булһа ла эшләү мөмкинлегенә эйә булырға тейеш. Маҡсат - диплом менән берлектә резюмеға "һөнәрем буйынса эш тәжрибәһенә эйәмен" тигән һүҙҙәрҙе индереү;

-Рәсәй Хөкүмәте киләһе йылда ла пенсияны арттырыуҙы дауам итергә вәғәҙә бирә, әммә беҙгә лә уларҙың тормошон еңеләйтеү хаҡында әүҙем уйларға кәрәк. Беҙ ике яңы алымды таптыҡ - "Өлкәндәр өсөн халыҡ университеты" һәм социаль туризм программаһы;

-ҡайһы бер райондарҙа йылға-күлдәр ныҡ бысранған. Ҡалаларҙы һәм ауылдарҙы һыу менән тәьмин итеү системалары йыш ҡына иҫкергән, ҡайҙалыр улар бөтөнләй юҡ. Республиканы һыу менән тәьмин итеү буйынса комплекслы программа ҡабул итергә кәрәк;

-әле республикала балалар баҡсаһы йәшендәге 10 баланың 6-һы ғына баҡсаға йөрөй. 40 меңдән ашыу бала сиратта тора. Йыл аҙағына тиклем балалар баҡсаларында 8 мең самаһы урын булдырыласаҡ. Өфө ҡалаһында ғына быйыл 10 балалар баҡсаһы сафҡа индерелә;

-быйыл беҙ эконом класлы торлаҡ һатып алыусылар өсөн кредитты арзанайтырға тейешле ипотека программаһын тормошҡа ашыра башланыҡ. Процент ставкаһының бер өлөшө дәүләт иҫәбенә субсидиялана;

-әүәлге етәкселек беҙгә көслө республиканы мираҫ итеп ҡалдырҙы. Уны кеше етеш йәшәгән, ғәҙелһеҙлеккә урын булмаған, барлыҡ граждандар өсөн тиң мөмкинлектәр тәьмин ителгән төбәккә әйләндереү - беҙҙең бурыс.

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

**Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында өр-яңы спорт-һауыҡтырыу комплексы асылды. Комплексты асыу тантанаһында Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов һәм башҡа ҡунаҡтар ҡатнашты.**

# БАССЕЙНДЫҢ ДА...

## иң ҙуры һәм замансаһы



- Бындай спорт ҡоролмалары беҙгә кәрәк һәм улар һәр ҡалала, һәр район үҙәгендә булырға тейеш. Бөгөн үҙ ишектәрен асҡан комплекста спортсылар һәм шулай уҡ теләге булған һәр кеше шөғөлләнә аласаҡ. Был комплексты төҙөүселәргә, объектты финанслаусыларға һәм төҙөлөшкә үҙенең көсөн һалыусы һәр кешегә рәхмәтемде белдерәм, - тине Рөстәм Хәмитов.

Баш ҡаланың Көньяҡ биҫтәһендә урынлашҡан спорт-һауыҡтырыу комплексы, ысынлап та, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты студенттарын ғына түгел, ә үҙ һаулығын ҡайғыртҡан һәм сәләмәт тормош алып барыусы һәр кешене ҡабул итергә әҙер. Комплекстың дөйөм майҙаны 7,780 квадрат метрҙы тәшкил итә һәм ул 5 модулдән тора: милли көрәште үҫтереү өсөн бәләкәй тренажер залы, заманса ҡорамалдар менән йыһазландырылған тренажер залы, волейбол залы, балалар өсөн һәм төп бассейндар. Бассейндарҙа һыу таҙартыу һәм һыу әҙерләү Австрия системаһы буйынса башҡарыла, шулай уҡ махсус ультрафиолет лампалар һәм механик таҙартыу фильтрҙары ҡуйылған. Быларҙың барыһы ла комплексҡа килеүселәр өсөн бассейн һыуының хәүефһеҙ булыуына булышлыҡ итә. Комплекстың тағы ла бер үҙенсәлеге: бында йөҙөү буйынса балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәбе лә эшләйәсәк һәм улар менән белгестәр, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған тренерҙары шөғөлләнәсәк. Комплекста тағы ла "Әсә һәм бала", ауырлы ҡатындар өсөн, шулай уҡ күреү һәм ишетеү буйынса ғәриптәр өсөн махсус төркөмдәрҙә шөғөлләнергә мөмкин, сколиозды һәм артыҡ ауырлыҡты иҫкәртеүҙе күҙаллаған, бөгөнгө көндә популяр булған аквааэробика, аэробика һәм степаэробика кеүек төркөмдәр ҙә эшләй. Шулай уҡ вертикаль солярий, массаж, сауна һәм фитобар, Һаулыҡ үҙәге лә бар.

Яңы спорт комплексы өс спорт залынан һәм ике бассейндан тыш, дүрт уҡыу аудиторияһы менән дә йыһазландырылған. Бында уҡыу йортоноң физкультура факультеты студенттары шөғөлләнәсәк. Комплекстың асылыуын физкультура факультеты деканы Александр Костарев түбәндәгесә билдәләне:

- Комплекстың асылыуы баш ҡаланың Киров районы халҡы өсөн ҙур ваҡиға, сөнки әлегә тиклем бында бер бассейн да булманы. Бөгөндән иһә барыһына ла физкультура һәм спорт менән шөғөлләнеү мөмкинлеге асыла. 25 метрлыҡ бассейнда төрлө масштабтағы һәм кимәлдәге ярыштар уҙғарырға мөмкин. Шулай уҡ комплекста паралимпия хәрәкәтен үҫтереү өсөн дә бөтә мөмкинлектәр булдырылған. Ә комплекста мультимедия һәм матбуғат үҙәге лә булыуы иһә уны барлыҡ Европа стандарттары талаптарына тура килгән объект итеп таныта.

Яңы спорт-һауыҡтырыу комплексы базаһында республиканың "Урал" волейбол клубы, Башҡортостандың йөҙөү буйынса йыйылма командаһы ла шөғөлләнәсәк.

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

**Марат ХАФИЗОВ, БДПУ-ның студенттар профкомы рәйесе:** Спорт-һауыҡтырыу комплексының асылыуын университет өсөн генә түгел, ә тотош ҡала өсөн мөһим ваҡиға, тип билдәләргә була. Комплекс студенттарҙы киң таралған спорт төрҙәренә ылыҡтырыуҙың бер мөмкинлеге икәнен иҫбатлау оҙаҡ ваҡыт талап итмәҫ тигән фекерҙәмен, сөнки бөгөнгө студенттарға, ғөмүмән, йәштәргә, ниндәйҙер бәләкәй генә мөмкинлек биргәндә һәм матур теләктәрен тормошҡа ашырыуҙа ярҙам итеп ебәргәндә, улар бар өлкәлә ҙур бейеклектәр яулап, яҡшы күрһәткестәргә өлгәшә алыусы быуын. Барлыҡ спорт һөйөүселәрҙе яңы һәм матур комплексыбыҙҙа көтөп ҡалабыҙ.

**Марат ӘХМӘТШИН, БДПУ аспиранты:** Спорт - кеше, бигерәк тә йәштәр тормошонда, ҙур урын биләргә тейеш, тигән фекерҙәмен. Бөгөнгө көндә сәләмәт тормош алып барыу культы көсәйә, үҫә, нығый - был шатлыҡлы күренеш һәм уның тағы ла әүҙемләшеүенә БДПУ-ла ошондай спорт-һауыҡтырыу комплексының асылыуы тик ыңғай күренеш кенә буласаҡ. Үҙемдең дуҫтар араһында ғына ла был комплексҡа барып шөғөлләнергә теләүселәр ифрат күп. Үҙ һаулығынды ҡайғыртыу - үҙеңдең киләсәгеңде хәстәрләү икәнлеген иҫтән сығармай йәшәһәк, киләсәктә үҙебеҙҙе күп проблемаларҙан арындырырбыҙ.

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА.**

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостан Республикаһының фән һәм техника өлкәһендәге Дәүләт премияһы лауреаттары исемлегенә йәнә 13 яңы лауреат өҫтәлде. Премияларҙы Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Азамат Илембәтов тапшырҙы. Бүләкләнеүселәр араһында ӨДАТУ ғалимдары һәм "ЕСМ" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте хеҙмәткәрҙәре, Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институты ғалимдары, Мәскәү дәүләт университеты һәм Башҡорт дәүләт университетының ғалимдар коллективы бар.

✓Башҡортостанда Яңы йыл каникулдары 31 декабрҙән 9 ғинуарға тиклем дауам итәсәк. Был көндәр ял көндәре тип иғлан ителде. 2012 йылда 1 һәм 7 ғинуарҙағы байрам көндәре ял көндәренә тура килә. Ял көндәре йәкшәмбе 1 ғинуарҙан һәм шәмбе 7 ғинуарҙан 2012 йылдың 6 һәм 9 ғинуарына күсерелә. Шулай итеп, Башҡортостанда 2012 йылда 1 - 9 ғинуар ял көндәре булып тора. 2011 йылдың 30 декабрендә эш көнө ҡыҫҡартылмай.

✓"Һиндостан хазинаһы" күргәҙмәһе Өфөлә 1 декабрҙә "Аҡбуҙат" ипподромында асылды һәм 10 көн дауамында эшләйәсәк. Бында ҡулдан туҡылған келәмдәр, ынйынан эшләнгән биҙәүестәр, тәбиғи материалдарҙан төрлө изделиелар, шулай уҡ мебель тәҡдим ителә. Бынан тыш, теләгән һәр кем сәй һәм ҡәһүәнең айырым сорттарынан, көнсығыш илдәренең тәм-томдарынан ауыҙ итә ала.

✓Рәсәйҙең Төбәк үҫеше министрлығында 2010 йыл өсөн "Рәсәйҙең иң төҙөк ҡала (ауыл) биләмәһе" бөтә Рәсәй конкурсында еңеүселәрҙе наградлау тантанаһы үтте. Октябрьский ҡалаһы "100 меңдән алып һәм унан ашыу халҡы булған ҡала биләмәһе" категорияһында өсөнсө урын алды. Рәсәйҙең иң төҙөк ҡалалары иҫәбенә Октябрьский өсөнсө йыл рәттән инә.

✓Өфөлә "Йәш ғаилә -2011" республика конкурсының йомғаҡлау тантанаһы булып үтте. Унда алты ғаилә: Өфөнән - Гөлсәсәк һәм Ринат Ғатауллиндар, Күмертауҙан - Дилә һәм Салауат Ғатауллиндар, Ҡырмыҫҡалы районынан - Миләүшә һәм Ғайса Ғәйфуллиндар, Йәрмәкәй районынан Мария һәм Евгений Аникиндар, Октябрьский ҡалаһынан Татьяна һәм Василий Галеталар сығыш яһаны. Бөрйәндән Айгиҙә менән Рәмис Исламғоловтар Гран-при яуланы.

*ИҠТИСАД ӘЛИФБАҺЫ*

**Донъяны шаулатҡан кризис эҙемтәләре бар донъяның иҡтисади система нигеҙҙәренә яңы күҙлектән сығып ҡарау мөһимлеген аңлатты һәм бөгөн беҙ был юҫыҡта ҙур үҙгәрештәр барыуын күрәбеҙ. Уларҙың береһе - донъя йәмәғәтселегенең ислам ҡанундары буйынса эшләгән банк эшмәкәрлегенә иғтибары артыуы. Кризис ислам банкингына бөтә донъя инвесторҙары һәм аналитиктарының иғтибарын йүнәлтте, сөнки күп банктар банкротҡа ҡалғанда, күп финанс институттар бөлгөнлөккә төшкәндә, бер генә ислам банкы ла үҙен банкрот тип иғлан итмәне.**

# ИСЛАМДЫҢ ТӨП АСЫЛЫ...

## финанс эштәрендә лә сағыла




### Ислам финанс системаһы тураһында

Ислам финанс системаһы иҡтисадының көүҙәләнеше булып ислам банктары тора. Ислам банкы - шәриғәт ҡанундарына ҡаршы килмәгән банк эшмәкәрлеге ул. Ислам банкында займ биреүсе кредитор түгел, ә инвестор булараҡ сығыш яһай. Аҡсаһын банкка һалыусы һәм банк, банк һәм займ алыусы араһындағы бәйләнеш нәҡ ошо принципҡа ҡайтып ҡала, йәғни займ биреүсе займ алыусыға үҙ аҡсаһын биреп тора һәм уның эшлекле партнерына әйләнә. Тулыраҡ аспекттан сығып ҡарайыҡ: вклад яһаусы банктағы иҫәпкә аҡса һала, банк был аҡсаларҙы ниндәйҙер анығ проектты финанслауға ебәрә. Проект уңышлы булһа, банк ошо эшмәкәрлектән алынған килемде аҡса алып тороусы һәм вклад һалыусы араһында бүлә. Шул уҡ ваҡытта килем алдан билдәле түгел, ә бары тик килешеүҙең ҡатнашыусылары араһында бүленәсәк пропорция күләме генә алдан билдәләнә. Төпкәрәк төшөп ҡараһаҡ, инвестор аҡсаһын тура мәғәнәлә банкка түгел, ә аныҡ эшкә һала һәм аҡсаһын банкка һалыуҙан процент түгел, ә аныҡ башҡарылған һәм килем килтергән эштән үҙенә килем ала. Мәҫәлән, банктан хәләл аҙыҡтар һатыуҙы күҙаллаған ашхана өсөн аҡса алып, уны төҙөп бөтөп, уның эшмәкәрлегенән килем ала башлағас, ошо килем менән аҡса биреп тороусы инвестор менән бүлешеү ҡаралған, ә аҡса алып торған өсөн уға процент түләнмәй.

### Дини-психологик фактор

Ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында аҡса алып тороусы бурысын ҡайтара алмаһа, ваҡиғалар нисегерәк тора? Ҡәҙимге банктар, мәҫәлән, был осраҡта, займ алыусынан бурыстың бөтә суммаһын, штраф һәм төрлө пениҙарын тулыһынса ҡайтарыуҙы талап итәсәк. Ә ислам банкы был юлдан бармай, сөнки был мосолман ҡанундарына ҡаршы килеү була. Ислам динен тотоусылар, барлыҡҡа килгән зыянды бары тик займ алыусынан ғына ҡаплатмай, ә бөтә партнерҙар араһында бүлә, йәғни зыянды вклад һалыусы ла, банк та, займ алыусы ла ҡаплай. Был, үҙ сиратында, банкка аҡса биргәндә займ һораусыны, уның атҡарасаҡ проектын төрлө яҡлап ныҡ итеп тикшереүгә лә булышлыҡ итә.

Ислам банк системаһының тотороҡлоғонда бары тик аҡыллы, һаҡсыл ҡараш, актив һәм пассивтар менән иҫәпсел эш итеү генә түгел, ә кешеләрҙең иманды тормоштоң бөтә аспектында ла киң ҡулланыуы һәм дин рөхсәт иткәнсә генә тормош алып барыуы ла ҙур роль уйнай. Хаҡ мосолманға үҙ аҡсаһының ҡайҙа, ниндәй шарттарҙа һаҡланасағы мөһим фактор һәм ул, мосолман ҡанундарын боҙмаҫ өсөн, ҡайһы саҡта үҙ аҡсаһының юғалыу мөмкинлеген белһә лә, хәүефле аҙымға бара йәки үҙ аҡсаһын бер ниндәй процентһыҙ биреп тора. Эксперттар фекеренсә, нәҡ ошо дини-психологик фактор ислам банк системаһының тотороҡло булыуын билдәләй ҙә инде.

### Эшмәкәрлек үҙенсәлектәре

Ислам банк ойошмалары ниндәй формала үҙ эшмәкәрлеген алып бара һуң? Нәҡ үҙенсәлекле формалар һәр банктың, айырыуса ислам банкының, эшмәкәрлек үҙенсәлеген сағылдыра. Мосолман финансистары һәм хоҡуҡ белгестәре, шәриғәт ҡағиҙәләренә ҡаршы килмәгән төрлө финанс операциялар уйлап сығарып, уларҙы ғәмәлдә ҡулланыу мөмкинлеген асҡан. Дини ҡанундарға ярашлы алып барылған төрлө банк операцияларының "хәләл" һәм "хәрәм" (рөхсәт ителгән һәм тыйылған) булыуын күҙәтеүсе төрлө махсус шәриғәт советтары булдырылған. Алдан билдәләп ҡуйылған килем алыуҙы, сусҡасылыҡты, алкоголь эсемлектәрҙе етештереү һәм һатыуҙы, ҡомарлы уйындар уйнатыуҙы күҙаллаған махсус урындар һәм казинолар төҙөүҙе һәм бирелгән ссуда өсөн проценттар алыуҙы күҙаллаған операциялар хәрәм һанала. Ғәҙәттә, ислам банктары үҙ клиенттарына ике төрлө иҫәп асырға тәҡдим итә: ағымдағы иҫәп (һәр саҡ процентһыҙ) һәм инвестиция иҫәбе (бындай иҫәптән килем алыу мөмкинлеге банк аҡса һалған проекттың уңышына бәйле). Үҙенең һәм йәлеп ителгән аҡсалар иҫәбенә банк мушарака (ғәрәпсә - партнерлыҡ), мудараба, мурабаха, иджара, ширҡәтт, кард-аль-хасан һәм башҡа төр финанслауҙар алып бара. Ислам финанс ойошмаларының эшләү формаһы, әлбиттә, быларға ғына ҡайтып ҡалмай, ләкин нәҡ ошо ысулдар ислам кредит-финанс системаһының нигеҙе булып тора.

### Ислам банк системаһы үҫеше

Бөгөн донъяла үҙенә 700 миллиард долларҙан ашыу капитал туплаған 300 тирәһе ислам банкы эшләй. Азия Үҫеш банкы иҫәпләүенсә, ислам финанстарында 1 триллион доллар тирәһе аҡса "әйләнә".

Ислам финанс үҙәктәре булып Персия ҡултығы илдәре һәм Малайзия һанала. Һуңғыһында ғына тик ислам финанс хеҙмәте күрһәтеүсе 5 банк эшләй, шулай уҡ тағы ла 9 урындағы һәм 14 сит ил банкы шәриғәт закондарына тап килгән эшмәкәрлек алып бара. Малайзияның ислам финанс баҙарының әүҙемлеге бөтә Персия ҡултығы илдәре аҡсаһының нәҡ ошо илгә ағылыуына булышлыҡ итә. Шулай уҡ был юҫыҡта Япония, Бөйөк Британия, Индонезия, Бахрейнда ла ыңғай үҫеш күҙәтелә. Ислам ҡанундары буйынса ғына эшмәкәрлек алып барған банк хеҙмәтенә иғтибар бары тик мосолмандар ғына йәшәгән илдәрҙә күҙәтелмәй, ә бөтә донъя финанс структураһын ҡыҙыҡһындыра. Ҡайһы бер Европа һәм Америка банктары хатта үҙ клиенттарын тик ислам нормалары буйынса ғына хеҙмәтләндергән бүлектәр ҙә асҡан (улар араһында Ситибанк һәм ЮБС та бар). Ислам финанстарын үҙ территорияларында йәйелдереү менән Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһенә (СНГ) ингән илдәр ҙә ҡыҙыҡһына. Әзербайджан, Ҡырғыҙстанда ислам ҡанундарын тотҡан банктар уңышлы эшләп килә инде.

Рәсәйҙә ислам финанслау тарихы башын МКБ "Бард-Форте-Банк" банкы менән бәйләргә була. 1997 йылдан үҙенең эшендә ислам ҡанундарын ҡуллана башлаған банктың лицензияһын Рәсәй Үҙәк банкы 2006 йылда кире ала. 2007 йылдан алып "БКС-Фонд "Хәләл" асыҡ пай инвестиция фонды ошо юҫыҡта эшләй. "БКС-Фонд "Хәләл" ПИФы Рәсәйҙә һәм сит илдә йәшәүсе, үҙҙәренең банкка һалған аҡсаларының бары тик ислам ҡанундары рөхсәт иткән йүнәлештә генә "эшләүенә" ышанған мосолман-инвесторҙарға иҫәпләнгән. Шулай уҡ быйыл март айында, ислам ҡанундарына ярашлы бөтә банк хеҙмәтен күрһәтеүсе "Восток-Капитал" Эллипс Банкы филиалы үҙ эшен башланы. Банктың клиенттары булып юридик ойошмалар һәм шәхси кешеләр сығыш яһай ала. Банк кешенең милләтенә, енесенә һәм диненә ҡарамай бөтә төр хеҙмәттәрҙе лә күрһәтә.

Башҡортостанда ла шәриғәт закондарына тап килгән банк хеҙмәттәре күрһәтеү өлкәһе үҙ эшен уңышлы ғына башланы, тип әйтергә була. 2010 йылдан республикала "АФ-Банк"ы беренсе булып махсус мосолман банкы карталары сығара башланы. Был банк картаһы менән төрлө түләүҙәр атҡарырға, бер иҫәптән икенсеһенә аҡса күсерергә, төрлө коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләргә, эш хаҡын, пенсия һәм пособиеларҙы күсерергә була. Быларҙың барыһы өсөн дә, шәриғәт законына ярашлы, проценттар алынмай һәм шулай уҡ картала һаҡланған аҡсаға проценттар өҫтәлмәй. Шулай уҡ республикала "Хазина-Финанс и Ко" дини ширҡәте эшләп килә, ул микро- һәм бәләкәй эшҡыуарлыҡты финанслай. Ағымдағы йылдың март айында ғына үҙ эшен башлауға ҡарамаҫтан, "Хазина-Финанс и Ко" дини ширҡәте күп кенә консультацион һәм финанс ярҙам күрһәтеп тә өлгөргән инде. Төрлө проекттарҙы финанслау менән бер рәттән, ширҡәттең эшмәкәрлеген артабан бергәләп үҫтереү өсөн мосолман ҡәрҙәштәрҙән төрлө вкладтар ҙа ҡабул итә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Донъя иҡтисадында күптән инде ислам ҡанундары буйынса уңышлы эшләп килгән система Рәсәйҙә лә үҙенең лайыҡлы урынын табыр. Ләкин быны тормошҡа ашырыу өсөн ҡануниәткә генә ниндәйҙер үҙгәрештәр индереү әҙ, ә оҙаҡ йылдар буйы аңыбыҙға һалынып килгән - нисек булһа ла һәр тиндән килем алыуға, һәр башҡарған эштең бары тик үҙебеҙ өсөн генә ҡулай яғын ҡайғыртыуға ҡайтып ҡалған ҡараштарҙан да ҡотолоу мөһим. Сөнки исламдың төп асылын тәшкил иткән нигеҙҙәрҙе - бер-береңә ярҙам итеү, килем һәм сығымдарҙы бер тигеҙ өлөштәргә бүлеп күтәреү, был эштә ҡатнашҡан һәр кешене, уның башҡарған эшенә ҡарап ғәҙел баһалауҙы онотмаһаҡ, бар эшебеҙҙең дә уң килеп сығасағына шик юҡ.**

**Гөлназ САФУАНОВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Боғаҡ (зоб)



❖ 200-әр грамм бал, әстерхан сәтләүеге, бешерелмәгән ҡарабойҙай ярмаһын (сәтләүек менән ярманы ҡәһүә онтағыста ваҡларға) бергә бутарға һәм тәүлек эсендә ашап бөтөргә. Өс көндән һуң тағы эшләргә, әммә туғыҙ көн дауамында ҡулланырға. Һуңынан өс көн ял итеп алырға һәм тағы ла "бутҡа" яһап алып, туғыҙ көн дауамында ашарға. Өс-алты айҙан һуң дауалау курсын яңынан ҡабатларға. ❖ 1 ҡалаҡ тәпәй үләнен (лапчатка серебристая) 1 стакан ҡайнар һыуҙа 2-3 минут ҡайнатырға һәм 2 сәғәт төнәтергә. Һөҙгәндән һуң ашар алдынан 50 мл күләмендә көнөнә 4 тапҡыр эсергә. Дауалау курсы - 45 көн.

### Ағыулы диффуз боғаҡ (зоб диффузный токсический)

❖ 20 грамм татлы тамыр үләне тамыры (солодка голая), 40 грамм марена үләне тамыры (марена красная), 40 грамм һабын үләне тамыры (мыльнянка) алып, бергә болғатырға. 1 ҡалаҡ ҡатнашманы 1 стакан һыуҙа 15 минут ҡайнатырға, 12 сәғәт төнәтергә. Көнөнә бер тапҡыр ас ҡарынға 1-2 стакан эсергә. Дауаны һауыҡҡансы ҡабул итергә.

❖ 6 өлөш мелисса, 6 өлөш бесәй үләне тамыры (валериана), 4 өлөш энәлек емеше (боярышник), 4 өлөш ҡандала үләне (донник), 4 өлөш ирланд мүге (ирландский мох), 4 өлөш андыҙ тамыры (девясил), 5 өлөш ҡомалаҡ тубырсыҡтары (хмель), 3 өлөш бесәй ҡойроғо үләне (шалфей лекарственный), 3 өлөш татлы тамыр үләне (солодка голая) алып, бергә болғатырға. 1 ҡалаҡ ҡатнашмаға 250 грамм ҡайнаған һыу ҡойорға, 15 минут ҡайнатырға, ашарҙан 30 минут алда көнөнә өс тапҡыр яртышар стакан эсергә.

❖ тәүлегенә 1 стакан ҡара мышар емешен балға ҡушып ашап бөтөрөгөҙ.

### Эндемик боғаҙ (эндемический зоб)

Йәшәгән ерҙең һыу-тупрағы йодҡа ярлы булғанлыҡтан килеп сыға. 2 ҡалаҡ имән ҡайырыһын 1 стакан ҡайнар һыуҙа 1 сәғәт төнәтергә. Йылы төнәтмәлә йомшаҡ салфетканы еүешләп, муйындың аҫҡы өлөшөнә һалырға һәм өҫтөнән ҡоро таҫтамал ябырға, шарф менән бәйләп ҡуйырға. Компрессы 2-3 сәғәт тоторға, төнгөлөккә ҡалдырырға мөмкин.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

✓ *Аталарының әсәләре менән матур мөнәсәбәттә булыуы һәм бер-береһенен ҡәҙерләүе - балаларға тәбиғәттең бөйөклөгөн һәм аралашыу әҙәптәрен өйрәтеүҙәр.*






# БАЛА ТӘРБИӘЛӘҺӘҢ... үҙең дә тәрбиәле бул

**Бөйөк хаҡтарҙың бөйөгө - ата һәм әсә иңендә булған бала хаҡылыр. Бала хаҡы өсөн ата менән әсә яуаплы булыр һәм әхирәттә лә Аллаһы Тәғәлә алдында яуап бирер.**

Өйрәтелмәгән ат ни арба тарта белмәгән, ни һабан һөрә алмаған кеүек, тәрбиә алмаған бала ла бер эшкә лә ярамаҫ. Бала - ул орлоҡ сәселмәгән ер, йәки яҙылмаған ҡағыҙ, ниндәй орлоҡ сәселһә - шундай иген бирер, нимә яҙылһа - шул уҡылыр.

Бала тәрбиәһе уның бәләкәй сағынан башланып, иң әүәле - яҡшы һәм яман нәмәләр белдерелер, айырым алғанда, таҙалыҡ һәм паҡлыҡҡа ғәҙәтләндерелер, һәр эш һәм ғәҙәттәр ҡағиҙәгә өйләндерелер, төрлө нәмәләр хаҡында ҡыҫҡа ғына булһа ла мәғлүмәт бирелер. Бынан һуң, Ҡөрьән һәм хәҙистәрҙең еңел һәм ҡыҫҡа булғандарының мәғәнәләре аңлатылыр, бөйөк ғалимдар һәм мәшһүр фәйләсуфтәрҙең мәҡәләләре һөйләнелер, тарих ғилеменең, айырым алғанда, Ислам тарихының иң мөһим өлөштәре хәбәр ителер, үҙ әсенә ғибрәттәр алған хикәйәләр һәм миҫалдар һөйләп, үҙҙәренән һығымта яһатылыр.

Һуңынан, тейеш булған дини инаныуҙар боронғо бабаларыбыҙ һәм бөйөмбәрҙәребеҙ инаныуынса аңлатылыр, үтәлеүе тейеш булған Ислам хөкөмдәре белдерелер. Дин кешеләрҙең холҡон гүзәлләндерә, донъяла һәм әхирәттә бәхетле булыуға бер сәбәп булып тора, шуға ла уларҙы өйрәтеүҙең ваҡыты еткәс тә йомшаҡлыҡ күрһәтергә ярамай. Дин ысулы аңлатылып белдерелгәндән һуң, бала ниндәй мәктәпкә бирелһә лә, Аллаһы теләһә, юлынан аҙашмаҫ.

Балаларға биреләсәк тәрбиәнең иң кәрәклеһе - уларҙы гүзәл ғәҙәттәргә өйрәтеү. Паҡлыҡ, йоҡонан иртә тороу, һәр ғәмәлдә бер ҡағиҙәгә инеүҙәү, тәндә мөмкин булған насар ғәҙәттәрҙән һаҡлау, дөрөҫ яҙыу, әҙәпле һөйләшеү, дөрөҫ һүҙле булыу, намаҙҙарҙы ваҡытында уҡыу, милләтеңде яратыу, хеҙмәт, ғәйрәт, фиҙаҡәрлек, эш һөйөү кеүек яҡшы сифаттар гүзәл ғәҙәт иҫәпләнер. Балаларҙы тәрбиәләүҙә иң мөһим шарт - ата һәм әсәнең үҙҙәренең тәрбиәле булыуы. Әгәр ҙә бирәсәк тәрбиәләре менән үҙҙәре үҙ холоҡтарын тәрбиәләмәһәләр, ғүмер буйына тәрбиә эше менән булышһалар ҙа, унан бер файҙа ла күрмәстәр.

Аталарының әсәләре менән матур мөнәсәбәттә булыуы һәм бер-береһенен ҡәҙерләүе - балаларға тәбиғәттең бөйөклөгөн һәм аралашыу әҙәптәрен өйрәтеүҙәр. Әсәләренә баш булып мөғәмәләне күргән балалар аталарын да һөйөр, үҙҙәре ғаиләле булғас, ҡатындарына һәм ирҙәренә ҡарата ошондай мөғәмәләле булыр.

Бала алдында уға белдереп ялған һөйләү, улар алдында ҡысҡырыу, юҡ нәмә өсөн һуғыу - уларҙы холоҡһоҙлоҡҡа, йәбер һәм золомға өйрәтер. Балаларҙың боҙоҡ һүҙҙәренән көлөп тороу, тейешеҙ ғәмәлдәрен яҡшы күреү - уларҙы оятһыҙлыҡҡа, тәрбиәһеҙлеккә һәм бәхетһеҙлеккә өйрәтер.

Балаларға гүзәл уйындар уйнатыу зиһен асылыуға сәбәп булыр. Ваҡыты еткәс, балаларҙы мәктәпкә ебәреү, хатта йыраҡ урындарға ебәреү - ата менән әсә өсөн тейеш булған вазифалыр. Йәш баланы йыраҡ урындарға ебәреү ни ҡәҙәр ауыр күренһә лә, был мәсьәләлә лә сабыр һәм сыҙам булыу кәрәк.

*АҒЫ ЛА БАР, ҠАРАҺЫ ЛА...*

# ЗАМАНСА БАШҠОРТ ЙЫРЫ...

## тамырһыҙ ағас була күрмәһен

**Ошо көндәрҙә "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында йәштәр өсөн көтөп алынған сара - "Йәшлек шоу-2011" йыр һәм моң фестивале үтте. Аңлашыла, фестивалдең маҡсаты изге - йәштәр араһында башҡорт сәнғәтен пропагандалау, сәхнәгә яңы ғына аяҡ баҫҡан йырсыларҙы үҫтереү, башҡорт эстрадаһын юғарыраҡ кимәлгә күтәреү.**



Шамил Яубаҫаров фотоһы.

Был сараның ни тиклем мөһим булғанын ваҡыт күрһәтте кеүек. Туған телдә яңғыраған заманса йырҙарҙы егеттәребеҙ-ҡыҙҙарыбыҙ яратып тыңлай. Фестивалде ойоштороу кимәле лә үҫә барыуын билдәләй был сараға даими йөрөүселәр. Ижади ойоштороусыларҙың, алып барыусыларҙың оҫталығын да һиҙә тамашасы. Ләкин фестивалдең төп ҡатнашыусылары - йәш йырсылар хаҡында һүҙ йөрөткәндә, моғайын, күптәрҙең күңелендә ҡапма-ҡаршы фекерҙәр тыуалыр. Бер яҡтан, уларҙан әллә ни ҙур оҫталыҡ талап итергә лә хаҡыбыҙ юҡ кеүек, сөнки сәнғәттә тәүге аҙымдарын ғына яһайҙар. Уның ҡарауы, был фестивалдә барыһы ла йәшлек менән алдыра. Йәшлеккә хас дәрт, ҡайнар хис ташҡын кеүек урғылып, бар етешһеҙлектәрҙе баҫып китә төҫлө. Шул уҡ ваҡытта йырсы баштан уҡ барыһынан да айырылып торорға, сәхнәгә ҡабатланмаҫ үҙ стиле менән килеп сығырға тейеш. Шунһыҙ ул тамашасы күңелен яулай алмаясаҡ. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, бөгөнгө йәштәрҙән бик һирәктәре генә шундай уңышҡа өлгәшә ала.

Әйткәндәй, был күренеш милли сәнғәтебеҙҙең бөтә өлкәләренә лә ҡағыла, тип билдәләргә кәрәк. Бөгөн йәштәрҙең ижади ҡомары өлкән быуындыҡына ҡарағанда күпкә түбәнерәк. Был беҙгә генә түгел, бөтә Рәсәй халҡына хастыр. Сәбәбе нимәлә һуң? Һорауҙың төбөнә төшә башлаһаң, әллә күпме сәбәптәрен табырға була. Әммә төп сәбәптәрҙең береһе - халыҡ сәнғәтен белмәүҙә, унан айырылыуҙа, заман күҙлегенән ҡарап, уны яңы кимәлгә күтәрмәүҙә, уның биҙәктәрен профессиональ сәхнәгә сығармауҙа, донъя сәнғәтен милли ынйылар менән үреп бирмәүҙә түгелме икән? 90-сы йылдарҙы ғына алып ҡарайыҡ. Ул саҡтағы йәш йырсылар, эстрада төркөмдәре заманса көйҙәрҙе ижад иткәндә лә милли моңдо нигеҙ итеп ала ине. "Каруанһарай" ғына түгел, "Ант", "Акйондоҙ", хатта "Дәрүишхан" төркөмө лә йырҙарын халыҡсан итеп башҡарҙы. Бөгөн күп кенә йәш йырсыларҙың ижады сит ил көйҙәренә башҡортса текст һалыу менән генә сикләнә кеүек. Йәштәрҙең сәхнәлә үҙ- үҙҙәрен тотошо ла (был тәү сиратта рок төркөмдәргә ҡағыла) ризаһыҙлыҡ тыуҙыра.

Беҙ - көнсығыш халҡы. Шуға тотанаҡлыҡ, тыйнаҡлыҡ беҙҙең күркәм сифаттарыбыҙ һанала. Хәҙерге рок төркөмдәребеҙ ошоларҙы сәхнәлә сағылдырһа, ҡалай рухлы күренерҙәр ине. Тап 90-сы йылдарҙағы төркөмдәр кеүек. Шуның урынына улар үҙбаһаһын, бәсен төшөрөп ырғандай, йүгереклəй һәм, киреһенсә, тамашасыға сабырһыҙлыкты, рухһыҙлыкты эйәләтә. Беҙҙең сәхнәне һәм сәнғәтте был биҙәмәй.

Икенсенән, йәш йырсыларыбыҙҙың һөнәри әҙерлеге түбән кимәлдә булыуын танырға кәрәктер, дөрөҫөрәге, әлегә башҡорт йәштәр эстрадаһы профессиональ кимәлдән алыҫ тора. Матди сәбәптәрҙән тыш, был бөгөнгө йәш быуынға хас булған яуапһыҙлыҡ, үҙ эшеңдә үҙемһеҙлек тигән кире сифаттарҙың сағылышылыр. Ә тырышҡандары һөнәри әһәттән күҙгә күренеп үҫә бит. "Бүреләр" төркөмөн алайыҡ. Көйҙәренең профессиональ яңғырашҡа ынтылышы күҙәтелә. Көй ағышында милли һыҙаттар ҙа ҡолаҡҡа салынып ҡала кеүек. Иң мөһиме, сәхнәлә улар үҙҙәрен итәғәтле торорға тырыша, шул сифат менән дә тамашасылы ышандыралар. Рэп стилендә йырлаусы МС Баш (Заһит Ҡунафин) та ижадын профессиональ йәһәттән үҫтереүгә аҙымдар яһай, тип әйтергә була.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йыр сәнғәте, шулай уҡ "Йәшлек шоу" фестивале лә тамашасының күңелен күтәреү менән бергә, уға ниндәйҙер рухи орлоҡ та һалырға тейеш. Егеттәр-ҡыҙҙар заманса башҡорт йырҙарын тыңлай, шул йырҙарға бейей, тибеҙ. Ә ысынында бөгөнгө йәштәребеҙ башҡарған көйҙәрҙе башҡорт йырҙары тип әйтә алабыҙмы, әллә улар тамырһыҙ ағасты хәтерләтәме, һәм йәш тамашасы асылда ниндәй йыр тыңлай һуң?**

**Иҡсан МӨНИРОВ.**

*СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ*

# ҮҘ-ҮҘЕНДЕ ҮҘГӘРТЕҮ ЕҢЕЛМЕ?

**Әгәр һиңә, бөгөндән үк үҙгәр, тиһәләр… һин эште ниҙән башлар инең?**

- Иң тәүҙә ҡағыҙ битенә үҙемдең яҡшы һәм алама һыҙаттарымды яҙып, улар араһынан "иң-индәрен" билдәләп сығыр инем. Үҙемдә сиктән тыш изге күңелле кеше тип иҫәпләйем. Был насар сифат булмаһа ла, ҡайһы ваҡыт минә ҡамасаулай. Изге күңеллелектән бөтөнләйгә ваз кисеү түгел маҡсатым, ә бары тик сиктәрҙән сыҡмаҫҡа, аҡтан ҡараны айырырға өйрәнергә теләр инем. Һәҙемтәлә, һәр нәмәгә тиҙ генә ышанып барыуымдан да бер аҙ арыныр инем.

Артабанғы кире сифатым - сиктән тыш әүҙемлек. Әүҙем булыу яҡшы күренеш, тик әүҙем кешеләр, ғәҙәттә, ваҡыт төшөнсәһе менән иҫәпләшмәйенсә пландар ҡора. Һәр хәлдә, үҙ алдыма көс етмәҫлек пландар ҡороп, яуаплылыҡ алам, шунан инде әйткән эш килеп сыҡмаһа, йәҙ ҡыҙартырға тура килә.

Тағы ла кешеләр менән ҡәҙимгесә аралашыуға өҫтәнлек бирер, әйләнә-тирәләгеләргә иғтибарлыраҡ булыр инем. Бөгөн ситтән тороп аралашыу заманы. Кешеләр бер-береһе менән бер тапҡыр ҙа күрешмәүе һәм интернет селтәрҙәре аша аралашыуы мөмкин, һәм был тәбиғи һанала. Уның яҡшымы, насармы икәнен әлегә баһалай алмайым, ә шулай ҙа ул ҡәҙәре шәп нәмә түгеллеген бер аҙ тәҫмөрләйем.

Үҙгәреү өсөн күпме ваҡыт кәрәк? Нисә көн, нисә ай? Бәлки, бер-ике генә йыл да түгелдер. Һәр хәлдә, үҙ-үҙеңде үҙгәртеү өсөн янында һине аңлаған, һинең үҙгәреүең өсөн ысын күңелдән тырышҡан һәм заман менән бергә атлаған яҡын кешең булырға тейештер. Ә кешегә бер инеп ояланған холоҡто үҙгәртер алдынан - ғәҙәтте, унан да алдараҡ йәшәү рәүешен үҙгәртеү кәрәк бит әле. Йәшәү рәүешен үҙгәртмәй тороп, холоҡто ла үҙгәртеп булмай. Ә беҙҙең ҡалыптар, стереотиптар һәм глобалләшеү процестары заманында йәшәү рәүешен үҙгәртеү өсөн икеләтә, өсләтә көс түгергә тура киләсәк.

**Гөлфиә РӘХИМҠОЛОВА.**
**Баймаҡ ҡалаһы.**

*АРҘАҠЛЫ БАШҠОРТТАР*

**Аҡмулла... Был исем беҙҙең аңыбыҙҙа күптән инде ысын мәғәнәһендә халыҡ уйына, халыҡтың яҡты идеалдарына, хаҡлыҡҡа һәм ғәҙеллеккә, юғары шиғриәткә тоғролок символына әйләнгән. Аҡмулла тигәндә беҙ бөгөн шиғриәт тип ҡабул итәбеҙ, һәм, башҡорт поэзияһының тарихы тураһында уйлаһаҡ, легендар Салауаттан һуңғы XIX быуат донъяһында иң элек ошо илгиҙәр шағирҙы күҙ алдына килтерәбеҙ.**

# МИФТАХЕТДИН АҠМУЛЛА

## (1831-1895)



Шағир һәм фекер эйәһе, мөғәллим һәм атаҡлы мәғрифәтсе Мифтахетдин Аҡмулла үҙенең күренекле замандашы, шағир һәм әҙип, ғалим һәм энциклопедиясы Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев менән бергә XIX быуат башҡорт әҙәбиәте тарихында, Башҡортостандың шул дәүер ижтимағи фекер үсешендә ғәйәт ҙур урын тота. Ул үҙ халҡының рухи мәҙәниәте үсешенә, башҡорт классик поэзияһына бик мөһим өлөш индерә. Башҡорт шағиры Аҡмулла, бөйөк әҙиптәргә хас булғанса, ҡаҙаҡ, татар, ҡараҡалпаҡ һәм төрки телле башҡа халыҡтарҙың шиғриәтенә лә ғәйәт ҙур йоғонто яһай. Ул үҙенең яҡты таланты менән ысын мәғәнәһендә шиғри мәктәп тыуҙыра һәм уның ижады Башҡортостанда XX быуат башындағы демократик поэзияның үсеп китеүе өсөн бик мөһим әҙерлек ролен үтәй.

Аҡмулланың тормош юлы, биографияһы шаҡтай ҡатмарлы. Ғилми әҙәбиәттә һәм архив материалдары нигеҙендә билдәләнгәненсә, буласаҡ шағир 1831 йылдың 14 (яңы стиль менән - 26) декабрендә элекке Ырымбур губернаһының Бәләбәй өйәҙе, 12-се Башҡорт кантоны, Күл иле Мең олоҫоноң (Башҡортостан Республикаһының хәҙерге Миәкә районы) Туҡһанбай ауылында мулла ғаиләһендә тыуған. Атаһы Камалетдин Ишҡужа улы, әсәһе Бибиөммөгөлсөм Сәлимйән ҡыҙы - икеһе лә аҫаба башҡорттар. Туҡһанбайҙа хәҙерге көндә Аҡмулланың атаһы Камалетдин менән бер туған Ғилман Ишҡужа улының ейәндәре һәм күп һанлы ейәнсәрҙәре, ырыу тармағын дауам итеп, иҫән-һау йәшәп ята.

Мифтахетдин бәләкәйҙән бик шуҡ, теремек, тынғыһыҙ бала булып үҫә. Башланғыс белемде ул үҙенең тыуған ауылында, ә унан һуң күрше ауылда Лоҡман тигән башҡорт муллаһынан ала. Мәнәүезтамаҡ һәм Әнәс мәҙрәсәләрендә уҡый. 1850 йылдар уртаһында Стәрлебаш мәҙрәсәһендә бер аҙ белем ала, билдәле суфый шағир Шәмсетдин Зәкиҙең шәкерте була. Артабан, тыуған ауылына ҡайтып, кәләш алып, бер аҙ ваҡыт ата йортонда йәшәй. Әммә, бәхетһеҙлеккә, йәмәғәте йәшләй генә вафат булып ҡала. Мифтахетдин, шул сәбәпле булһа кәрәк, ауылында төпләнеп ҡала алмай. 1850 йылдарҙың аҙағында тынғыһыҙ тәбиғәтле йәш шағир атаһының атын, тунын рөхсәтһеҙ алып, ил гиҙеп сығып китә. Башта Ырымбур тарафына йүнәлә, унан Йайыҡ, Миәс буйҙарына, Урал арьяғы далаларына юл тота. Башҡорт ауылдарында, ҡаҙаҡ йәйләүҙәрендә балалар уҡытып, алдынғы ҡарашлы мөғәллим, мулдәкә булып танала.

Легендалар Мифтахетдиндың ошо ваҡыттан, йәғни ғилем эстәп өйҙән сығып киткәндән һуң, тыуған ауылы Туҡһанбайға ун ике - ун өс йыл үткәс кенә ҡайтыуы тураһында һөйләй. Һәм, ысынлап та, шағирҙың 1974 йылда СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының археографик экспедицияһы хеҙмәткәрҙәре Ҡанны-Төркәйҙән табып алып ҡайткан "Атайыма хат" тигән шиғырында һәм уның Туҡһанбайҙа табылған тулы вариантында тыуған ауылына ун өс йылда бер ҡайтыуы тураһында әйтелгән. Тимәк, был хаҡтағы риүәйәттәр ысынбарлыҡты сағылдыра. Шағирҙың Туҡһанбайға ҡайтыуы, фараз итеүебеҙ буйынса, 1872 йылға, йәғни Троицк төрмәһенән ҡотолоп сыҡҡан осорға, тура килә. Шағир был юлы ла төрлө сәбәптәр арҡаһында ата йортонда тороп ҡала алмай. Атаһы, уның элекке башбаштаҡлыҡын кисерә алмайынса, ара-тирә үпкәһен белдереп тә торғандыр, күрәһең. Аҡмулла йәнә ил гиҙеп сығып китә.

Мифтахетдин иң элек губерна үҙәге булған шул ҡалаға барып сыға, ә артабан ул йәнә Урал арьяғына, Троицк тирәһенә йүнәлә. Ғүмеренең ҙур ғына өлөшөн ул Башҡортостандың нәҡ Урал арьяғы райондарында, башҡорт һәм ҡаҙаҡ далаларында үткәрә. Үҙенең тыуған илендә атаҡлы башҡорт шағиры һәм мәғрифәтсе булып дан ҡаҙанған Мифтахетдин, Әхнәф Харисов һүҙҙәре менән әйтһәк, ҡаҙаҡтарға ла бер үк мәғрифәт йырын йырлай, ғилемгә арҡыры төшкән иҫке ҡарашлы муллаларҙан көлә, байҙарҙы шелтәләй. Әҙип 1895 йылдың 8(20) октябрендә, Ҡаҙағстандан тыуған яҡтарына ҡайтып килгән сағында, Миәс ҡалаһы менән Һарыстан станцияһы араһында фажиғәле һәләк була. Мифтахетдин Аҡмулла Миәс ҡалаһының мосолмандар зыяратында ерләнгән.

"Аҡмулла, Салауаттан һуң беренсе тапҡыр,- тип яҙҙы профессор Ә. И. Харисов,- үҙ халҡына, башҡорттарым, тип ихлас күңелдән өндәшә, уны айырыуса бер ярһыныу менән мәғрифәткә, ғилемгә саҡыра". Туған халҡын мотлаҡ мәҙәниәтле итеп күрергә тырышыу, тормошта гел генә ана шул бөйөк идея менән янып йәшәү Аҡмулланы ғәжәп тәрән фекерле, аҫыл поэтикалы шиғырҙар яҙыуға килтергән. Был шиғырҙарҙың ҡайһы берҙәрен - беренсе ишетеү менән үк йөрәккә үтеп ингәндәрен - бөгөн дә үҙенең күңел һандығында һаҡлаусылар бар. "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк..." - мәшһүр шағирҙың иң мөһим әҫәрҙәренең береһе. Шиғыр ысын мәғәнәһендә афористик ижад, классик шиғриәт үрнәге булараҡ та диҡҡәтте биләп тора.

Мифтахетдин халыҡ араһында тура һүҙле, үткер телле, саф күңелле шағир һәм мөғәллим булараҡ дан ала, һәр төрлө ҡул эштәренә оҫталығы менән дә хөрмәт ҡаҙана. Ул китаптар һәм ҡулъяҙмалар, столярлыҡ ҡоралдары тейәлгән, кейем-һалым өсөн дә айырым бүлкәһе булған арбаһына ат егеп, төрлө яҡтарға, төрлө тарафтарға барып сыға, Башҡортостан һәм Ҡаҙағстан далаларының йә бер төбәгендә, йә икенсеһендә ғүмер итә. Халыҡҡа тоғро күңелле булғаны һәм яҡтылыҡҡа - белемгә өндәгәне өсөн уны Аҡ мулла тип атайҙар һәм был исем, ул ижад иткән шиғырҙар шиғриәт ҡәҙерен белеүселәр хәтерендә оҙаҡ йылдар буйы һаҡлана. Аҡмулла - ысын мәғәнәһендә ҙур шиғыр оҫтаһы, үҙенең ижады менән тотош бер поэтик мәктәп тыуҙырған бөйөк әҙиптәрҙең береһе. Уның фекер тәрәнлеге, поэтик камиллыҡ йәһәтенән XX быуат кешеһен дә таң ҡалдырырҙай бик күп әҫәрҙәре бар.

Тура һүҙле, халыҡ ғәменә, ил фекеренә тоғро күңелле булғаны өсөн дә Аҡмулланың тормош юлы бик ауыр һынауҙар һәм ҡаршылыҡтар аша үтә. Ошо уҡ сифаттары арҡаһында ул 1867-1871 йылдарҙа ялған ялыу буйынса төрмәлә ултырып сыға. Ләкин һынмаҫ та, һығылмаҫ та тәбиғәтле ҡаһарман рухлы сәсән-шағир бының менән дә үҙ йәшәйешенән сигенеү генә түгел, үҙенең "рәҫлау һәм кире ҡағыу, саҡырыу һәм өндәү поэзияһы" булған шиғырҙарында яңынан-яңы уй һәм фекер балҡыштарына өлгәшә.

Халыҡ араһында йәшәп, хеҙмәтсән халыҡтың ауыр, аяныслы яҙмышын йәне-тәне менән аңлап һәм тойоп, быуын-быуын сәсәндәр мираҫын, халыҡтың рухи ҡиммәттәрен, классик поэзия өлгөләрен бөтөн тәрәнлегендә үҙләштереп, Аҡмулла үҙ заманының төрки донъяһындағы һәр бер яңылыҡҡа уғата һиҙгер бер шағир һәм атаҡлы фекер эйәһе булып күтәрелә. Ул Урал-Волга төбәгендә һәм Ҡаҙағстанда XIX быуат шарттарында баш алған демократик мәғрифәтселек хәрәкәтен илһамланып күтәреп ала. Был хәрәкәттә башҡорттарҙан М. Аҡмулла һәм М. Өмөтбаев, татарҙарҙан Ҡ. Насыри һәм Ш. Мәржәни, ҡаҙаҡтарҙан И. Алтынһарин һәм Абай айырыуса күренекле роль уйнай.

Мәғрифәтселек тарихында Аҡмулла оло талантлы шағир булараҡ та, яҡтылыҡҡа, прогресҡа ынтылыусы мөғәллим сифатында ла ғәйәт яҡты эҙ ҡалдыра. Башҡорт һәм ҡаҙаҡ халыҡтарының мәғариф тарихында уның исеме балаларҙы туған телдә уҡытыуҙы ғәмәлдә хәл итеүсе эшмәкәр булараҡ та әһәмиәтле урын ала.

Аҡмулла - XIX быуат башҡорт әҙәбиәтендә иң ҙур мәғрифәтсе шағирҙарҙың береһе. Әҙиптең бик күп әҫәрҙәрендә уның мәғрифәтселек ҡараштары, халыҡ тормошонда яңылыҡҡа, донъяуи үҫешкә өлгәшеү өсөн аң-белемде, ғилем-һөнәрҙе хәл иткес көс тип раҫлаусы идеялары ғәйәт тәрән һәм үҙенсәлекле әйтеп бирелгән. Халыҡты мәғрифәткә саҡырыу, йәмғиәт үҫешендәге алға китештә аң-белем өлкәһендәге үҫеш менән бәйләү ул дәүерҙәге тарихи шарттарҙа, әлбиттә, алдынғы күренеш булған.

Аҡмулла, үҙ замановы өсөн ысын мәғәнәһендә әхлаҡ-тәрбиә кодексы тыуҙырып, халыҡҡа ошо өгөт-нәсихәтен ҡанатлы шиғриәт саралары менән әйтеп биргән. Уның сәсәндәр теленән төшмәгән, Башҡортостандың һәр төбәгендә әле хәҙер ҙә көйләп яттан һөйләнелгән мәшһүр "Нәсихәттәр"енең төп өлөшө, "беренсе", "икенсе", "өсөнсө", тип, кеше өсөн иң кәрәкле сифаттарҙы (етегә тиклем) бербер артлы атап үтеүгә ҡоролған. Уның ижадының тәрән образлылығы, кешелеклелеге, уның фекерләүенә хас диалектик әҙмә-эҙлелек шағирҙың иң яҡшы әҫәрҙәрен һоҡланғыс поэтик ҡомарткылар, заманалар үткән һайын яңынанянь төҫтәр менән балҡып китерҙәй ыныйы-гәүһәрҙәр рәтенә ҡуя. Аҡмулланың бәғзе шиғырҙары уның үҙ дәүеренән бигерәк беҙҙең бөгөнгөгә, быуаттар аша нәҡ хәҙерге дәүер кешеһенә төбәп әйтелгәндәй.

Эйе, Аҡмулла аҡылы, Аҡмулла һабаҡтары беҙҙең өсөн, бер яҡтан, башҡорт шиғриәтенең бөтөн халыҡтарҙы ла таң ҡалдырырлыҡ юғары ҡаҙанышы, классик өлгөләре булһа, икенсенән, ул беҙҙең милли мәҙәниәтебеҙҙең айырылғыһыҙ бер өлөшө, ул ысын мәғәнәһендә тормош һабағы, был ғәҙелһеҙ донъяла әҙәм балаларының яралы күңеленә йыуаныс һәм таяныс. Былдай изгелекле миссия бары тик халыҡ өсөн йәшәп, бар ғүмерен халыҡҡа хеҙмәт итеүгә арнаған ысын халыҡ шағирҙарының ғына өлөшөнә төшә. Башҡортостан күгендә Аҡмулла йондоҙо Салауат, Вәлиди, Бабич, Мортазиндар йондоҙо менән бер тиң балҡый, был йондоҙҙар заманалар үткән һайын сағыуыраҡ була бара, улар ғаләм киңлектәренән үҙ ерендә үҙ яҙмышын үҙ ҡулына алыу ынтылышы менән йәшәгән халҡыбыҙҙың киләсәккә юлдарын яҡтыртып тора.

**Рәшит ШӘКҮР.**

**"Арҙаҡлы башҡорттар" китабынан.**

✓ *Үлде, тип уйлап, иптәштәре уның кәүҙәһен соҡорға алып барып ауҙара. Бер-ике көндән һуң вафат булған икенсе бер әсирҙе алып килгәндә, иптәштәренең береһе Ахунйәндең керпектәре һелкенеп ҡуйғанын шәйләп ҡала.*



# МӘҢГЕЛЕК

## йәки Бер башҡорттоң

**Был яҙмышты аңламаҫһың. Берәүҙәргә ул шул тиклем мәрхәмәтле, изгелекле. Ә икенселәрҙе, ғүмер буйы тормоштоң бер сөңгөлөнән икенсеһенә ырғытып, ғазап эсендә йәшәтә. Башҡортостандың Стәрлетамаҡ ҡалаһы янындағы Маҡар ауылында тыуған Ахунйән Сафиуллиндың ғибрәтле яҙмышы ла быға бер миҫал.**

### Кем ул Ахунйән Сафиуллин?

Ҡайһы берҙәрегеҙҙең башынан, беҙ белмәгән берәй яҙыусымы икән, әллә берәй ғалиммы, тигән уйҙар ҙа йүгергәндер. Ул ундай шәхес түгел, ә ябай башҡорт егете, хәрби офицер. 1916 йылда донъяға килгән Ахунйәнде яҙмыштың зәһәр елдәре тыуған ауылынан 9 йәшендә үк айыра. Өфөлә ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, уҡыуын артабан Троицк педагогия училищеһында дауам итә ул. Ҡулына дипломын алғас, Белорет ҡалаһындағы бер мәктәптә эшләй, һуңынан уны Магнитогорск ҡалаһына математика уҡытыусыһы итеп ебәрәләр. Артабан Киев ҡалаһындағы артиллерия хәрби уҡыу йортон тамамлай. Шунан инде уның өсөн тормоштоң әйтеп бөтөргөһөҙ ауыр һынауҙары башлана. 1939 йылда финдарға ҡаршы һуғыштарҙа, алмандар менән бәрелештәрҙә ҡатнаша. 1942 йылда ҡамауҙа ҡалып, бер нисә һуғышсы менән яралы Ахунйән Сафиуллин дошман ҡулына эләгә. Был уның тыуған ил һауаһын һуңғы һулауы була. Аҙаҡ Алмания концлагерҙарындағы тотҡонлоҡ, үлем соҡоронан ҡотолоп, яңынан үлемгә хөкөм ителеүҙәр - ҡыҫҡаһы, дошманына ла теләмәҫлек әсирлек йылдары башлана. Әсирлек осоронда ул тиф менән ауырый. Үлде, тип уйлап, иптәштәре уның кәүҙәһен соҡорға алып барып ауҙара. Бер-ике көндән һуң вафат булған икенсе бер әсирҙе алып килгәндә, иптәштәренең береһе Ахунйәндең керпектәре һелкенеп ҡуйғанын шәйләп ҡала. Пульсын тикшереп ҡарағас, тәнендә саҡ сыҡмаған йәне барлығы асыҡлана. Ҡайтып, был хаҡта лагерҙың татар табибы Абдуссәләмгә әйтәләр. Абдуссәләм уны үлем соҡоронан алып, дауалай һәм аяҡҡа баҫтыра (һуғыш тамамланғас, был табиб АҠШ-ҡа китеп урынлаша һәм шунда вафат була).

Ахунйән Сафиуллин телдәр өйрәнергә бик әүәҫ булғанлыҡтан, алман телен тиҙ арала үҙләштерә, туған телендәге кеүек дөрөҫ һәм акцентһыҙ һөйләшә. Алманияла ниндәйҙер заводта эшләй. Бер алман ҡыҙына ғашиҡ булып, өйләнә. Был никахтан бер ҡыҙ бала донъяға килә.

### Ҡосағыңа һыйындыр, Төркиә!

1950 йылда Совет әсирҙәренә йәшәр өсөн бер нисә ил тәҡдим ителә: АҠШ, Алмания, Франция, Төркиә... Мәғлүм булыуынса, ул ваҡыттарҙа әсирлектә булған кешегә Советтар Союзына юлдар ябыҡ була. Кире ҡайтҡан хәлдә лә Сталиндың зәһәр үлем ҡамсыһы уларға ябырыр шәфҡәт күрһәтмәҫ ине. Кемдер шунда уҡ АҠШ-ҡа китә, бәғзеләр Алманияла төпләнеп ҡала. Ә Ахун Сафиуллин һәм уның бер нисә татар һәм башҡорт милләтле иптәше, мосолман һәм төрки иле, тип, Төркиәгә китергә ҡарар итә. Тик Ахун ағайҙың алман ҡатыны ғына: "Ҡара төрөктәр араһында йәшәйһем юҡ", - тип, Истамбулға юлға сығыуҙан баш тарта. Ахунйән ағай өҙөлөп һөйгән ҡыҙын үҙе менән алырға бик теләһә лә, алман полицайы баланы пароходтан үткәрмәй.

Татар һәм башҡорт әсирҙәре Истамбулға 1950 йылдың 30 августында килеп етә. Ҡояшлы йәйге көн. Тирә-йүндә сәскәләр. Күңелгә дәрт өҫтәп, оркестр уйнай. Ҡайҙа ҡарама - аййондоҙло төрөк әләме. Ерле халыҡтың йөҙөндә шатлыҡ балҡый. Әсирҙәрҙең ҡыуаныс эсенә һыймай: бына бит, Төркиә дәүләте уларҙы нисек ҡаршылай! Оҙаҡ йылдар әсирлектә йүнле һүҙ ишетмәгән, яҡты йөҙ күрмәгән инсан затына күп кәрәкме ни?! Хистәр ташҡыны йәш булып аға. Тик... иртәрәк шатланғандар икән. Сәскәләр, музыка, әләмдәр Төркиәләге Еңеү байрамы хөрмәтенә булған... 1950 йылдың 30 августын Ахунйән Сафиуллин ана шулай хәтерләй.

Уларҙы Истамбул ситенә, Тузла тигән райондағы лагерҙарға урынлаштыралар. Әсир-ҡунаҡтарҙы унда 7 ай бер ҡайҙа сығармай тоталар. Ләкин йәшәү шарттары насар булмай: ашау-эсеү яҡшы, торор урындары таҙа, бөхтә. Был ваҡыт эсендә Төркиә дәүләтенең хәүефһеҙлек идараһы һәр береһенән ентекләп һорау ала, тормоштарындағы һәр мизгелде тикшерә. Шунан һуң ғына "әсир" ярлығынан ҡотолоп, Төркиә йөмһүриәтенең тулы хоҡуҡлы ватандашына әүереләләр. Паспорт алғанда барыһы ла тағы бер ҡабат исем-фамилияларын үҙгәртәләр. Береһе үҙен "Ураллы" ти, икенсеһе "Иҙелле", өсөнсөһө "Башҡорт" тигән фамилия ала. Алманияла әсәһенең ҡыҙ сағындағы фамилияһын исем итеп алып, Таһир Сафи улы булып йөрөгән яҙмабыҙ геройы, тарихты яҡшы белгән, күрәһең, төрки халыҡтарының ата-бабалары Алтай төбәгенән сыҡҡан тип, үҙенә "Алтай" тигән фамилия ала. Ә исемен "Таһир" тип белдерә. Тыуған урыны графаһына - "Иҙел-Урал", тыуған йылын да 1916 тип түгел, 1918 тип яҙҙыра.

Ирекҡә өлгәшкәс, Таһир Алтай Истамбулда йәшәүсе яҡташы, күрше ауыл егете Зәки Вәлиди Туғанды эҙләп таба. Уның менән нисек яңы тормош башлап ебәреү тураһында кәңәшләшә һәм бурысҡа аҡса һорай. Ләкин күренекле ғалимдың яуабы ҡоро була: "Аҡса кәрәк булһа, эшләп тап!" Иң яҡын күргән кешеһенең был һүҙҙәре ауыр тәьҫир итә уға: "Бөгөн үк мине эшкә кем алһын?" - ти. Зәки Вәлиди: " Пароходтарҙан йөк ташы!" - ти, өҙөп кенә. Йылдар үткәс, Таһир Алтай был ваҡиғаны: "Ярай әле Зәки ағай ул ваҡытта аҡса бирмәгән. Бәлки, мин еңел юлды ғына һайлаусы бер моҡот булып китер инем", - тип иҫкәлә. Һәм бер ҡасан да бер кемдән бурысҡа алмау принцибына тоғро ҡала. Өйләнгәс, Зәки Вәлиди уның ғаилә дуҫына әйләнә. Ҡунаҡҡа йөрөшәләр, бер-береһе менән хат алышалар.

### Яҙмыштарҙан уҙмыш юҡ бит ул…

Төркиә буйлап милләттәштәрен эҙләп йөрөгәндә, Ахунйәнгә Анкара ҡалаһында Ғәлимулла тигән татар кешеһе йәшәгәнлеген, хужалығының бик ҙур булғанлығын, өйөнә татарҙарҙың йыш йыйылғанын әйтәләр. Эҙләп таба ул уларҙы. Ғәлимулла ағай менән ҡатыны Мөнәүүәр ханым, улар менән бергә йәшәүсе инәләре Мәхбүбамал түтәй (Мөнәүүәр ханымдың әсәһе) үкһеҙ башҡорт егетенә ҡунаҡсыллыҡ күрһәтәләр. Ни тиһәң дә, Өфөлә үҫкән Мәхбүбамал әбейҙеңң тыуған яғы кешеһе бит ул. Нәҡ илдәгесә, татар ризыҡтары бешереп, мул табын ҡоралар. Алты балалы ғаиләлә береһенән-береһе сибәр өс еткән ҡыҙ ҙа була: Алия, Сөйөмбикә, Мөзәйән. Таһир ағай шуларҙың уртансыһын айырыуса оҡшата. Эшләй башлап, ҡулына аҡса төшә башлағас, ҡыҙҙы һората килә, ләкин ағайҙары: "Ул башҡа менән йәрәшкән", - тип, һүҙҙе ҡыҫҡа тота.

Төркиә дәүләте Таһир Алтайҙы Ҡара диңгеҙ ярына һыйынып урынлашҡан ҡара күмер ҡалаһы - Зонгулдактағы шахтаға эшкә урынлаштыра. Алманиянан килгән әсирҙәр араһында юғары белемлеләр күп булмай. Ҡулында дипломы булмаһа ла, уның белем кимәлен тиҙ самалай төрөк чиновниктары. Үҙ-үҙен тотошо, фекер йөрөтөүе, әйткәндә шунда уҡ аңлауы, эшен еренә еткереп үтәй белеүе төрөк белгестәрендә ҙур хөрмәт уята. Русса, башҡортса, алманса, инглизсә белгән Таһир ағай улар өсөн баһалап бөткөһөҙ хазина була. Шахталағы эшенән тыш, ул диңгеҙ таможняһында сит ил пароходтарын тикшереүсе-тәржемәсе булып та эшләргә тейеш була. Дәүләт уға, тәүлектең теләһә ҡайһы сәғәтендә эшкә сығыу мөмкинлеген хәстәрләп, махсус автомобиль һәм шофер бирә. Ул йылдарҙа Төркиәнең ябай халҡына ҡорал йөрөтөргә ярамаған. Әммә Таһир ағайҙы сифатлы ҡорал менән тәмин итәләр. Ул, ғөмүмән, күңел асыу мәжлестәренә лә ҡоралһыҙ бармай, ғүмер буйы үҙен хәрбиҙәрсә тота. Ергә нығ баҫып, етеҙ атлап йөрөшө, һүҙен, әмер биргән кеүек киҫеп әйтеп ҡуйыуы тирә-яҡтағыларҙы шөрләтә лә. Бәлки, шундай булырға кәрәк булғандыр ҙа. Сит илдә, яңғыҙ башҡа тормош итеүҙәре, ай-һай, ҡыйын бит ул! Йомшаҡ холоҡ менән әллә ҡайҙа барып булмаҫлығын аңлағандыр Ахунйән. Тыштан дошманын өҙгөләргә әҙер арыҫлан кеүек күренһә лә, күңеле йомшаҡ, йөрәге мәрхәмәт хисе менән тулы булған уның. Бер ҡасан кешеләрҙе нахаҡҡа гәйепләмәгән, рәнйетмәгән, башҡаның хаҡына ҡағылмаған, ярҙам һорап килеүселәрҙе бороп ебәрмәгән. Ҡырым татарҙары Атилла менән Фатиманы үҙ исәбенә, гөрләтеп туй яһап, тормош юлына баҫтырғанын әле хәҙер ҙә шаҡ ҡатып һөйләйҙәр. Шуғалыр ҙа, Зонгулдак халҡы - олоһо, кесеһе уны хөрмәт иткән. "Тәржеман Таһир" тип йөрөткәндәр үҙен. Әле хәҙер ҙә уны ул ҡалала хәтерләүселәр байтаҡ. Игелекле шәхес итеп кенә түгел, шат күңелле, йор һүҙле, йырға-бейеүгә оҫта зат булып күңелдәрендә урын алған ул. Ҡайҙан өйрәнгәндер, башҡорт, татар, чечен, черкес, ҡарасәй бейеүҙәрен иҫ китмәле башҡара торған булған Ахунйән. Хоҙай Тәғәлә уға тауышты ла ҡыҙғанмаған: татарҙар, башҡорттар янында моңло итеп халыҡ йырҙарын һуҙһа, Яңы йыл кисәләрендә "Калинка", Подмосковные вечера", "Очи черные", "Катюша" кеүек рус йырҙарын үҙе гармунда уйнап, үҙе йырлап, ҡунаҡтарҙы таң ҡалдыра торған булған.

Педагогия һәм хәрби уҡыу йорттарында белем алған егет дипломлы белгес булыуҙың әһәмиәтен яҡшы аңлай. Анкара университетының Тел, тарих һәм география факультетының рус теле бүлегенә имтихандарын экстерн тапшырып, юғары белемле профессиональ тәржемәсе булып китә. Нәҡ шул көндәрҙә бер курд ҡыҙы менән ғаилә ҡороп ебәрә. Ләкин был бергәлек оҙаҡ дауам итмәй. Башҡа тәрбиә, башҡа менталитет һәм ғөрөф-ғәҙәттәр ир-ҡатын араһындағы мөнәсәбәттәргә кире йоғонто яһай.

Бер байрамда Анкара ҡалаһына юлы төшкәс, Таһир-Ахунйән Ғәлимулла ағайҙарға ла кереп сығырға ҡарар итә. Ишекте Сөйөмбикә аса. Баҡтиһән, ҡыҙ әле һаман кейәүҙә түгел. Йәше лә инде утыҙҙан уҙған. Таһир, ҡатынынан айырылғас, икенсе мәртәбә, туғыҙ йылдан һуң, ҡабат Сөйөмбикәнең ҡулын һорай. Был юлы бер кем дә ҡаршы килмәй. Шулай итеп, 1959 йылдың апрелендә улар тормош һуҡмаҡтарын берләштерә.

Ахунйәнгә, әйтерһең, ҡанаттар үҫә - хәрәкәттәре еңеләйеп китә, үҙенсә әйтһәк, тормоштоң мәғәнәһен тоя башлай. Һуңғы көнөнә тиклем ҡатынын ҡәҙерләп, наҙлап, "ханымсыҡым" тип йәшәй. Тыуған илде һағыныу хәсрәте артҡа сигенгәндәй була. Эштән ҡайтҡас,



Ахунйән Сафиуллиндың атаһы менән әсәһе.

***✓ Сәләм өләшөн ҡысҡырып уҡығандан һуң, туҡтап ҡала... Уҡый алмай... Әзмәүерҙәй ир затының күҙҙәренән шишмә кеүек йәш аға... Һөйөнөс, көйөнөс, ғазап, хәсрәт, һағыш, йыуаныс тулы тамсылар тып-тып өҫтәлгә тама...***

# ӘРНЕҮ, ситтәге яҙмышы


Ахунйән Сафиуллин.

киске аштан һуң сәғәттәр буйы туғандары, ата-әсәһе, ауылы тураһында һөйләй ул ҡатынына. Иҫәнлектәрен белгеһе килә. "Һуңынан ҡулына гармун алып, "Карурман"ды, "Гөлъямал"ды һуҙа ине" - тип иҫкә ала Сөйөмбикә ханым.

### Араларҙың алыҫлығын яҡынайта хаттар

Ахун Сафиуллиндың үҙ атаһы Әбделкарам исемле булып, баҫмасылар менән бергә ҡыҙылдарға ҡаршы көрәшеп йөрөгән еренән хәбәрһеҙ юғала. Әсәһе Хәмиҙә апай Рәхим Зиннәтуллин тигән кешегә кейәүгә сыға. Бик мәрхәмәтле зат була ул, Ахунйәнде үҙ малайы кеүек ҡабул итә. Үгәй атайҙан ике энеһе, бер һеңлеһе донъяға ауаз һала: 1928 йылда - Нурулла, 1931 йылда - Фәһимә, 1936 йылда Дамир тыуа. Үҙенән кеселәрҙе ҡарашып, ата-әсәһенә ярҙам итеп үҫкән Ахунйән үҫеп етеп, ҙур кеше булыу тураһында хыяллана һәм йыш ҡына энеләренә: "Мин һеҙҙең уң ҡанатығыҙ булырмын", - ти.

Сөйөмбикә ханым иренең тыуған илен шул тиклем юҡһыныуын уртаҡлашып, бер көндө тыуған илдәге ата-әсәләренә хат яҙырға кәңәш итә. Аҙналар буйы уйланып йөрөгәндән һуң, Таһир ағай тәүәккәлләп бер нисә адресҡа хат яҙа. Ләкин Төркиәләге исем-фамилияһын күрһәтмәй, уны ҡатыны Сөйөмбикә Алтай исеменән ебәрә. Ҡурҡа-шикләнә ебәргән хаттарҙан һуң, көн дә яр буйына туҡталып, Ҡара диңгеҙҙең арғы яғын күрергә теләгәндәй, күҙҙәрен диңгеҙҙең осһоҙ-ҡырыйһыҙ офоғона төкләп, уйланып торорға ғәҙәтләнеп китә Ахунйән: "Хаттарым барып еттеме? Яуап яҙырҙармы? Яҡындарыма зарар итмәнемме?" - тигән мең төрлө һорау бимазалай уның уйын.

Тыуған илдән килгән беренсе яуап хатын Сөйөмбикә ханым ала. Шатлыҡлы хәбәрҙе иренә тиҙерәк еткергеһе килһә лә, туҡталып ҡала: "Хатты алғас, йөрәгем урынынан атылып сығырҙай булып тибә, үҙ-үҙемә урын таба алмай ҡаңғырам. Бер аҙ тынысланғас, Таһирға хатты нисек биреү тураһында план ҡора башланым. Конвертты кинәт кенә ҡулына тотторһам, йөрәге түҙмәҫ кеүек тойолдо. Ул-был булыуҙан ҡурҡтым. Шуға күрә әкрен генә, ваҡиғаға эйәләштереп кенә хәбәр итергә кәрәк, тигән ҡарарға килдем, - тип һөйләй ул алыҫта ҡалған көндәрҙе иҫкә алып Сөйөмбикә ханым. - Эштән ҡайтып, киске ашҡа ултырғас, һүҙҙе Башҡортостан тураһында башлап, әкренләп кенә туғандарына алып барып тоташтырҙым. "Таһир, уларҙан хат килеп төшһә, нишләр инең?", - тип һораным. Ул: "Үкһеп илар инем", - тине. Кеҫәмдән алып, хатты алдына ҡуйҙым... "

Ҡалтыранған ҡулдары менән конвертты аса Ахунйән. Ҡатыны тороп, артына килеп баҫа. Сәләм өләшөн ҡысҡырып уҡығандан һуң, туҡтап ҡала... Уҡый алмай... Әзмәүерҙәй ир затының күҙҙәренән шишмә кеүек йәш аға... Һөйөнөс, көйөнөс, ғазап, хәсрәт, һағыш, йыуаныс тулы тамсылар тып-тып өҫтәлгә тама...

Сөйөмбикә ханым: "Мин кириллицаны танымайым, хатты ҡысҡырып уҡый башлағайны, дауам итә алманы. Шулай берберебеҙгә һыйынған килеш шаҡтай ваҡыт иланыҡ", - тип, хәҙер ҙә күҙ йәштәрен тыя алмай һөйләй ул әлеге ваҡиға тураһында.

Инде өлкән улдарын мәңгегә юғалттыҡ тип йөрөгән Рәхим ағай менән Хәмиҙә апай, саҡрымдар ғына түгел, бәлки, йылдар алыҫлығында, сит илдә иҫән-имен йәшәүсе улдарынан хат алып, ҙур тетрәнеү кисерә. Әсә түшәккә йығыла. Был турала Дамирҙың ҡатыны Әлфиә: "Ахунйән ағай, хатығыҙҙы алғас, нимә эшләргә белмәнек. Өс көн йүнләп ашай-эсә, йоҡлай алмай йөшәнек, әсәй ун биш көн ауырып ятты. Бөтөн ағай-энеләр килеп, карточкаларығыҙҙы ҡарап, хатығыҙҙы уҡып илашты, ҡыуанышты. Шундай ҙур шатлыҡ булды... Ебәргән фотоларығыҙға ҡарап туя алмайбыҙ, 3 көн беҙҙә торһа, 3 көн Нурулла ағайҙарҙа тора... Был хатты әсәй итеп тора, мин яҙам...Әсәй һине уйлап ҡартайҙы, сәстәре ап-аҡ булды инде. Ахунйәнемде күреп үлһәм ярар инде, тип теләп ултыра.

Ахунйәнем, ҡайт, балам,
Ҡайтһаң, ҡорбандар салам.
Һинең кеүек кеше күрһәм,
Тилмереп ҡарап ҡалам", - тип илай әсәй..."

Хаттарҙан Рәхим ағай менән Хәмиҙә апайҙың Учалы ҡасабаһында төпсөк улдары Дамир менән килене Әлфиә тәрбиәһендә ғүмер итеүҙәре аңлашыла. Энеһе Нурулланың да өйләнеп, Дамирҙарға яҡын йәшәгәнлеге, һеңлеһе Фәһименең кейәүгә сығып, 1955 йылда Үзбәкстанға китеп урынлашыуы хәбәр ителә. Башҡа туған-тыумасалар тураһында ла мәғлүмәттәр бирелә. Ахунйәнде ата-әсәһе һәм туғандары һуңғы тапҡыр 1939 йылда күрә. Һуңғы хаты 1941 йылдың һуңында килә. Ана шунан бирле хәбәр-хәтер булмай унан. Шулай итеп, ике тиҫтә самаһы йылдан һуң, 1960-1962 йылдарҙа ике арала хаттар йөрөй башлай, фотолар алышына. Һәр хаттарында Ахунйәнде ҡайтып китергә өгөтләйҙәр.

Хаттарҙы күбрәк Дамир менән ҡатыны Әлфиә яҙа. Нурулла ағай ҙа яуапһыҙ ҡалдырмай. Хатта Үзбәкстандағы һеңлеһе Фәһимә менән ире Тәлғәт тә Төркиәләге ағаларына йылы хаттарын юллай. Үгәй атаһы Рәхим ағай хаттарын ғәрәп хәрефтәре менән яҙа. Бер көндө атай кешенән сираттағы хат килеп төшә. Унда: "Улым, бер ҡәүем хат яҙмай тор әле", - тиелгән була. Сәбәбе аныҡ ҡына әйтелмәһә лә, Ахунйән эштең ниҙә икәнен аңлай. Хат яҙыуҙы туҡтата. Ике яҡлы бәйләнеш яңынан өҙөлә. Шунан һуң Ахунйәнгә ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем яҡындарына хат ебәрергә һәм уларҙан хәбәр-хәтер алырға насип булмай. Был хәлде ул бик ауыр кисерә. Дөрөҫ, 1975 йылдың йәйендәә Төркиәнең Измир ҡалаһындағы халыҡ-ара күргәҙмәгә Ҡаҙандан килгән Фәрит исемле кеше аша ата-әсәһенә бүләктәр ебәрә. Ләкин аманатының тапшырылыуы-тапшырылмауын белмәй ҡала.

1974 йылда лайыҡлы ялға сыҡҡас, ул, әсир булып Алманиянан бергә килгән яҡташтары, көрәштәштәре кәңәше менән Башҡортостандан булған Абдулла Башҡорт һәм Татарстандың Бөгөлмә районы Ҡарабаш ҡасабаһынан булған Әхмәт Шәрифуғлы йәшәгән Маниса ҡалаһына күсенергә ҡарар итә. "Мине Зонгулдакта 100 лаз (Ҡара диңгеҙ буйы райондарында йәшәүсе халыҡ) күмгәнсе, ләхеткә татар менән башҡорт индерһен", - ти ул, әйтерһең, үлем яҡынлашҡанын һиҙә. Манисаға күсенгәс, уны бер мәктәпкә алман теле уҡытырға саҡыралар. Бик яратып керешкән эшен дауам итә алмай, инсульт кисерә. Бер нисә көн дауаханала ятҡандан һуң, 1975 йылдың 20 декабрендә яратҡан ҡатыны Сөйөмбикә менән 12 йәшлек малайы Кюршатты етем итеп, һағынып һөйләгән Урал тауҙарын һәм ғәзиз әсәһен күрә алмайынса, 59 йәшендә яҡты донъянан китеп бара.

Малайының аккордеонда уйнауын теләгән була Ахунйән. Үлеренә бер нисә ай ҡала Измирҙән уға аккордеон алып ҡайтып бирә. Сөйөмбикә ханым, ире үлеп киткәс, матди яҡтан ауырлыҡ кисереүенә ҡарамаҫтан, Кюршатты музыка мәктәбенә яҙҙыра. Кюршат аккордеонда уйнарға өйрәнә.

### Тамырҙарҙы эҙләгәндә...

Төркиә университетына уҡырға килгәс, 1993 йылда, мин Кюршат Алтай менән таныштым. Ул атаһының яҙмышын һөйләп, Башҡортостандағы туғандарын табырға теләгәнлеген белдерҙе. Минә бер тартма хаттар һәм фотографиялар күрһәтте. Хаттар күберәк кириллица менән яҙылғанлыҡтан, уларҙағы моң-зарҙы Кюршат белмәй ине. Белгәндәре - әсәһе һөйләгәндәр менән генә сикләнә. Хаттарҙы мин илай-илай уҡыным. Ҡулымдағы һарғайған ҡағыҙҙарҙа бер кешенең генә түгел, нисәмә шәхестең хәсрәте, һағыныу-һағыштары, өмөттәре сағыла. Уларҙа шатлыҡ та, ғәжәпләнеү ҙә, шул уҡ ваҡытта ғәжизлек тә ярылып ята...

Дамир ағай: "Ағай, һине яҡшы хәтерләйем, мине түшәмгә һикертеп уйната инең. Һине оҙатҡан саҡты ла онотманым. ...Нисек аңлатырға ла белмәйем. Шатлыҡтан минең күңелдә хистәр бураны уйнай. Көлгөм дә килә, илағым да..."- тип яҙа. 1960 йылдың 12 мартында яҙған хатында Нурулла ағай: "Ағай, мин һинә оҡшап бейеүсе булып киттем. Үҙемдең баяным бар. Мәжлестәрҙә уйнайым. ...Ағай, һинең булмау мине бик ҙур ҡыйынлыҡтарға төшөрҙө. Һуғыштан һуңғы хәлдәрҙе яҙып бөтөрөрлөк түгел. ...Һин беҙгә: "Мин һеҙҙең уң ҡанатығыҙ булырмын," - ти торғайның, ләкин беҙҙең уң ҡанатыбыҙҙың һыныуына инде 23 йыл булды. Бүтән оса алмабыҙмы икән ни?.. Мин һәр ваҡыт һине уйлап йөрөнөм һәм иҫән тип хис итә инем. Ғүмер буйы һинең менән ғорурландым. Туғандарса мөхәббәт менән, бергә тормош алып барырға ышанып йәшәнем", - тип, күңел хәсрәтен ҡағыҙға түккән.

* * *

Өйләнешергә ҡарар иткәс, Кюршатты атай-әсәйем менән таныштырыр өсөн Татарстанға алып ҡайттым. Татарстан дәүләт радиоһының "Йәшлек" студияһы уның менән әңгәмә үткәрҙе. Ул атаһының туғандары тураһында һөйләне, улар менән осрашырға теләүен белдерҙе. Бәлки, радиотапшырыуҙы берәйһе ишетер, тигән өмөтө бар ине уның. Өйләнешкәндән һуң, 1995, 1996, 1998 йылдарҙа элек килгән хаттарҙың адрестарына: Башҡортостандың Учалы районына һәм Үзбәкстандың Сурхандарья өлкәһе Байсун районына хаттар яҙҙыҡ. Тик улар яуапһыҙ ҡалды. Өмөтһөҙ -шайтан, тиҙәр бит, 2003 йылдың февралендә шул уҡ адрестарға Кюршат тағы хат яҙып һалды. Һәм, ниһәйәт, бер-бер артлы ике яуап алдыҡ. Уның береһен - Башҡортостандан Нурулла ағай, икенсеһен - Үзбәкстандан кесе энеһе Дамирҙың ҡатыны Әлфиә апай яҙған.

Нурулла Зәйнуллиндан килгән хатта: "Хатығыҙҙы кисә, 19 мартта алып уҡыныҡ. Бик шатландыҡ. Уны Учалыла йәшәүсе оло улыбыҙ Римгә биргәндәр, улар беҙгә тапшырҙы. Ахунйән ағайҙың вафат булыуына бик көйөндөк. Бигерәк тә минә ауыр булды. Сөнки беҙ уны һамаңғаса иҫәндер, тип уйланыҡ. Яҡты донъянан бик иртә киткән икән, урыны ожмахта булһын!" - тиелә.

Хаттарҙан шул аңлашыла: Ахунйәндең ата-әсәһе - 1962 йылда, энеләре Нурулла менән Дамир 1967 йылда Үзбәкстанға күсенеп киткәндәр. Тимәк, Измир күргәҙмәһенә килгән Фәрит тигән кеше Ахундың бүләктәрен, теләһә лә, тапшыра алмаған булып сыға.

Дамир ете йыл бергә йәшәгән ҡатыны Әлфиәнән айырылып, икенсегә өйләнә, Краснодар ҡалаһына китеп урынлаша һәм 1996 йылда шунда вафат була.

Нурулла ағай 1991 йылда ғаиләһе менән Башҡортостанға кире әйләнеп ҡайта, Шишмә район үҙәгенән йорт һатып алалар. Ә Рәхим бабай менән Хәмиҙә әбей үзбәк илендә Сурхандарья өлкәһендә мәңгелеккә ятып ҡалалар. Рәхим бабай - 1966 йылда, Хәмиҙә әбей 1974 йылдың октябрендә гүр эйәһе була. Был хаҡта, бер йылдан һуң үҙе лә донъя менән хушлашасаҡ Ахунйән, әлбиттә, хәбәрҙар булмай. Әсә, төрөк тупраҡтарында һағыныу хәсрәте сигеүсе малайы кеүек уҡ, һуңғы көнөнә тиклем күрешеп осрашыу өмөтө менән йәшәй, теләнән балаҡайының исемен төшөрмәй. Оло килене Гөлсирә апай: "Инәй, мәрхүм, ҡулына тиҫбеһен ала ине лә, тәҙрә төбөнә килеп ултырып: "Эй, Ахунйәнем, Ахунйәнем!"- тип уфтана ине. Ҡайһы ваҡыт ҡысҡырып-ҡысҡырып илай торғайны", - ти. Әлфиә апай ҙа хаттарының һәр береһендә: "Әсәй үлгәнсе Ахун ағайҙы һөйләне, бер генә күреп үлһәм ине, тип теләне, ләкин Хоҙай насип итмәгән икән", - тип яҙа.

(Дауамы 10-сы биттә).

*✓ - Юҡ, тәмәкене түгел, ә һеҙҙең бармаҡты, рәхим итегеҙ, - тинем мин уға. - Аңламаным. Нишләп мин үҙемдең бармағымды утҡа ҡуйырға тейеш? - Тамуҡта яныуҙан ҡурҡмағас, һеҙгә бер генә бармаҡты утҡа ҡуйыу ҡыйынмы ни?*



**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

Ахунйән уларға юллаған хаттарына: "Мәсеткә керәм дә, һеҙҙе уйлап, намаҙымды тамамлай алмайынса, илап сығып китәм", - тигән юлдар теҙә... Был - кеше күңелендәге һағыш дауылын, бәргеләнгән йәндең һыҡрауын артығы менән аңлата түгелме?..

## Хыялдарҙың тормошҡа ашыуы

Кюршаттың тормоштағы иң ҙур теләктәренең береһе тормошҡа ашты: ул атаһының әнеһен, туғандарын тапты. Сират - улар менән күрешеүҙә. Нурулла ағай 80-се йәше менән бара, осрашыуҙы кисектереү мөмкин түгел.

Инженер-механик һәм менеджмент һөнәрҙәренә эйә булған ирем шәхси компанияларҙың юғары дәрәжәле етәксеһе булып эшләй, эше тығыҙ, йыллыҡ ял алыу мөмкинлеге юҡ. Ләкин уйҙары менән Башҡортостан һәм Үзбәкстанға көн дә барып ҡайта. Шулай 5 йыл ваҡыт уҙып китте. Был заман эсендә хаттар алышынды, телефондан тауыштарыбыҙ ишетелде.

Кюршат менән мин 2007 йылдың декабрендә Ҡазанда булаcаҡ Бөтөн донъя татарҙар конгресының IV ҡоролтайына делегат булып һайландыҡ. Тормош иптәшем эшенән бер аҙналыҡ ял алды. Башҡортостанға шылтыратып, Ҡазанға ҡайтасағыбыҙҙы хәбәр иттек. Һәм, ниһәйәт, Кюршаттың икенсе хыялы ла тормошҡа ашты. 14 декабрҙән киске сәғәттәрендә, концерт программаһы башланғас, ҡулымдағы телефон шылтыраны. Бер туған апайым Нурулла ағайҙың беҙҙе "Татарстан" ҡунаҡханаһында көткәнлеген хәбәр итте. Такси тотоп, тиҙерәк уның менән осрашыуға ашҡындыҡ. Фотографияларҙа олпат көүҙәле күренһә лә, тормошта сандыр кеше булып сыҡты Нурулла ағай. Күрешергә Урал, Ирек исемле улдары һәм кейәүе Камил менән килгән. Кюршат менән ҡосаҡлашып, береһе - атаһының, икенсеһе ағаһының тәнен, йәнен хис итергә теләгәндәй, бер-беренән ысҡындырмай, шаҡтай ваҡыт шулай торҙолар. Һүҙҙәргә урын юҡ икән бындай ваҡытта. Бер-береһенә төбәлгән ҡараштар һәм яңаҡтар буйлап йүгергән ҡайнар йәштәр 60 йыллыҡ хәсрәт-һағышты, үкенес-юғалтуҙарҙы һүҙһеҙ ҙә аңлата.

Беренсе күрешеү генә булһа ла, бер-беребеҙҙән ятһынманыҡ, әйтерһең, көн дә осрашып торған туғандарбыҙ - һүҙҙе һүҙгә ялғап гәп ҡорҙоҡ. Кюршат атаһы тураһында һөйләне, Нурулла ағай Ахунйән ағаһының йәш саҡтары менән таныштырҙы. Хаттарға яҙылмаған хәлдәргә туҡталдылар. Йылдар буйы башта һорау ғына булып йөрөгән ҡайһы бер ваҡиғаларға асыҡлыҡ керттеләр. Ахунйәнде үлгән тип уйлаған үҙ атаһы Әбделкарам Сафиуллин, баҫмасыларҙан айырылып, Ҡазағстанда төпләнеп ҡалған була. Бер ҡаҙаҡ ҡыҙына өйләнә, бер малайы тыуа. Шуныһы ҡыҙыҡ: ул улына Таһир тип исем ҡуша. Ләкин беренсе ҡатынынан тыуған Ахунйәнен онотмай, уның хәбәрһеҙ юғалғанлығына хәбәрҙар булып, 1953 йылда баҡыйлыҡҡа күсә. Һеңлеләре Фәһимә апайҙың да ғүмере ҡыҫҡа була. Ул 1988 йылдың ғинуарында үлеп китә. Ҡәбере - Ташкентта. Уның ире Тәлғәт 1997 йылда вафат була.

1960 йылдарҙың башында ҡоролған бәйләнештәрҙең өҙөлөү сәбәптәренә килһәк, Ахунйән ағайҙың шикләнеүе урынлы булып сыға: Төркиәләге малайҙарынан йыш хат килеп торғанлығын белеп алған КГБ хеҙмәткәрҙәре көн дә килеп, Рәхим бабай менән Хәмиҙә әбейҙе борсой башлайҙар: "Нисек итһәгеҙ итегеҙ, улығыҙҙы кире ҡайтартығыҙ", - тиҙәр улар. Шунлыҡтан, ҡурҡыуға төшкән атай кеше Ахунйәндең хат яҙмай тороуын үтенә.

Тыуған иленә кире ҡайтҡас, инде тимер диуарҙар ҙа емерелгәс, Төркиә - Рәсәй араһында көртәләр ҡалмағанлыҡтан, Нурулла Зәйнуллин Ахунйән ағаһын эҙләй башлай. Башҡортостанда нәшер ителеүсе "Заман" төрөк гәзитенең Төркиәлә баҫылған баҫмаһына 1993 йылда иғлан бирә. Әлбиттә, ул ағаһының исем-фамилиялары үҙгәргәнлеген, уның балаһы булыуы тураһында белмәй, сөнки улар хат алышҡан йылдарҙа Кюршат әле донъяға килмәгән була. Ағаһын Төркиәнән килеүсе кешеләрҙән дә һораштырып ҡарай, ләкин һөҙөмтәһеҙ. Бер үк йылдарҙа Төркиәнән - Кюршат, Башҡортостандан Нурулла ағай эҙләнеүҙәр алып бара, тик юлдары ғына киҫешмәй. Тимәк, һәр нәмәнең үҙ ваҡыты бар.

* * *

Ахунйән Сафиуллиндың тормош юлы үтә бормалы, яҙмышындағы ҡайһы бер сәхифәләр әле уҡылмаған. Уның Совет армияһында ниндәй частә хеҙмәт итеүе, ҡайһы фронтта әсир төшкәнлеге билдәһеҙ. Иң мөһиме - алман ҡатынынан тыуған ҡыҙы тураһында мәғлүмәттәр юҡ кимәлендә. Ахунйәндә ҡыҙының бер генә фотоһы һаҡланған. 3-4 йәшлек бала төшкән фотографияның артына алманса "1948 йыл. Һинең Ингридың" тип яҙылған. Был фото Ахунйән ағайға нисек килеп эләккән, ҡыҙы нисәнсе йылда тыуған, 1948 йыл - фотоға төшөү датаһымы, әллә фотоны ебәреү датаһымы - билдәһеҙ. Бала Ингрид исемле булғанмы, әллә әсәһеме - былар әле асылмаған сер. Ахунйән ҡыҙының рәсемен ҡәҙерләп һаҡлаһа ла, уның тураһында Сөйөмбикә ханым менән һөйләшмәгән, күрәһең. Ахунйән Сафиуллин вайымһыҙ кеше булмаған, ул ҡыҙының тормошон йыраҡтан ғына булһа ла күҙәтеп торғандыр кеүек. Сөнки Зонгулдак шахтаһында алман инженерҙары менән бергә эшләгән. Улар, төрөктәргә ҡарағанда, Ахунйәнде яҡынраҡ күргән. Ул Алманияға бер нисә мәртәбә командировкаға ла барып ҡайта. Бәлки, ҡыҙы менән осрашҡандыр ҙа. Тик был турала яҡындарына ләм-мим, бер һүҙ әйтмәй. Бәлки, үткән тормошонда аҡтарынып йөрөргә теләмәгәндер, бәлки, башҡа сәбәптәр...

Бөгөн малайы Кюршат Алтай атаһынан мираҫ булып ҡалған өс теләген тормошҡа ашырыу маҡсаты менән йәшәй: атаһы тыуып-үҫкән яҡтарҙы ҡайтып күреү һәм Үзбәкстанға барып, Рәхим бабай менән Хәмиҙә әбейҙең ҡәберҙәренә атаһының ҡәберенән алынған бер ус тупраҡ һибеп, рухтарына доға ҡылыу. Өсөнсөһө иһә - Алманиялағы апаһын эҙләп табыу.

* * *

Яҙмыш яҙмышҡа оҡшамай, тиҙәр. Тик кешеләр яҙмышының оҡшаш яҡтары булыуын мин был ғаилә драмаһында асыҡ күрҙем. Ҡәйнәм Сөйөмбикәнең атаһы Гәлимулла Беренсе Бөтөн донъя һуғышына китеп юғалған. Алмания аша Төркиәгә килеп эләккәс, уға тыуған яғы Ырымбур өлкәһе Байтуған районы Ҡамышлы ауылына ҡайтырға насип булмай. Ул да, кейәүе кеүек, ғүмер буйы тыуған тупрағын, ата-әсәһен һағынып йәшәй. Яҡындарын бер күрергә зар булып, Төркиәлә төпләнә.

Ҡайным Ахунйәндең әсир сифатында Алманиянан Төркиәгә килгән һәм бында бер-береһе менән күрешеп йәшәгән дуҫтары - Абдулла Башҡорт менән Әхмәт Шәрәфуғлының да яҙмыштары бер-береһенекенә бик оҡшаш. Улар әле бер нисә йыл элек кенә гүр эйәһе булды. Абдулла Башҡорт, 80 йәшенә еткәс, үлеренә бер нисә ай ҡалғанда, ниһәйәт, тыуған яҡтарын ҡайтып күреү бәхетенә ирешә. Әхмәт ағай иһә, Таҡташ шиғырҙарын яттан һөйләй-һөйләй, тыуған нигеҙендә сәскә атҡан муйыл еҫтәрен һағынып, ғүмеренең 17-се йылында сығып киткән Ҡарабаш ауылын ҡайтып күрә алмай, баҡый донъяға күсә. Йөрәктәрҙә мәңгелек әрнеү ҡалдырып...

**Рушания АЛТАЙ.**



**Кюршат (һулдан икенсе) Башҡортостандағы туғандары менән.**

*ФӘҺЕМЛЕ ХИКӘЙӘТ*

# ҠАБЫҘҒЫС

Минең менән купела йәнәш ултырған бер ир ҡаршыла ултырған егеткә мөрәжәғәт итте:

- Сигарет менән ваҡыт тиҙерәк үтә, тартыр инең.

Егет ир кешенең тәҡдименән баш тартып, уға былай тип яуап бирҙе:

- Рәхмәт, мин тартмайым.

- Ярар инде. Һин әсәйең белеп ҡуйыр тип ҡурҡаһың бит, эйеме? - тип ныҡышты ир.

Был һүҙҙәр ҡалған юлсыларҙа - көлкө, ә миндә асыу тыуҙырҙы. Бынан алда мин бер аҙ ойоп алырға теләгәйнем, хәҙер инде күҙҙәремде астым һәм егетте ентекләп ҡараным. Уға яҡынса 20-22 йәш ине, уның аҡ һәм асыҡ сырайлы йөҙө уңайһыҙланыуҙан бер аҙ ҡыҙарҙы.

Ир һаман дауам итте:

-Һин, моғайын, һыра ла эсмәйһеңдер? Ысын бит, эсмәйһеңме?

Егет яуап бирҙе:

- Бөтә спиртлы эсемлектәр - хәрәм, тыйылған ғәмәл. Үҙенән-үҙе аңлашыла, мин уларҙы ҡулланмайым.

Был һөйләшеү бөтә юлсыларҙы ла ҡыҙыҡһындырҙы. Уларҙың һәр ҡайһыһы һөйләшеүҙе иғтибар менән тыңлай башланы.

Ир тағы һорау бирҙе:

- Йә, ул сағында һин "Рус лотоһы" тураһында ни әйтерһең? Бит уны телевизорҙан даими рекламалайҙар.

- Бөтәһе лә шул уҡ бер нәмә. Быныһы ла һәм бөтә ҡалған отошло уйындар - хәрәм.

- Эй, һин бигерәк суфый кеше икән, дуҫҡай. Тегеһе лә - хәрәм, быныһы ла - хәрәм.

Был юлы егет өндәшмәне, һөйләшеү уны ялҡытты, быныһы аңлашылып тора ине. Ир кеше үҙенең һорауҙары менән егетте аптырашта ҡалдырҙым тип уйланы һәм тәмәке төтөнөн уның яғына өрөп, еңеүсе ҡиәфәттә:

- Тамуҡ утынан ҡурҡып, һеҙ үҙегеҙҙе был донъяның бөтә ләззәттәренән мәхрүм итәһегеҙ? Һеҙҙеңсә, был тормошмо инде? - тине.

Мин иргә нәфрәтләнеп ҡараным һәм ул минең ҡарашымды тойҙо. Ә шулай ҙа миңә ҡарап ахмаҡ һүҙ һөйләүен дауам итте:

- Дуҫҡай, нимә әйтерһең быға? Был шулай түгелме ни? Беҙ бөтәбеҙ ҙә тамуҡта янмайбыҙмы ни? Бөтәбеҙ бергәләп барһаҡ, унда беҙгә уҙ тиклем ҡурҡыныс булмаҫ, тип уйлайым.

Бының менән ул мине бөтөнләй сығырымдан сығарҙы. Тотанаҡлы булырға тырышып, мин уға яуап бирҙем:

- Ҡарап торам да, һеҙ бик ҡыйыу кеше күренәһегеҙ. Һеҙ уттан да ҡурҡмайһығыҙ икән?

- Ҡурҡмайым, тип әйтә алмайым. Ә шулай ҙа был тормошта теттереп йәшәп ҡалырға кәрәк, тип иҫәпләйем...

Шулай тип әйткәндән һуң, ул бер аҙ ғына уйланып торҙо һәм йәнә тәҙрә янында ятҡан тәмәкеһенә үрелде. Мин уның ҡабыҙғыһын эләктерергә өлгөрөп ҡалдым һәм уны тоҡандырып, уға яҡын килтерҙем:

- Рәхим итегеҙ, тоҡандырығыҙ.

Ул ҡабаланмай ғына ҡаптан тәмәке алып, тоҡандырырға уйланы:

- Юҡ, тәмәкене түгел, ә һеҙҙең бармаҡты, рәхим итегеҙ, - тинем мин уға.

- Аңламаным. Нишләп мин үҙемдең бармағымды утҡа ҡуйырға тейеш?

- Тамуҡта яныуҙан ҡурҡмағас, һеҙгә бер генә бармаҡты утҡа ҡуйыу ҡыйынмы ни?

Бөтәһе лә уның нимә әйтеүен көттө.

Ир кеше нимә тип яуап бирергә лә белмәне, һәм ул ошо ике сәғәт буйына ахмаҡ һүҙ һөйләгәнен аңлап ҡалды. Бер аҙ ваҡыт өндәшмәй торғандан һуң, ул ҡапыл:

- Бына минең туҡталыш, - тип һикереп торҙо ла, поездан сығып, вокзал алдындағы ығы-зығыла күҙҙән юғалды.

Мин һуңынан ғына аңғарҙым: уның ҡабыҙғысы минең ҡулда тороп ҡалғайны. Ҡаршыла ултырған егет быны күреп йылмайҙы. Мин уға ҡабыҙғысты һондом һәм былай тинем:

- Һин тартмаһаң да, ул һиндә ҡалһын. Хәҙер һин беләһең инде уның менән нисек файҙаланырға икәнен.

**Мөршиҙә УЙСАЛ.**
**"Хаҡ динемдә беренсе аҙымдарым" китабынан.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# МӘҘӘНИӘТ ҮӘ ИМАН ҒЫНА...

## өмөтһеҙлектән ҡурсалар

**Мәүлит ЯМАЛЕТДИН, шағир һәм прозаик:** Бөгөн халыҡты борсоған мәсьәләләр бик күп, улар иҫәпһеҙ-һанһыҙ. Шулар араһында һуңғы йылдарҙа ҡалҡып сыҡҡан һәм һаман ҡырҡыулаша барған бик ҙур проблема - социаль тигеҙһеҙлек. Демократия тип ҡабул ителгән үҙгәртеп ҡороуҙарға бәйле ул. Бөтә башҡа проблемалар ошо социаль тигеҙһеҙлеккә бәйләнгән. Мәҫәлән, эшһеҙлек, бик түбән эш хаҡы, медицина хеҙмәтләндереүенең, белем алыуҙың түләүлегә әйләнә барыуы - социаль тигеҙһеҙлек күренеше. Хатта туған телебеҙгә, рухиәтебеҙгә, тимәк, милләтебеҙгә ҡарата һөжүм шул проблемаға бәйле. Социаль тигеҙһеҙлектең тыуыуына бер ҡатлам кешеләрҙең үтә нығ байып китеүе лә сәбәпсе. Байҙар менән ябай халыҡ араһында тәрән упҡын барлыҡҡа килде. Бер нисә кешенең бар дәүләт милкен үҙ ҡулына туплап йәшәүен халыҡ күрә, әммә бер ни ҙә эшләй алмай. Күптәр үҙ эшен асырға теләй, ләкин аҡсаһыҙлыҡҡа барып төртөлә.

Социаль тигеҙһеҙлекте нисек бөтөрөргә, тигән һорауға берәү ҙә аныҡ ҡына яуап таба алмауы мөмкин. Әлеге көндә һаман да баҙар шарттарына күсеү бара. Уны ҡырағай баҙар тип тә әйтәләр бит инде. Әйе, сәйәсмәндәр, власть вәкилдәре халыҡ мәнфәғәтен яҡлауҙа ихтыяр көсө күрһәтә алмай. Барыһы ла матур лозунгылар артына ғына йәшеренеп ултыра кеүек. Халыҡ тарафынан һайланған депутаттарыбыҙ ҙа ышанысты аҡламай, тип тураһын әйтергә кәрәк. Элек халыҡтың йөҙ проценты ла һайлауҙарға йөрөй торғайны, хәҙер йәмғиәтебеҙ ил етәкселегенә лә, депутаттарға ла ышанысын юғалтыу арҡаһында, үҙе бөтә нәмәгә битараф. Бигерәк тә ҡалаларҙа, Мәскәү кеүек ҙур мегаполистарҙа сәйәсәткә битараф ҡараусылар күбәйҙе. Был өмөтһеҙлек билдәһе. Халыҡ, ауырлыҡтарҙы йырып сығыу, социаль тигеҙлеккә килеү юлын күрмәгәнлектән, өмөтөн юғалта.

Өмөтлө киләсәккә бер генә ышаныс бар. Алдынғы ҡарашлы ғалимдарыбыҙ, зыялыларыбыҙ халыҡҡа юл күрһәтергә тейеш. Минеңсә, әҙәбиәт, сәнғәт, ғөмүмән, мәҙәниәт һәр кемдә ниндәйҙер ышаныс тыуҙырырға, өмөтһеҙлеккә юл ҡуймаҫҡа тейеш. Ижад ителгән әҫәр кешенең күңелен күтәрһен. Яҙыусы ла, граждан булараҡ та үҙ бурысымды шунда күрәм. Сөнки халыҡ борон-борондан, беҙҙең сәсәнебеҙ бына шулай тине, тип, сәсән һүҙенә ҡарап торған. Һәм, иң мөһиме, иманға ҡайтырға кәрәк. Ә иман - бик ҙур төшөнсә. Кескәй генә дүрт хәрефле һүҙгә әхлаҡ та, әҙәп тә, теленә тоғролоҡ та, иленә һөйөү ҙә, үҙ-ара мөнәсәбәт тә һыя. Иманлы кеше түрә булһа ла иманын юғалтмаясаҡ, халыҡты ҡайғыртасаҡ, уның өсөн көсөн йәлләмәйәсәк. Ә әлеге мәлдә иҫ киткес тиҙлек менән байыған кешеләрҙең күңелендә иман юҡ. Хаҡ юлды мәҙәниәттән, имандың күтәрелеп сығыуында ғына күрәм мин.

**Рубриканы Мөнир ИҠСАНОВ алып бара.**

ЙӘШ ШАҒИР АУАЗЫ

# ЕРГӘ КИЛГӘН ШОМЛО ТЫНЛЫҠ

## Бары бер генә минутлыҡ...

**Мин шиғырҙарымды альтернатив шиғырҙар тип атар инем. Улар ҡараңғылыҡ, төнгө романтика, мистика менән һуғарылған. Шундай стилдә ижад ителгән поэтик әҫәрҙәрҙең дә йәшәргә хоҡуғы бар, тип уйлайым. Һәр хәлдә, уларҙың уҡыусыға барып етеү мөмкинлеге булһа, уҡыусы һәм ваҡыт ул әҫәрҙәрҙең ғүмерен, яҙмышын үҙе хәл итәсәк. Минең әйтер һүҙем бар, һәм мин уны үҙемсә генә әйтәм.**

* * *

Ахырыһы, береһе лә
Көтмәгәндер мине бында.
Гүйә лә мин теләнмәгән
Балалай үҙ ҡарынымда.

Мин тағырмын сәстәремә
Таҫмалар - ҡаранан-ҡара.
Был таҫмаларымды һүтеп
Ҡараңғы күнелгә ҡара.

Һин күрһәң унда ни бары
Берәй остоҡ яҡты осҡон,
Бәлки, бер аҙға булһа ла,
Булырмын мин һинә яҡын!..

* * *

Ярыҡҡа ҡарап көлөүселәр,
Шул көлкөһөнән үлеүселәр
Йыйылғандар бөгөн байрамға -
Табынырға һуңғы харамға.

Табындарында - шәрбәт-һыра,
Ашарҙарына - тоҙло сәк-сәк.
Үткәндәре тора ҡаршыла,
Арттарында тора киләсәк.

Улар һыуға ҡаҙаҡ ҡағалар,
Улар китап уҡып аҙалар,
Улар ташлы ҡая башында
Энә менән ҡәбер ҡаҙалар.

Уларға ҡарап көлөүселәр,
Шул көлкөһөнән үлеүселәр
Йыйылырҙар тиҙҙән байрамға -
Табынырға яңы харамға...

* * *

Үҙ йөндәрен ҡыялар
Кесеһе лә, ҡарты ла.
Уларҙың күнелдәре
Ҡараңғыға тартыла.

Йышыраҡ үлем туйы,
Һөйөү туйҙары һирәк.
Әйтерһең, был донъяның
Яман яғы күберәк.

Ҡайҙа йәшәү саты ла,
Унда нимә һатыла?
Ҡайҙа үлем саты ла,
Унда кемдәр хаж ҡыла?

Аш йота ла ут йота
Кесеһе лә, ҡарты ла.
Иң бәхетле сағында
Күңел күгең йыртыла.

Бар күңелдең батшаһы,
Һәм ҡоло ла уның бар.
Әгәр ҡоло көсәйһә,
Батшаны итә тар-мар.

Үҙең һайлап алмаған
Ғүмерҙең яҙы-көҙө.
Үҙе бирмәгән йәнде
Ул үҙе теләп өҙҙө.

Ҡайҙа хаҡлыҡ саты ла,
Унда кемдәр отола?
Ҡайҙа нахаҡ саты ла,
Унда кемдәр ынтыла?

Ятһам да түшәгемә,
Йомһам да күҙҙәремде,
Торһам да түшәгемдән,
Асһам да күҙҙәремде,

Аҫылынған кешеләр
Торалар, гүйә, өрәк.
Беләм хәҙер - донъяның
Яман яғы күберәк...

Сеү! Салынды ҡолаҡҡа
Сабый бала тауышы.
Уны тапҡан ике йәр
Саф һөйөүҙә ҡауышты.

Булһын бала уларға
Йәшәүҙә мәңге терәк.
Була күрһен донъяның
Яҡшы яғы күберәк.

* * *

Һоҡланма һин сәскәләргә -
Улар бит һулыясаҡ,
Тыңлама һин шишмәләрҙе -
Улар бит ҡороясаҡ;

Ҡуҙәтмә һин йондоҙҙарҙы -
Улар ҙа бит һүнәсәк,
Табынма һин даһиҙарға -
Улар ҙа бит үләсәк;

Болот артына ҡасҡан Ай
Берәй ваҡыт кире ҡалҡмаҫ,
Бер көн иртән йылы Ҡояш
Тау артынан балҡып сыҡмаҫ;

Бар тәңреләр онотолор,
Булһалар ҙа мөһәббәт;
Мәңгелеккә көндәш булып
Ҡалыр бары Мөхәббәт...

* * *

Бер мәл тынлыҡ килер Ергә.
Ҡояш менән үлер бергә
Сәскәләрҙең саф һағышы -
Шул булыр һинең яҙмышың.

Изге хистәр һүнер шул саҡ,
Ә ҡындан һурылған бысаҡ
Ҡуҙһыҙ йөрәгеңде телер,
Һуңғы ҡөлгән емерелер...

Иҫкә төшһә үткән юлдар,
Күңел күҙең алға ҡарар.
Ергә килгән шомло тынлыҡ
Бары бер генә минутлыҡ...

**Морат СОЛТАНОВ.**
**Октябрьский ҡалаһы.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# МӘСКӘҮҘӘГЕ ЯҠТАШТАР МЕНӘН...

## аралар нығына

**Үткән аҙнала Мәскәүҙең Дәүләт Кремль һарайында "Беҙ - Башҡортостандан" тип аталған сара үтте. Мәҙәни ҡорға Мәскәүҙә йәшәүсе биш меңдән ашыу яҡташыбыҙ йыйылды. Улар араһында сенаторҙар, депутаттар, федераль дәүләт структураһы һәм Рәсәйҙең төрлө төбәктәре вәкилдәре, ғалимдар, журналистар, мәҙәниәт эшмәкәрҙәре, спортсылар, студенттар бар ине. Был үҙенсәлекле осрашыуҙа БР Президенты Рөстәм Хәмитов та ҡатнашты.**

Сараның төп өлөшөн тәшкил иткән концертта Башҡортостандың ижади коллективтары һәм республикала тыуып-үҫкән билдәле Рәсәй йондоҙҙары бер сәхнәлә сығыш яһаны. Дәүләт Кремль балеты солисы Айҙар Шәйҙуллин, Владимир Спиваковтың тәрбиәләнеүселәре, гимнаст Ләйсән Үтәшева, джазмен, Мәскәүҙең "Композиторҙар союзы" арт-директоры Олег Киреев, йырсылар Юрий Шатунов, Алһыу был тамашаның бәҫен тағы бер юғары баҫҡысҡа күтәрҙе. Әйткәндәй, Алһыу башҡорт телендә йырҙар башҡарҙы. Фәйзи Ғәскәров исемендәге Башҡорт дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбле, виртуоз ҡурайсы Роберт Юлдашев һәм уның төркөмө, шулай уҡ Фидан Ғафаров, Флүрә Килдейәрова, Римма Амангилдина, Нәзифә Ҡадирова, Изрис Ғәзиев, Айҙар Ғәлимовтарҙың сығыштары ла алҡыштарға күмелде.

Республиканың Сауҙа-сәнәғәт палатаһы ойошторған Башҡортостан иҡтисады ҡаҙаныштары күргәҙмәһе республиканың дөйөм федераль сәйәси һәм иҡтисади проекттарҙа ҡатнашырға, инвестициялар йәлеп итергә әҙер икәнлегенең сағылышы булып торҙо. Унда төбәктә тормошҡа ашырылған иң мөһим иҡтисади проекттар күрһәтелде, мәскәүлеләр башҡорт брендтары, популяр туристик маршруттар, халыҡ кәсептәре, милли колоритлы кейем коллекцияһы өлгөләре менән танышты, башҡорт балын тәмләп ҡараны.

Шулай итеп, "Беҙ - Башҡортостандан" акцияһы ябай музыкаль шоу сиктәренән үтеп, республика өсөн үтә мөһим бер сараға әүерелде. Мәскәүҙә йәшәүсе Башҡортостан кешеләренә тәүге тапҡыр бындай ҙур масштабта йыйылырға форсат сыҡты һәм улар өсөн Дәүләт Кремль һарайы үҙ-ара осрашып аралашыу урынына әйләнде. Республика Президенты Рөстәм Хәмитов яңы йылдың тәүге яртыһында Мәскәүҙә Башҡортостан Республикаһы көндәре үтәсәген белдереп, бындай осрашыуҙарҙың йышыраҡ булып торасағына ла ишара яһаны.

✓ *Ә иртәнге йоҡо кешене ике донъя бәхетенән дә мәхрүм итә. Абдуллаһ бин Ғәббәс (ра) улдарының береһенең иртәнсәк йоҡлап ятыуын күреп, уға: "Тор. Бәрәкәт таратылған ваҡытта нисек йоҡлап ятаһың?" - тигән.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ИШЕК УЙЫМЫ...

## хәтергә тәьҫир итә

■ Корнелла университеты ғалимдары билдәләүенсә, иммунитетты һәм сәләмәтлекте нығытыу өсөн көн һайын витаминдар ҡулланғансы, алма ашау ҙа етә. С витаминынан тыш, алма флавоноидтар һәм полифенолдар антиоксиданттары бар. Бер бәләкәй генә алмала С витаминының күләме 1500 миллиграмм тирәһе. Шулай уҡ был емештең аллергияға, ялҡынһыныуға, яман шешкә, вирустарға ҡаршы сифаттары асыҡланған.

■ Ябай тоҙға ҡарағанда, таш һәм диңгеҙ тоҙо файҙалыраҡ һанала. Әммә Salt and Health компанияһы тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, тоҙҙоң был төрҙәренең химик составында айырма бөтөнләй юҡ. Волфсан превентив медицина институты табиптары фекеренсә, кулинарҙарҙың таш йәки диңгеҙ тоҙонда мөһим минераль матдәләр күберәк тигәне дөрөҫлөккә тап килмәй. Табиптар шулай уҡ бөгөн кешеләрҙең тоҙҙо кәрәгенән артыҡ ҡулланыуы тураһында ла белдерә. Тоҙҙоң көндәлек нормаһы - 1 балғалаҡ, әгәр ул ошо билдәнән ашып китһә, ҡан баҫымы күтәрелеү, инсульт ҡурҡынысы янай.

■ Ҡайһы саҡта ҡайҙалыр инеп, унда ниңә ингәнегеҙҙе онотҡанығыҙ бармы? Нотр-Дам университеты тикшеренеүселәре лә ошо билдәле феноменды тикшереп ҡарарға булған. Уларҙың фекеренсә, ишек уйымы аша үтеү ҡыҫҡа ваҡытлы хәтерҙе насарайта. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусы студенттар виртуаль һәм реаль шарттарҙа бер нисә эксперимент үткән. Беренсе һынау ваҡытында улар виртуаль ысынбарлыҡта предметтарҙы ҡаптарға төргән һәм ҡапты йә бүлмәнең икенсе урынына күсереп ултыртҡан, йәки икенсе бүлмәгә алып сыҡҡан. Бынан һуң тәжрибәне реаль шарттарҙа эшләп ҡарағандар. Өсөнсө һынауҙа ҡапҡа төрөлгән объект бер нисә бүлмә аша үтеп, кире тәүге бүлмәгә әйләнеп ҡайтҡан. Асыҡланыуынса, экспериментта ҡатнашыусыларға икенсе бүлмәгә сығырға тура килһә, уларға ҡап эсендә нимә ятыуын хәтерләүе ауырға тура килгән. Өсөнсө һынау күрһәтеүенсә, хәтергә шарттар түгел, ә ишек уйымы аша үтеү нығыраҡ тәьҫир итә. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе Гэбриэль Радвански иҫәпләүенсә, ишектән инеүҙе йәки сығыуҙы мейе эшмәкәрлек эпизодтарының тамамланыуы тип ҡабул итә һәм "архивҡа тапшырып" өлгөрә.

■ Күптәр йүткергәндә һәм һыуыҡ тейгәндә антибиотиктар ярҙам итә тип уйлап, ныҡ яңылыша... 

■ Ғалимдар билдәләүенсә, аҡыл йәһәтенән тиҙерәк үҫешкән балаларға үҫкәс, тыйылған матдәләрҙе татып ҡарау хәүефе лә янай. Белгестәр фекеренсә, аҡыллыраҡ кешеләрҙе бар әйберҙәр ҙә тиҙерәк ялҡыта, шуға ла уларҙа яңы тойғолар кисереп ҡарау теләге көслөрәк була. Шулай уҡ интеллект кимәле юғарыраҡ булған һайын, кеше эргә-тирәһендәге кешеләрҙең тәҡдимен кире ҡаға алмай, былар барыһы ла наркотиктар ҡуллана башлауға килтереүе ихтимал.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ҒИБӘҘӘТ ҠЫЛЫРҒА ЛА...

## үҙ-үҙеңде дауаларға ла өйрәтә Бәйғәмбәребеҙ



**Динебеҙҙең төп сығанаҡтары - Ҡөрьәндә һәм бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сөннәтендә кешенең физик сәләмәтлеген һаҡлау өсөн күп кенә күрһәтмәләр бирелгән. Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙенең өммәтен ғибәҙәт ҡылырға ғына түгел, шулай уҡ кешенең тормошон еңеләйтергә, тән, рух һәм әйләнә-тирә менән гармония тыуҙырған йәшәү рәүешенә өйрәтә. Аллаһы Тәғәлә үҙенең ҡолдарына рух, аҡыл һәм кәүҙә сәләмәтлеген тәьмин иткән бөтә нәмәне рөхсәт итә һәм тойғоларҙы, һәләтте тараҡҡан, уның рухи һәм физик сәләмәтлегенә зыян итерҙәй эштәрҙе тыя.**

### Әүҙем булһаң - ауырымаҫһың

Организмдың әүҙем эшмәкәрлеге өсөн дөрөҫ туҡланыу мөһим. Ләкин кеше аҙ хәрәкәтләнеүсән йәшәү рәүеше алып барһа, аҙыҡ организм тарафынан тулыһынса һеңдерелеп бөтмәйәсәк. Һөҙөмтәлә был һимереүгә, үт ҡыуығының, бәүел юлының, ҡан тамырының тығылыуына, быуындарға тоҙ ултырыуына килтереүе ихтимал. Хеҙмәт эшмәкәрлеге һәм физик күнекмәләр был хәлдәрҙән иң яҡшы һаҡланыу ысулы булып тора. Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Аллаһым, мин ялҡаулыҡтан һәм ҡартлыҡ хәлһеҙлегенән һиңә һыйынам", - тип доға әйткән.

Ер йөҙөндә үҙенең тормош юлын үтер һәм Аллаһы Тәғәлә тарафынан иңебеҙгә һалынған вазифаларҙы лайыҡлы башҡарыр өсөн кешегә ныҡлы рух ҡына түгел, ә ныҡлы кәүҙә лә кәрәк. Кәүҙәһе сәләмәт булған кеше генә шәхси, ғаилә, йәмғиәт вазифаларын башҡаларға ҡарағанда күберәк башҡарырға әҙер.

Исламда үҙеңдең ғаиләңде аҫырау өсөн хәләл юл менән мал табыу Аллаһы Тәғәләгә яҡынайыуҙың, ғибәҙәттең бер төрө һанала. Ислам - ул хеҙмәткә саҡырыу. Бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бер хәҙисендә: "Саҙаҡа һорауға ҡарағанда, бер ҡосаҡ утын бысып алып килеү яҡшыраҡ", - тиелә. Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡулдары ауыр эштән ярылып бөткән бер сәхәбәне күреп: "Был ҡулдар тамуҡҡа эләкмәйәсәк", - тигән. Тик шуны иҫтә тоторға кәрәк, эш ғибәҙәткә әйләнһен һәм Ҡиәмәт көнөндә үлсәү тәрилкәһендә ауырлығы булһын өсөн кешегә Аллаһы Тәғәлә тарафынан әмер ителгән бурыстарҙы (намаҙ, ураҙа, зәкәт, хаж) үтәргә һәм хәрәм менән бәйле хеҙмәттән һаҡ булырға кәрәк.

Физик ауырлыҡ ваҡытында тән йылына, алмаштырыу процестары көсәйә һәм шлактар юйыла, тән таҙарына, көс йыя һәм яңынан аҙыҡ ҡабул итергә әҙер була. Быуындар һәм һеңерҙәр нығына, май массаһы мускулдыҡы менән алмашына. Умыртҡа һөйәге нығына, йөрәк-ҡан тамырҙары эшмәкәрлеге яҡшыра.

Атта һыбай йөрөү, һөңгө ырғытыу, көрәш, йүгереү ярыштары кеүек физик күнекмәләр Бәйғәмбәребеҙҙең сөннәте буйынса иң яҡшы ғәмәлдәрҙән һанала. Бөтә төркөм мускулдары менән бәйле был спорт төрҙәре ауырыуҙарҙы иҫкәртеүҙең иң яҡшы ысулы булып тора.

Урман, ялан, тауҙарға сығып йөрөүҙәр, сәйәхәт шулай уҡ яҡшы эштәрҙән һанала. Кеше Аллаһы Тәғәләнең ниғмәттәре тураһында фекер йөрөтә, улар менән ҡәнәғәтләнә, ошоларҙың бөтәһе өсөн дә Раббыһына рәхмәт әйтә һәм бөтә ошо ваҡыт эсендә ғибәҙәт хәлендә була. Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) балаларҙың да, шулай уҡ ололарҙың да уйындарын хуплаған, үҙе лә уйындарҙа, ярыштарҙа, ат сабыштарында ҡатнашҡан. Ул уйындар кешенең тәбиғи ихтыяжы, тип һанаған. Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ял сәғәттәрен уйындар менән уҙғарырға саҡырған: "Күңел асығыҙ һәм уйнағыҙ. Миңә диндәштәремдең рухы төшөп йөрөүе оҡшамай", - тигән.

Халыҡта "хәрәкәттә - бәрәкәт", тиҙәр. Әүҙем йәшәү рәүеше алып бармаған кеше бәхетле лә, сәләмәт тә була алмай, сөнки физик күнекмәләр кешенең тәбиғи бер ихтыяжы булып тора һәм шатлыҡ, ҡыуаныстар бүләк итеп, уның күңеленә, рухына яҡшы тәьҫир итә.

### Бәрәкәт таратылған ваҡытта йоҡлама

Йоҡо - Аллаһы Тәғәләнең бөйөк бер ниғмәте. Яҡшы һәм дөрөҫ итеп йоҡламаған кешенең сәләмәтлеге боҙола, ул аҡыл һәм физик эшмәкәрлек ваҡытында юғалған көсөн яңынан туплай алмай. Ҡөрьәндә: "Истирәхәт ҡылыр (ял итер) өсөн төндө, яҡтылыҡ өсөн көндө Беҙ яралтҡанды күрмәнеләрме? Бында иман килтергәндәр өсөн, әлбиттә, ғибрәттәр бар", - тип әйтелә ("Ҡырмыҫҡалар", 86).

Ысынлап та, көн менән төн Аллаһы Тәғәләнең ике мөғжизәһе. Әгәр ҙә тулыһынса тик төн йәки көн генә булһа, беҙ нисек йәшәр инек икән, күҙ алдына килтереүе ҡыйын. Аҡыллы кеше ошо ниғмәттәрҙе үҙенең сәләмәтлеген һаҡлау өсөн ҡулланырға тейеш. Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) төндөң беренсе яртыһында йоҡлаған, ә икенсе яртыһы башланыр алдынан уянған. Ул торған, тештәрен таҙартҡан, тәһәрәт алған һәм Аллаһы Тәғәлә ҡушыуы буйынса намаҙ уҡыған. Шулай итеп, кәүҙә, ағзалар йоҡоноң да, ялдың да, күнекмәләрҙең дә үҙенә тейешле өлөшөн алған. Ошо ғәмәлдәрҙе үтәгән кешегә ҙур бүләктәр булыр. Был кәүҙә һәм рух өсөн хәҙерге донъя өсөн дә, теге донъя өсөн дә иң яҡшы хәл-торош.

Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Төндә үҙенә бер төрлө ҡыҫҡа ғына ваҡыт бар. Әгәр Аллаһ ҡоло шул мәлде тотоп, доға ҡылһа, Аллаһ уға теләгәненең барыһын да бирер", - тигән.

Төндәрен ғибәҙәттә уҙғарған кешеләр Аллаһы Тәғәләнең иң яратҡан ҡолдарылыр. Был Бәйғәмбәребеҙҙең сөннәте. Уны тотҡан кеше әжерен алыр, әгәр ул быны эшләй алмаһа, бының өсөн язалауҙар булмаясаҡ. Исламда кешене йоҡо баҫҡан ваҡытта өҫтәмә намаҙҙар уҡыу хупланмай. Мөмкинлегеңә ҡарап ғибәҙәт ҡылырға һәм яйлап үҙеңде төнгө ғибәҙәткә өйрәтергә кәрәк.

Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙенә кәрәккәндән артыҡ йоҡламаған, шулай уҡ кәрәк булһа, тулы йоҡонан да баш тартмаған. Йоҡлар алдынан ул Аллаһы Тәғәләгә доға әйткән.

Тыныс йоҡо шулай уҡ Аллаһы Тәғәләнән. Уның бойороҡтарын үтәмәгән, гонаһ ҡылған кеше тыныс ҡына йоҡлай алмай. Ер йөҙөндә нисәмә кеше йоҡоһоҙлоҡтан интегә! Улар төрлө ысулдар ҡулланып, үҙҙәренең организмын ағыулап бөтә.

Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уң яҡ ҡабырғаһына ятып йоҡлаған, һул яҡҡа ятып йоҡларға кәңәш итмәгән һәм йөҙ түбән, эстә ятып йоҡлауҙы тыйған.

Көн һуңында, ҡояш байыр алдынан йоҡлау зарарлы, ә иртәнге йоҡо кешене ике донъя бәхетенән дә мәхрүм итә. Был ваҡыттағы йоҡо шулай уҡ организм өсөн зарарлы. Абдуллаһ бин Ғәббәс (ра) улдарының береһенең иртәнсәк йоҡлап ятыуын күреп, уға: "Тор. Бәрәкәт таратылған ваҡытта нисек йоҡлап ятаһың?" - тигән.

Яҡшы йоҡо организмдың һаҡлағыс көстәренең яҡшы эшенә булышлыҡ итә, психологик именлекте һаҡлай. Үкенескә күрә, бөгөнгө көндә күп кешеләрҙең Аллаһ тарафынан һалынған йоҡо һәм уяныу ритмы боҙолған, был невроз, психоз, йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарына сәбәпсе булып тора.

"Цивилизация" үҙенең көн тәртибен көсләп таға. Кешеләр һуң ята һәм һуң тора. Төн буйы телевизорҙың зәңгәр экрандары янып сыға. Әгәр тәҙрәгә ҡараһаң, ҡала төн буйы машиналарҙың күплегенән ҡайнап тора. Төнгө барҙарҙа күңел асыуҙар, дискотекалар таңға тиклем дауам итә. Төн әйләнәһенә алкоголле эсемлектәр һатыла. Бөтә енәйәттәр ҙә төндә ҡылына.

Ләкин кеше организмы йоҡоһоҙ тора алмай һәм кеше көндөҙ йоҡлай. Әгәр иртәнге намаҙ ваҡытында ҡараһаң, күп ҡатлы йорттарҙа бер генә лә тәҙрәлә лә яҡтылыҡ күрмәҫһең. А л - лаһы Тәғәлә алдында үҙебеҙҙең битарафлығыбыҙ өсөн нисек яуап бирербеҙ? Төн бит ял итеү, ә көн изге ғәмәлдәр ҡылыр, ижад итер өсөн тәғәйенләнгән. Тик улар ғына беҙҙе Ҡиәмәт көнөндә ҡотҡарыр.

МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



## Һыу тураһында

**Һыуҙың тылсымлы матдә булыуы һәм уның борондан дауалауҙа ҡулланылыуы һәр кемгә билдәле. Халыҡ әкиәттәрен иҫкә төшөрһәк, барлыҡ ауырыуҙарҙы ла тиерлек тере һыу менән дауалағандар. Космоэнергетика сеанстары ваҡытында һыу тап шундайға әйләнә - заряд ала.**

Һыу - тормош эликсиры! Ә кеше организмы 70 процент һыуҙан тора, шуға күрә эскән һыуыбыҙҙың сифатлы булыуы бик мөһим. Һыуҙарҙың иң файҙалыһы - тәбиғи юл менән таҙарған, структураланған, "өлгөргән" һәм ер өҫтөнә сыҡҡан шишмә һыуы. Тап шундай һыу илаһи гармония кодын йөрөтә, тап ул - тере һыу! Юҡҡа ғынамы ни, шишмә һыуын эсеүсе бейек тауҙарҙа йәшәгән халыҡ оҙаҡ йәшәй. Бындай һыуҙа һыу инеү ҙә яҡшы - организм илаһи камиллыҡ мәғлүмәте ала.

Әммә һыу үткәргестән алынған, хлорланған һыу менән дауаланыу ҡәтғи тыйыла. Хлор бик әүҙем матдә һәм һыуҙағы икенсе органика менән ҡушылып, токсик берләшмәләр барлыҡҡа килтерә. Тимәк, хлорланған һыу менән ваннала йыуынырға ярамай - тире аша матдәләр алмашыныуы бара. Организмға, яҡшы, ҙур күләмдә структураланған һыу кәрәк.

Ҡайнатылған һыу - энергетикаһы боҙолған үле һыу ул. Юҡҡа ғына бәләкәй балалар "һыуыҡ" һыу һорамай. Ҡайнап һыуыған һыу эсереп ҡарағыҙ, эсергә теләмәйәсәктәр.

Ҡайһы бер ваҡыт кеше сәй эсә, бер нисек тә һыуһыны ҡанмай, һыуыҡ һыу эсә һәм һыуһыны ҡана.

Шулай уҡ үле һыу ҙа кәрәк - бөтөн нәмәлә баланс булырға тейеш. Әкиәттәрҙә иҫләгеҙ: батырҙарҙы терелтер алдынан уларға үле һыу һибәләр (паразиттарҙы һәм негатив энергияны бөтөрәләр). Һәр әкиәткә тәрән аҡыл һалынған. Һәр ағыу, әгәр ул аҙ күләмдә булһа - дарыу.

Һыу етмәгәндә организмда төрлө проблемалар күҙәтелеүе мөмкин. Әгәр организмда һыу аҙ икән, ҡан ҡуйыра һәм уны аяҡ бармаҡтарына тиклем алып барып еткереү өсөн ҡанға баҫымды күтәрергә кәрәк - гипертония барлыҡҡа килә.

Әгәр ауыҙығыҙ кибә икән - был шәкәр ауырыуы йәки панкреатит билдәһе. Беренсе осраҡта, һыу етмәү сәбәпле, ҡанда шәкәрҙең тупланыуы арта, икенсеһендә ашҡаҙан аҫты биҙе кибә.

Әгәр йыйырсыҡтар барлыҡҡа килһә, һулпәнлек күҙәтелһә, тире ҡороһа - сәбәбе организм күҙәнәктәренең һыуһыҙланыуында. Был осраҡта кеше күп сәй, кофе (үле һыу) эсергә мөмкин, ә файҙа юҡ. Уға тере һыу - структураланған һыу кәрәк. Олоғайғас, катаракта барлыҡҡа килә. Сәбәбе - һыуһыҙланыу арҡаһында күҙ эҫмыҡының тоноғайыуы. Быуындарҙың шығырлауы, үт ҡыуығында таштар булыуы - шулай уҡ һыуһыҙланыуға бәйле. Һыу етмәгәнлектән, үт ҡуйыра, насар еҫ сыға, шул сәбәпле таштар барлыҡҡа килә. Эс ҡатыуҙың сәбәбе лә эсәктәрҙә һыу етешмәү һөҙөмтәһе. Һыу етешмәгәнлектән, кесе ярауҙа тоҙҙар күләме күтәрелә һәм улар бөйөргә ултырып, ҡом, таш барлыҡҡа килтерә. Мейе 85 процентҡа һыуҙан тора һәм унда бер процент ҡына һыу етмәһә лә, баш ауыртыуҙары башлана. Һыу етмәгәнлектән, организмдан шлактар, ағыуҙар насар сыға - интоксикация үҫешә. Ахырҙа, һыу етмәгәнлектән бер-бер артлы организмдың теге йәки был өлөшө сафтан сығыуы мөмкин, сөнки беҙ нигеҙҙә һыуҙан торабыҙ. Шуға күрә лә тере - структураланған һыуҙы ҡулланыу мөһим!

Космоэнергетика сеанстарында һыу шундайға әйләнә - заряд ала һәм илаһи гармония һәм камиллыҡ мәғлүмәте менән байып, тотош организмды һауыҡтыра. Йыһан энергияһы менән зарядланған һыу үҙенең универсаллеге һәм һөҙөмтәлелеге буйынса барлыҡ билдәле медицина һәм медицина булмаған препараттарҙы уҙып китә. Зарядланған һыу күҙәнәктәрҙе туйындыра, өҫтәмә һауыҡтырыу һәм дауалау һөҙөмтәһе бирә, организмдан тоҙҙарҙы, таштарҙы, шлактарҙы, башҡа токсиндарҙы сығара; ауыртыуҙы баҫа; йомшартыу, тир һәм бәүел ҡыуҙырыу һәләтенә эйә; пигмент таптарынан, һытҡыларҙан, башҡа тире ауырыуҙарынан, шул иҫәптән псориаздан, таҙарта. Һыу бөтөн нәмәне дауалай.

Зарядланған һыуҙы төрлөсә файҙаланырға мөмкин: уны эсәләр, уның менән тәндең төрлө участкаларына, бигерәк тә шеш, деформациялар, сыбыртмалар булған урындарға тәьсир итергә мөмкин.

Тәндә ауырыу шлактар күп булғанда ғына оҙаҡҡа тотҡарлана. Шлактар - айырым күҙәнәк туҡымаһында йәки эске шыйыҡлыҡтарҙа ла тупланған матдәләр алмашыныуы продукттары. Шлактар организмда мөмкин булғандан юғарыраҡ икән, был интоксикацияға, метаболизмдың боҙолоуына, ауырыуҙарға килтерә. Шлактар тупланыуына продукттарҙың дөрөҫ булмаған ҡатнашмаһы, майҙар, углеводтар менән артыҡ мауығыу, алкоголь, тәмәке, наркотиктар, дарыуҙар интоксикацияһы, шулай уҡ бысраҡ һауа, ҡояш нурҙарының етешмәүе һ.б. килтерә. Зарядланған һыу организмдан шлактарҙы сығарыуҙа ныҡ һөҙөмтәле, был процесты еңеллəштереү өсөн тәүлегенә 1,5 литр зарядланған һыу эсергә кәрәк.

Әгәр ит ашамаһағыҙ - бер литр, организмығыҙ таҙа икән, тәүлегенә 600 грамм таҙа һыу ҙа етә.

Һыу һәр пациентҡа индивидуаль тәьсир итә: берәүгә - йоҡо дарыуы кеүек, икенсегә - күңел күтәреүсе сара, өсөнсөгә - уҡшытыусы, дүртенсегә - уҡшыуҙы баҫыусы сара. Был аныҡ кешенең аныҡ проблемаларына бәйле.

Зарядланған һыу шулай уҡ сағыу косметик һөҙөмтәгә эйә: ҡыҫҡа ваҡытта күгәргән урындарҙы, йыйырсыҡтарҙы бөтөрә, сәс ҡойолоуын туҡтата һәм уларҙың ҡабаттан үҫеүенә булышлыҡ итә. Һыуҙы ҡайнатырға, түгергә ярамай (ул боҙолмай, әгәр ҡайҙа итергә белмәһәгеҙ - йыуынығыҙ).

**Рауфан МОРТАЗИН.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## "Теге яҡ"тан ярҙам итеүсе көндәлек факторҙар

Өндәге-төш "теге яҡ"тан ярҙам алыуға булышлыҡ итә. Әммә быға беҙҙең ваҡытыбыҙҙы нисек үткәреүебеҙ ҙә йоғонто яһауы мөмкин. Мәҫәлән, көнөнә бер нисә тапҡыр "кара ит" ашаусы кеше физик мәғәнәлә ҡош ите йәки балыҡ ашаусыға ҡарағанда тығыҙыраҡ була. Вегетариандар рухи тормошҡа бифштексһыҙ йәки кәтлитһеҙ йәшәй алмаусыларға ҡарағанда нығыраҡ әҙер. Был ниндәйҙер етешһеҙлек йә кәмселек менән бәйле түгел. Эш бары тик шунда ғына: ит яратыусылар матди тормошта башҡаларға ҡарағанда тығыҙыраҡ.

Әгәр һеҙ туҡланыу рационында тик ит кенә ҡулланаһығыҙ, ә тормошоғоҙҙа үҙгәрештәр бик яй бара икән, туҡланыуҙың икенсе, күберәк емеш-еләккә нигеҙләнгән системаһына күсеп ҡарағыҙ. Уға ҡапыл ғына күсеү ҙә кәрәкмәй, быны даими башҡарығыҙ - шулай еңелерәк булыр.

Йоҡлап киткәндә беҙ рухи торошҡа күсәбеҙ. Юғары аң беҙҙең менән төштәр аша аралаша ала һәм аңыбыҙҙы күтәрә - быны уға төрлө хәстәрлектәр менән сорналған уяу саҡтағы аң ҡаршылығынан тыш эшләүе еңелерәк. Юғары аңға асылыуҙың ысулдарының береһе - көсөргәнештән арынған ваҡытта йоҡо алдынан уйҙарыбыҙ Илаһтың ҡурсыуы аҫтында уңайлылыҡ һәм тыныслыҡ тойоуға йүнәлтелгән булырға тейеш.

Кешенең көндәлек эшмәкәрлеге уның кем булыуын асыҡлай: кире ҡағыусы пессимист йәки ынғай ҡарашлы энтузиаст. Беренселәргә икенсе булырға ярҙам итегеҙ. Һеҙҙең шәхси оптимизмығыҙ башҡаларға ла йоға, әммә үҙҙәрен һөлөк кеүек тотоусылар менән аралашҡанда көс запасығыҙҙы исраф итергә лә мөмкин. Әгәр кемдеңдер үҙегеҙгә һөлөк кеүек ҡаҙалғанын тойоп та, әшегеҙ һәм йәмәғәт тормошо уның менән аралашыуҙан ҡасырға мөмкинлек бирмәй икән, үҙегеҙҙе аҡ ҡалҡан менән уратып алығыҙ. Был һеҙгә энергия запасын һаҡларға ярҙам итер. Мөмкин булғанда ундай кешеләр менән аралашыуҙан ҡасығыҙ, ижади һәм энергиялы кешеләргә яҡыныраҡ тороғоҙ. Тап уларҙың мөхитендә Юғары аңдың һәм Илаһтың хәстәрлеге булыуы ихтимал.

Көндәлек тормошта "теге яҡ"тың ярҙамына өмөтләнеү еңел түгел, нигеҙҙә беҙҙең көндәлек эшмәкәрлегебеҙ матди хәстәрлектәргә ҡайтып ҡала. Ә мин һеҙҙе тәүҙән уҡ матди тормоштан ситтә булған яңы кимәлдәргә алып киттем. Матди тормоштан ситтә нимә ятҡанын аңлар өсөн "метафизика" төшөнсәһен ҡулланырға мөмкин. Әммә һуңғы тиҫтә йылдарҙа физика фәне ғалимдары алға шундай ҙур аҙым яһаны, хатта элек метафизика тип иҫәпләнгән концепциялар хәҙер физика сиктәрендә тороп ҡалды. Тимәк, элек шул тиклем алыҫ булып күренгән нәмә эргәбеҙҙә генә.

Аң көсөн тәндә сәләмәтләндереүҙә файҙаланыу рәсми медицинала психокибернетика тип атала. Башҡаларҙы уйҙағы образдар һәм доғалар менән дауалау хәҙер традицион медицинала ла ҡулланыла.

**Роберт СТОУН.**

ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН!



# ТУЛТЫРЫЛҒАН ҠАҘ

**100-150 грамм ҡара емеш (чернослив), 50-100 грамм һөйәкһеҙ йөҙөм, 250 грамм ҡаҙ һурпаһы, 4 ҡалаҡ һеркә, 4-5 әскелтем алма, 100 грамм ҡара икмәк, 1 баш һарымһаҡ, тәменә ҡарап тоҙ-борос алына.**

Ҡара емештәрҙе урталай ҡырҡып сығығыҙ һәм йөҙөм менән бергә һеркәлә ебетергә ҡуйығыҙ. Духовканы тоҡандырып, 225 градусҡа тиклем йылытығыҙ. Алма менән икмәкте шаҡмаҡлап ҡырҡығыҙ. Ҡаҙҙы һалҡын һыуҙа һәйбәтләп йыуғандан һуң эсен-тышын тоҙ, борос һәм һарымһаҡ менән ыуығыҙ. Ҡара емеш, йөҙөм, алма, икмәкте бергә бутап, ҡаҙҙың эсенә тултырығыҙ ҙа 10 минутҡа эҫе духовкаға ҡуйып тороғоҙ. Һуңынан 250 грамм һурпа өҫтәп, утын кәметеп, өс сәғәт тирәһе өҫтөнә һурпаны ҡоя-ҡоя яй ғына утта быҡтырығыҙ.

Ҡаҙҙан бүленеп сыҡҡан майҙа картуфты алтын-һары төҫкә ингәнсе ҡыҙҙырып алығыҙ. Киң һауыттың уртаһына ҡаҙҙы һалып, ситтәренә бешкән картуф һәм алма-йөҙөмдәрҙе теҙегеҙ ҙә өҫтөн йәшел укроп һәм петрушка менән матурлап биҙәгеҙ.



## 5 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.30 "Хочу знать"
16.10 "Обручальное кольцо". Сериал
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Жизнь и приключения Мишки Япончика". Сериал
22.25 "Судьба на выбор"
23.30 "Познер"
00.30 Ночные новости
00.40 "Форс-мажоры", 11-я серия
01.30, 03.05 "Восходящее солнце". Боевик
03.00 Новости
03.55 "Супертело, супермозг"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры"
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Все к лучшему", 225-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья. Продолжение", 195-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 41-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Утомленные солнцем-2". "Предстояние", 1-я и 2-я серии
22.45 "СССР. Крушение". Док. фильм
23.35 "Исаев", 1-я серия
00.35 "Вести+"
00.55 "Профилактика"
02.05 "Чак-2"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.10 "Внимание, розыск!"
10.45 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.25 "Дикий-2". Криминальный сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "Главная дорога"
01.45 "В зоне особого риска"
02.20 "Один день. Новая версия"
02.55 "Ставка на жизнь". Остросюжетный сериал
04.55 "Сыщики". Детективный сериал

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Городок АЮЯ"**
**11.00 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 18.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Новости недели"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Бахетнама"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Царь горы"**
**16.00 "Бауырхак"**
**16.15 "Шатлык йыры"**
**16.45 Документальный фильм**
**17.15 "Надо знать!"**
**18.00 "Еду я в деревню"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45, 19.40 "Пуленепробиваемый"**
**20.40 "Сэнгелдек"**
**21.00 "Следопыт"**
**21.15 "Деловой Башкортостан"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Послесловие" с Азаматом Саитовым"**
**23.15 "За порогом"**
**23.25 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Динамо" (Рига) - "Салават Юлаев" (Уфа). Прямая трансляция**

## 6 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.30 "Хочу знать"
16.10 "Обручальное кольцо". Сериал
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Жизнь и приключения Мишки Япончика", 2-я серия
22.30 "Высоцкий. "Вот и сбывается все, что пророчится..."
23.30 Ночные новости
23.55 "На ночь глядя"
00.50 "28 дней спустя"
02.50, 03.05 "Гуру"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры"
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Все к лучшему", 226-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья. Продолжение", 196-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 42-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Утомленные солнцем-2". "Предстояние", 3-я и 4-я серии
22.55 "СССР. Крушение"
23.55 "Исаев", 2-я серия
00.55 "Вести+"
01.15 "Профилактика"
02.20 "Честный детектив"
02.50 "Чак-2"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Внимание: розыск!" с Ириной Волк"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.30 "Дикий-2". Сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "В твоих глазах". Криминальная драма
01.30 Футбол. Лига чемпионов УЕФА. "Порту" (Португалия) - "Зенит" (Россия)
03.40 "Кулинарный поединок"
05.00 "Сыщики". "Ледяное пламя"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 23.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Царь горы"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Пора разобраться"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Башкорт йыры"**
**14.15 "Минуты поэзии"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Борсак"**
**16.00 "Байтус"**
**16.15 "Йырлы караз"**
**16.45 Документальный фильм**
**18.00 "Послесловие" с Азаматом Саитовым"**
**18.15 "Взгляд без слов"**
**18.30, 22.30 Новости "(на башк. яз.)**
**18.45, 19.40 "Амели"**
**20.40 "Сэнгелдек"**
**21.00 "Действующие лица"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 Уфимское "Времечко"**
**23.30 "Криминальный спектр"**
**00.15 Поет Сулпан Кейекбердина**

## 7 ДЕКАБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.30 "Хочу знать"
16.10 "Обручальное кольцо". Сериал
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Жизнь и приключения Мишки Япончика", 3-я серия
22.30 "Среда обитания"
23.30 "Ночные новости"
23.55 "Убийство"
01.05 "Любимцы Америки"
03.00 "Новости"
03.05 "Открытка с края бездны"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.00 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры"
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Все к лучшему". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья. Продолжение", 197-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 43-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Утомленные солнцем-2". "Предстояние", 5-я и 6-я серии
22.55 "СССР. Крушение"
23.55 "Исаев", 3-я серия
00.55 "Вести+"
01.15 "Профилактика"
02.20 "Чак-2"
04.30 "Городок. Дайджест"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "В зоне особого риска"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.25 "Дикий-2"
23.20 "Сегодня. Итоги"
23.40 "Моя последняя первая любовь"
01.30 Футбол. Лига чемпионов УЕФА
03.40 "Лига чемпионов УЕФА. Обзор"
04.10 "Один день. Новая версия"
04.55 "Сыщики". "Над вечным покоем"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 23.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Борсак"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Действующие лица"**
**12.45, 17.15 "Дело мастера"**
**13.00 "На самом деле"**
**13.45 "Байык"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Цирк в 13 метров"**
**16.00 "Семер"**
**16.15 "Городок АЮЯ"**
**16.45 "Хазина"**
**18.00 "Тарихи фараз"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45, 19.40 "Мисс Петтигрю живет сегодняшним днем"**
**20.40 "Сэнгелдек"**
**20.55 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "СКА" (Санкт-Петербург) - "Салават Юлаев" (Уфа). Прямая трансляция**
**23.30 Новости (на башк. яз.)**
**00.15 "НСО РБ. Концерт для фортепиано с оркестром"**

## 8 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.30 "Хочу знать"
16.10 "Обручальное кольцо". Сериал
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Жизнь и приключения Мишки Япончика", 4-я серия
22.30 "Человек и закон"
23.30 Ночные новости
23.55 "Подпольная империя"
01.00, 03.05 "Дьявольский особняк"
03.00 Новости
03.15 "Ну и дела!"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры"
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Все к лучшему". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья. Продолжение", 198-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 44-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Утомленные солнцем-2"."Цитадель"
22.45 "СССР. Крушение"
23.45 "Исаев", 4-я серия
00.45 "Вести+"
01.05 "Профилактика"
02.10 "Горячая десятка"
03.05 "Чак-2"
04.30 "Городок. Дайджест"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Медицинские тайны"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный"
21.25 "Дикий-2". Сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Женский взгляд"
00.20 "Всегда впереди. МГТУ им. Баумана"
01.20 "Дачный ответ"
02.25 "Один день. Новая версия"
03.00 "Ставка на жизнь"
04.55 "Сыщики". "Над вечным покоем"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 23.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Цирк в 13 метров"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Тамле" (на русск. яз.)**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Пора разобраться"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Книга сказок"**
**16.00 "Шэп арба"**
**16.15 "Йырлы караз"**
**16.45 "Специальный репортаж с празднования 100-летия со дня рождения Ж. Киекбаева. II часть**
**18.00 "Волшебный курай"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45, 19.40 "Настоящая Маккой"**
**20.40 "Сэнгелдек"**
**21.00 "Глас закона"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Пятый угол"**
**00.15 "Танцевальная палитра". Концерт**

## 9 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.50 "Поле чудес"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "ДОстояние РЕспублики"
23.40 "Дорога перемен". Мелодрама
01.50 "Джо Кидд". Приключения
03.30 "Река не течет вспять"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15 "С новым домом!"
10.10 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры"
13.00 "Мой серебряный шар"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Все к лучшему". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья. Продолжение", 199-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 45-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Юрмала-2011"
22.55 "Внеземной". Драма
01.40 "Флаги наших отцов". Военная драма
03.55 "Чак-2"
04.45 "Городок. Дайджест"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Суд присяжных. Окончательный вердикт"
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Товарищ Сталин". Историко-биографическая драма
23.25 "Казнокрады"
00.25 "Чудовище во мраке". Триллер
02.30 "Ставка на жизнь". Сериал
04.25 "Сыщики". Сериал

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Книга сказок"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Глас закона"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00 "На самом деле"**
**13.45 "Арслан". Мужской телевизионный клуб**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Зеркальце"**
**16.00 "Сулпылар"**
**16.15 "Царь горы"**
**16.45 "Автограф"**
**18.00 "Йома"**
**18.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45, 19.40 "Фламандская доска"**
**20.40 "Сэнгелдек"**
**21.00 "Профили"**
**21.25 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Атлант" (Мытищи) - "Салават Юлаев" (Уфа). Прямая трансляция. В перерывах Новости. По окончании: Новости (на башк. яз.)**
**00.15 "Муз-базар"**

## 10 ДЕКАБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.35 "Приключения Гулливера"
06.00 Новости
06.10 "Приключения Гулливера". Продолжение
07.20 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Умницы и умники"
09.45 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак"
10.55 "Высоцкий. "Вот и сбывается все, что пророчится..."
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Среда обитания"
13.25 "Женщины"
15.25 "Виталий Соломин. Между Ватсоном и "Зимней вишней". Док. фильм
16.30 "Крепкий орешек"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
19.25 "Болеро"
21.00 "Время"
21.15 "Мур". "Артисты", 2-я серия
22.15 "Прожекторперисхилтон"
22.50 "Что? Где? Когда?"
00.00 "Ангелы Чарли". Комедия
01.50 "Семь лет в тибете"
04.20 "Мясоеды против травоядных"
05.20 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1
05.10 "Внимание! Всем постам..." Боевик
06.35 "Сельское утро"
07.05 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.50 "Субботник"
09.30 "Городок. Дайджест"
10.05 "Качество жизни"
10.30 "Специальный корреспондент"
11.00 "Вести"
11.10 "Вести-Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.55 "Честный детектив"
12.25 "Пятая группа крови". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Пятая группа крови". Продолжение
17.00 "Новая волна-2011". Лучшее"
18.55 Шоу "Десять миллионов" с Максимом Галкиным"
20.00 "Вести в субботу"
20.45 "Слепое счастье". Мелодрама
00.30 "Девчата"
01.05 "Кудряшка Сью". Комедия
03.00 "Смерть в три дня"
04.40 "Комната смеха"

### НТВ
05.30 "Аэропорт". Сериал
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ"
08.45 "Академия красоты" с Ляйсан Утяшевой"
09.20 "Готовим с Алексеем Зиминым"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Дорожный патруль-4". Сериал
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Таинственная Россия: Ямало-Ненецкий автономный округ. Проклятие шаманов?"
17.20 "Очная ставка"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55"Программа, максимум. Расследования, которые касаются каждого"
21.00 "Русские сенсации"
21.55 "Ты не поверишь!"
22.50 "Последнее слово"
00.00 "Отставник". Остросюжетный фильм
01.55 "Дорожный патруль-4"
03.50 "Кремлевская кухня"

### БСТ
**07.00, 18.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро"**
**08.00 Мультфильм**
**09.00 "Доктор Заки Валиди"**
**09.30, 13.30 "Взгляд без слов"**
**09.45 "Надо знать!"**
**10.00 "Бахетнама"**
**10.45 "Еду я в деревню"**
**11.15 "Арслан"**
**12.00 "Следопыт"**
**12.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.45 "Дело мастера"**
**13.00 "Тэмле"**
**13.30 "Взгляд без слов"**
**13.45 "Весело живем"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Третий звонок". З. Атнабаева. "Прерванная судьба"**
**18.45 "Замандаштар"**
**19.15 "Дарман"**
**20.00 "Башкорттар"**
**20.30 "Сэнгелдек"**
**20.45 Главная библиотека Башкортостана. К 175-летию Национальной библиотеки им. А.-З. Валиди**
**21.00 "Парад планет"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Парад планет"**
**22.45 "Башкорт йыры"**
**23.15 "КВН. Кубок вузов РБ"**

## 11 ДЕКАБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Искренне ваш..."
07.50 "Служу Отчизне!"
08.25 "Дисней-клуб"
09.15 "Здоровье"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки"
10.35 "Пока все дома"
11.30 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Высоцкий. Последний год"
13.15 "Стряпуха"
14.35 "Специальное задание"
15.45 "Одиночество любви"
17.35 "Майкл Джексон и его доктор"
18.35 "Другой"
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Мульт личности"
22.30 "Yesterday Ilve"
23.35 "Двойной форсаж". Криминальный боевик
01.30 "Обмани меня"
03.10 "Больше меня"

### РОССИЯ 1
05.45 "Выбор моей мамочки"
07.20 "Вся Россия"
07.30 "Сам себе режиссер"
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна
08.50 "Утренняя почта"
09.30 "Сто к одному"
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели"
11.00 "Вести"
11.10 "С новым домом!"
11.25 "Александр Солженицын. Спасенное интервью"
12.25 "Пятая группа крови". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Вести-Башкортостан"
14.30 "Пятая группа крови". Продолжение
16.00 "Смеяться разрешается"
18.05 "Стиляги-шоу с Максимом Галкиным"
20.00 "Вести недели"
21.05 "Срочно! Ищу мужа". Мелодрама
23.05 "Специальный корреспондент"
00.05 "Геннадий Хазанов. Повторение пройденного"
00.35 "Красный лотос"
02.25 "Смерть в три дня-2"
04.15 "Городок. Дайджест"

### НТВ
04.45 "Аэропорт". Сериал
06.30 "Москва. Осень. Сорок первый"
08.00 "Сегодня"
08.15 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача"
10.55 "Развод по-русски"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Дорожный патруль-4". Сериал
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Следствие вели..."
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Центральное телевидение"
21.55 "Тайный шоу-бизнес"
22.55 "НТВшники"
00.20 "СССР. Крах империи"
01.20 "Черный квадрат". Детектив
04.00 "Дорожный патруль-4"

### БСТ
**07.00, 18.30 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.45 "Взгляд без слов"**
**09.00 "Йома"**
**09.30 "Автограф"**
**10.00 "Баурсак"**
**10.10 "Городок АЮЯ"**
**10.25 "Семэр"**
**10.40 "Шатлык йыры"**
**10.50 "Шэп арба"**
**11.00 "Байтус"**
**11.15 "Сулпылар"**
**11.30 "Гора новостей"**
**11.45 "Дарман"**
**12.30 Новости недели**
**13.00 "Тамле"**
**13.30 "Башкорттар"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Историческая среда"**
**16.30 "Замандаштар"**
**16.40 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"**
**17.00 "Дорога к храму"**
**17.30 "Орнамент"**
**18.00 "Тарихи фараз"**
**18.40 "Весело живем"**
**18.55 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Ак Барс" (Казань) - "Салават Юлаев" (Уфа). Прямая трансляция. Во 2 перерыве: Новости (на башк. яз.)**
**21.15 "Деловой Башкортостан"**
**21.30 "Новости недели"**
**22.00 "Урал Лото"**
**22.15 "Байык"**
**23.15 "Вечер.com"**
**00.00 "Свидание с джазом"**

✓ Һуңғы 3 матчтың еңеү менән бөтөүендә баш тренер Венер Сафиндың роле айырыуса ҙур булды. Уның оҫталығы, һәләтле баш тренер булыуы "Металлург" менән көс һынашыуҙа айырыуса асыҡ күренде.



ХОККЕЙ

# БЕР ЮЛЫ ӨС ЕҢЕҮ!

**Ҡуҙғалыр-ҡуҙғалмаҫ булып ятҡан ҡалын "боҙ", ниһайәт, урынынан ҡуҙғалды. Беҙҙең иң яратҡан команда "Салауат Юлаев" бер рәттән өс еңеү яуланы.**

Юлаевсылар тәүҙә Көнсығыш конференцияла өсөнсө урында барған "Авангард" хоккейсыларын 4:2 иҫәбе менән ҡыйратты. Артабан "Югра" командаһы юрғалай алманы. 29 ноябрҙә "Салауат Юлаев" Магнитогорск ҡалаһының "Металлург" уйынсыларын 3:1 иҫәбенә отто.

Сигенеүҙең сигенә етеп барған "Салауат Юлаев" командаһын көрсөк төпкөлөнә артабан батыуҙан ҡотҡарыу өсөн был арала ҡайһы бер саралар күрелгәйне. Республика Президенты Рөстәм Хәмитов тәүҙә юлаевсылар менән "Өфө-Арена"ла осрашты һәм артабан клуб етәкселәре менән махсус кәңәшмә үткәрҙе, кәрәк булһа, төрлө ярҙам күрһәтергә вәғәҙә итте. Бынан һуң команданың тренерҙар штабында һәм хоккейсылар составында етди һәм мөһим үҙгәрештәр булды. Әлегә хәтлем өлкән тренер булып эшләгән Венер Рәсих улы Сафин баш тренер итеп тәғәйенләнде. 40 йәшкә етеп барған Максим Сушинский һәм Олег Твердовский кеүек егәрлеген юғалтҡан хоккейсылар "Торос" клубына күсерелде. Команда составында тейешле тәртип урынлаштырылды, яңы йәш хоккейсылар йәлеп ителде. Улар үҙҙәрен булдыҡлы уйынсылар итеп танытып та өлгөрҙө. 20 йәшлек Александр Панков һәм Сергей Зенелин берәр гол индерҙеләр ҙә инде. 20 йәшлек Михаил Григорьев үҙен ышаныслы һаҡсы итеп күрһәтте. 23 йәшлек Никита Давыдов тураһында айырым әйтергә кәрәк. Ул үҙен оҫта, үтә сос ҡапҡа һаҡсыһы итеп күрһәтте. Һуңғы өс матчта ул үҙ ҡапҡаһына ни бары 4 шайба үткәрҙе.

Һуңғы 3 матчтың еңеү менән бөтөүендә баш тренер Венер Сафиндың роле айырыуса ҙур булды. Уның оҫталығы, һәләтле баш тренер булыуы "Металлург" менән көс һынашыуҙа айырыуса асыҡ күренде.

"Салауат Юлаев" һәм "Металлург" командалары КХЛ чемпионаты башланған ваҡытта уҡ ныҡ һөрөндөләр, туҡтауһыҙ отолдолар. Магнитогорск мэры баш тренерҙы алмаштырырға мәжбүр булды. Ҙур һәм бай тәжрибәле Федор Канарейкин баш тренер итеп саҡырылды. Һөҙөмтәлә "Металлург" тиҙ арала уртансы урынға күтәрелде. "Салауат Юлаев" иһә уны ике еңеүҙән һуң ҡыуып етте. Хәҙер уларҙың 39-ар мәрәйе бар. Тимәк, һәр ике команда чемпионатта типә-тиң урында. Ҡайһы баш тренерҙың оҫтараҡ, һәләтлерәк, яҡшыраҡ етәксе булыуы ошо көс һынашыуҙа асыҡланырға тейеш ине.

"Салауат Юлаев" һәм "Металлург" көс һынашыуҙың тәүге осоронда бер-береһен ота алманы. Бары тик икенсе осор уртаһында ғына юлаевсы Александр Радулов, күпселектә уйнауҙан файҙаланып, тәүге шайбаны ҡунаҡтар ҡапҡаһына осорҙо. Бынан һуң бер минут үттеме, юҡмы, командала яңы уйынсы Антти Пильстрем икенсе гол индерҙе. Өсөнсө осорҙа һаҡсы Константин Кольцов еңеүле иҫәпте өскә еткерҙе. "Металлург" осор уртаһында ғына беренсе һәм һуңғы шайбаны юлаевсылар ҡапҡаһында оялатты: Антон Бут һуҡҡан шайбаны Н. Давыдов тота алмай ҡалды.

Был гол ҡунаҡ хоккейсыларҙы дәртләндерҙе. Улар ысын-ысыны менән штурм башланы. Юлаевсы Сергей Зиновьев уйын ҡағиҙәһен тупаҫ боҙғаны өсөн осрашыу бөткәнсе уйындан сығарылды, өҫтәүенә, уға биш минутлыҡ штраф һалынды. Һөҙөмтәлә юлаевсылар биш минут буйы аҙсылыҡта уйнарға мәжбүр булды. Баш тренер оҫталығы бына шунда күренде лә инде. Майҙанға иң яҡшы һөжүм итеүселәр һәм һаҡсылар сығарылды. Улар ярҙамында Никита Давыдов үҙ ҡапҡаһын ныҡлы йоҙаҡҡа бикләне. Көсөргәнешле көс һынашыу юлаевсылар файҙаһына 3:1 иҫәбенә тамамланды.

Ҡыштың тәүге көнөндә "Салауат Юлаев" үҙ майҙанында Риганың "Динамо" командаһын ҡабул итте. Ҡунаҡтарҙың ике голына ҡаршы уйын бөтөүгә һынаулы ғына минуттар ҡалғас, юлаевсы Сергей Емелин яуап бирҙе, ләкин был гол уйынды ҡотҡарманы. Еңеүҙе ҡунаҡтар байрам итте.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ЙӘЙӘҮ ЙӨРӨҮ...

## күңел тыныслығына килтерә

**Йәйәү йөрөү - бөгөн фитнестың иң модалы төрҙәренә инеп, быға тиклем популяр булған йүгереүҙе лә үтеп китте. Тик нисек йөрөргә, ҡайҙа йөрөргә һәм күпме йөрөргә? Әйҙәгеҙ, һанап ҡарайыҡ.**

Сәләмәтлек өсөн йәйәү йөрөүҙең файҙаһы тураһында бөгөн күптәр белә. Уның өсөн махсус урын һәм экипировка һәм махсус ваҡыт кәрәкмәй. Йәғни, был тәбиғи фитнес менән магазиндар буйлап йөрөгәндә, баланы балалар баҡсаһынан алғанда шөғөлләнергә була.

### Артыҡ ауырлыҡтан ҡотҡара

Афина университеты ғалимдары ике төркөм ҡатын-ҡыҙҙарҙы сағыштырып ҡараған. Беренсе төркөм 3 ай дауамында йүгергән, икенсеһе шәп итеп атлап йөрөгән. Һөҙөмтәлә, икенсе төркөмдәге ҡатын-ҡыҙҙар артыҡ килограмдарҙы күберәк ташлаған. Тикшеренеүселәр быны шулай аңлатҡан: кем йүгергән, улар күберәк көс юғалтҡан һәм көн дауамында йышыраҡ ял иткән һәм ашаған. Ә йәйәү йөрөүселәрҙең, киреһенсә, энергияһы ташып барған һәм улар ҡалған ваҡытын да әүҙем үткәргән. Бынан тыш, йәйәү йөрөгәндә көс мускулдарға, ә йүгергәндә быуындарға төшә.

### Ҡан баҫымын төшөрә

Стэнфорд университетының физиологтары юғары ҡан баҫымы менән яфаланған ҡатын-ҡыҙҙарға көнөнә йәйәү йөрөүҙе 9700 аҙымға еткерергә ҡушҡан. Алты айҙан һуң ханымдар ябығып, ҡан баҫымдары нормаға килгән. Ошондай уҡ экспериментты ирҙәрҙә лә үткәреп ҡарағандар. Унда 11 мең ир-егет ҡатнашҡан һәм көнөнә 10 мең аҙым яһай башлағандан һуң уларҙа инсульт һәм инфаркт хәүефе 2 тапҡырға кәмегән.

### Һөйәктәрҙе нығыта

Һәр йәштә лә йәйәү йөрөү һөйәктәрҙе нығыта. Роттердам университеты ғалимдары 30 мең кешене тикшереп, көнөнә 30 минут йәйәү йөрөү һөйәктәрҙең минераль тығыҙлығын 2 процентҡа арттырыуын асыҡлаған. Был бик әҙ, тип уйлаһығыҙмы? Шулай булыуға ҡарамаҫтан, был процент янбаш һөйәген һындырыу ҡурҡынысын 24 процентҡа кәметергә мөмкинлек бирә.

### Ҡайҙа йөрөргә

Иң файҙалыһы, әлбиттә, саф һауала йөрөү. Йәйәү йөрөү өсөн парктар, скверҙарҙы ғына түгел, ҡала яңы маршруттарын да файҙаланығыҙ. Бик тәбиғәткә сығырға мөмкинлегегеҙ булмаһа, гипермаркеттар, музейҙар, картина галереялары буйлап йөрөүҙең дә ыңғай яҡтары бар, ти белгестәр. Шулай ҙа быға ла ваҡытығыҙ юҡ икән, кисен телевизор ҡараған саҡта уның алдына тороп алығыҙ ҙа, урынығыҙҙа ғына атлағыҙ. 70 килограмм булған кеше был осраҡта ярты сәғәт эсендә 200 ккал юғалта ала. Эш бында хатта калорияларҙа ла түгел. Йәйәү йөрөү - кеше өсөн иң тәбиғи хәрәкәт төрө, йәйәү йөрөгәндә организмдың эске системаһы эше нормаға һалына, гормондар кимәле 5-12 процентҡа тергеҙелә, матдәләр алышыныуы 3-6 процентҡа тиҙләнә.

### Тимер нервылар

Хроник арыу һәм депрессия менән көрәш эшендә йәйәү йөрөүгә тиң сара юҡ. Швецияның Королева университеты эргәһендәге Психиатрия мәктәбе тикшеренеүселәре белдереүенсә, кеше ни тиклем күберәк йәйәү йөрөй, стресҡа һәм депрессияға бирелмәй, етмәһә, уларҙың интеллект кимәле лә юғарыраҡ була.

## КОТЛАЙБЫҘ!

Ноябрь айында тыуған көндәрен билдәләүсе уҡыусыларыбыҙҙы - **Бүздәк районы** Уран ауылынан Фәниә Шәрипованы, Әмир ауылынан Зөлфиә Камалованы, **Мәсетле районы** Юныс ауылынан Сәлимйән Шакировты, **Баймаҡ районы** Иҫке Сибай ауылынан Фәнисә Байбулатованы, Урғаҙа ауылынан Мәхмүтйән Йәрмөхәмәтовты, Әбделкәрим ауылынан Миңһылыу Һәйетҡолованы, Ярат ауылынан Рәсимә Назарованы, **Миәкә районы** Тамъян-Таймаҫ ауылынан С. Иҙрисованы, Учалы районы Уральск ауылынан Фәрүәз Ғәрипованы, Бөрйән районы Әбделмәмбәт ауылынан Айгөл Үтәбаеваны, Яңауыл ҡалаһынан Гүзәл Ниғмәтйәновны, Г. Әминеваны, **Яңауыл районы** Киҫәкҡайын ауылынан А. Әхәтованы, Салауат ҡалаһынан Ф. Ғәзизованы, Юлмөхәмәтованы, Наилә Фәйзуллинаны, **Стәрлебаш районы** Айҙарәле ауылынан Факил Ҡолоевты, Ибраҡай ауылынан Миләүшә Ғәлиеваны, **Хәйбулла районы** Татырүҙәк ауылынан Динислам Ғирфановты, Рафиҡ ауылынан Гәүһәр Торсонбаеваны, Баҡал ауылынан Риназ Иҫәнъюловты, Целинный ҡасабаһынан Миңлебикә Ишмырҙинаны, М. Кирамановны, **Ауырғазы районы** Мораҙым ауылынан Райхана Вәлитованы, **Ишембай районы** Яңы Әптек ауылынан Зәйтүнә Вәлиеваны, **Илеш районы** Үрге Йәркәй ауылынан Зинфира Кашаповны, Иҫке Күктау ауылынан Зәйтүнә Бәҙертдиновны, Иғмәт ауылынан Тәнзилә Садиҡованы, **Ейәнсура районы** Иҫәнғол ауылынан Мөкәрәмә Мырҙабулатованы, Сирғол ауылынан Гүзәл Илембәтованы, **Өфө ҡалаһынан** Гөлдәр Вәлиәхмәтованы, **Нуриман районы** Яңы Күл ауылынан С. Насретдиновны, **Архангел районы** Ҡыҙыл Еҙем ауылынан Әлфиә Йортомбаеваны, Орловка ауылынан Гөлдәр Аҫылбаеваны, **Туймазы ҡалаһынан** Лилиә Харисованы, **Белорет районы** Сосновка ауылынан Хәтирә Ғибәҙуллинаны һәм башҡаларҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ!

**Хоҙай һеҙҙе йән тыныслығынан, тән сихәтенән айырмаһын, күңелегеҙ гел күтәренке, тыуыр таңдарығыҙ имен булһын, тормош уйламаған бәхет-шатлыҡтары менән һөйөндөрөп торһон.**

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**3 декабрь "Аты барҙың - дәрте бар"** (Н. Ғәйетбай), комедия

**7,8 декабрь "Артур+Нэнси"**, мәңгелек мөхәббәт йыры (Ә. Дилмөхәмәтова), музыкаль драма

**9 декабрь "Гипнотизер"** (В. Сигарев), комедия

**9 декабрь "Хәйерле иртә, Энид!"** (В. Аллен), тормош фокустары

**10 декабрь "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия

### М. Кәрим исемендәге Милли Йәштәр театры

**5-6 декабрь** Туймазы татар дәүләт драма театры гастролдәре

**8 декабрь "Студенттар"** (Н. Ғәйетбай), лирик комедия

**9 декабрь "Люстра"** (И. Зәйниев), трагикомедия


## ИҒЛАНДАР

Бер ҡатлы айырым торған бина - административ корпус һатыла. Дөйөм майҙаны: 178,4 квадрат метр. Дәүләт теркәүе хаҡында таныҡлыҡ 2011 йылдың 18 апрелендә бирелгән. Адресы: Өфө ҡалаһы, Трамвай урамы, 17-се һанлы йорт.

**Белешмә өсөн телефон: (347) 284-62-36.**

* * *

### Ҡыш бабай, Ҡарһылыу һәм уларҙың дуҫтары һеҙҙән шылтыратыуҙар көтә!

Мәктәптәрҙә, балалар баҡсаларында Яңы йыл кисәләре, шулай уҡ өлкәндәр өсөн корпоративтар ойоштрабыҙ. 2012 йыл хужаһы Аждаһа ҡатнашлығында ҡыҙыҡлы сценарийҙар ҙа бар. Байрам кисәләре башҡорт һәм рус телдәрендә алып барыла. Шулай уҡ байрам алдынан Ҡыш бабайҙы өйгә саҡырып, балаларға оло шатлыҡ бүләк итергә лә мөмкин.

**"Афарин" ижад студияһы.**
**Телефон: 8-927-08-77-548.**

СМСНАМӘ - ШИҒРИ ӘЙТЕШ



# ИЛ ЯҘМЫШЫН ХАКИМ ТҮГЕЛ

## тик халыҡтар хәл итә

**Этҡол сәсәндең эскерһеҙлеккә саҡырған оранын Аҡыҡ, Ырыҫ сәсәндәребеҙ күтәреп алды. Башҡалар әлегә шым. Шулай шул: һәр кем үҙе хаҡында асылып китеп һөйләй алмай шул, был ғәйеп түгел. Был донъяла сер тигән төшөнсә лә бар бит әле.**

**БАТЫР:**

Этҡол, әйткән һүҙҙәрең
Дөрөҫкә тура килә,
Тик нинә әле төбөнөн
Ошо һүҙҙәрҙе минә:
Йылғалар үргә аҡмайҙар -
Аға тиеп әйттемме?
Әллә һинең һүҙҙәреңә
Ҡапма-ҡаршы киттемме?
Әйтәйек, Этҡол (ағай тим -
Яңы шуны аңланым),
Байтаҡ ҡына фекереңде
Уртаҡлашмай булманы.
Ысынлап та, ҡойроҡ болғау
Бөгөн бик киң таралған,
Шуға инде беҙҙең халыҡ
Вертикально баҫылған
(Ырыҫ был хаҡта яҙған).
Етер ваҡыт, сығыр халыҡ
Бер аҙҙан тағы майҙанға...
Вертикально баҫыусылар
Горизонтально ятырҙар!

**КӨФӨ:**

**Ҡорҙаштарым, Этҡол кеүек**
**Кемең шарран асылыр?**
**Кемегеҙ, йә, тәҡдим итер**
**Эскерһеҙлек асылын?**
**Ә бит ысын кеше була**
**Үҙенән көлә алған...**
**Үҫешә һәм алға бара**
**Үҙен тәнҡитләй алған...**
**Әйҙәгеҙ, кем асылыр,**
**Тәҡдим итер асылын?**

**АҠЫҠ:**

Батырлығым етмәй ҡайһы саҡта
Һәм мәжбүрмен ауыҙ ябырға.
Әйтелмәйсә күпме һүҙем ҡала
Оло йыйын, ҡайһы табында.
Матурлығым етмәй төҫлә ҡайсаҡ,
Оялсанмы әллә булғанға.
Ғорурлығым ҡала үҙем менән
Һәм эйәреп сыға урамға.
Әрһеҙлекте хуп күрмәйем үҙем,
Нескә шуға минең күңелем.
Абынып та китһәм ошо юлда,
Тағы нисек тороп китермен?

**ЫРЫҪ:**

Этҡол туған, әгәр халыҡ
Дәррәү барһа һайлауға,
Ҡыйынырaҡ булыр ине
Яһилдарға алдарға.
Ҡорҙаштарым, һорар инем:
Ҡоллоҡ туйҙырманымы?
Аҡыҡ, Дарман, шаяртмайым
Шат һеҙҙең шатлыҡтарға.
Тик уйлағыҙ: нимә ҡалыр
Балалар-оноҡтарға?
Ил яҙмышын хаким түгел
Тик халыҡтар хәл итә.
Хәл итергә теләмәһәк,
Ҡол булып йәшәү етә.
Этҡол, һүҙ юҡ, ышанамын
Арыҫландай егетһең.

Йәштәргә күсереү кәрәк
Һинең һәләт-ғәйрәтте.
Мин дә иғтибарға алып
Көфө мөрәжәғәтен,
Асып күрһәтәйем шулай
Битлектең өстән берен.
Заманында туғыҙ-ун йыл
Ил гиҙҙем арҡыры-буй.
Тиге союз, Рәсәй хәле -
Устарҙағы ике буй.
Шуға күрә уйҙарым да
Йәйғорҙарға урала.
Ул бейеклектән, ҡорҙаштар,
Ҡул осонда донъялар.
Һөнәрҙәрҙе һанамайым,
Етмештән дә кәм түгел.
Бөтәбеҙ ҙә өсөн был һан
Иҫ китерлек хәл түгел.
Фекеремде тура ярып
Әйтеү ғәҙәте ингән.
Һәр нәмәнән файҙа табып
Йәшәү ғәҙәте һеңгән.
Асыш түгел - бер ҡеҙрәт бар
Ир-егеттең хәлендә:
Булды осор - ныҡ ҡайналды
Мөхәббәт сүлмәгендә.

**ЭТҠОЛ:**

**Аҡыҡҡа:**

Был донъяла йәшәүҙәре ләззәтме?
Әллә тормош торғаны бер ғәйбәтме?
Яҙам үҙем күргәнде һәм белгәнде.
Алдымда күтәрҙеләр,
Артымда түңкәрҙеләр.
Шәп, тиеп маҡтанылар,
Саҡ утҡа яҡманылар.
Ауыр саҡта ҡастылар,
Күләгәмде аҫтылар.
Оһоларҙы тыңлайыҡ, тип
Һин беҙҙе саҡыраһың.
Йөрәгемә һүҙҙәреңде
Май кеүек яҡтыраһың.
Башҡаларҙың һүҙ алғанын көтмәйем,
Уйлағандарымды һеҙгә әйтәйем:
-Әйтмә ҡарттар ашаған тип ашарын,
Йәштәр хәҙер бөтә эште башҡарһын.
Оһоларҙың һүҙе булһын дилбегә,-
Фәһем ал да, барыр юлың билгелә.

**Көфөгә:**

Эштән ҡайтыуыңа ҡыҙың
Ҡаршы килә атлығып.
Өйҙә юкта ҡыҙың һине
Өлгәрәлер һағынып.
Һеҙгә ҡыҙың һүҙ ҡушамы
Пама менән мама, тип?
Ҡартәсәһенә әйтәме
Старая дама, тип?
Гел ишетәм мин быны,
Белгем килә бик шуны?

**Дарманға:**

"Киске Өфө" гәзитен
Тиңләнең дә кофеға,
Рәхмәт әйттең Көфөгә.
Кофе эсеп туйҙыңмы?
Кикереп тә ҡуйҙыңмы?
Гәзит - ул минең юлдаш,
Күңел тулғанда - мондаш.
Гәзиттән кофе түгел,
Аҡыллы һүҙ эсәмен.
Уйҙар мине бутағанда
Гәзит уҡып сисәмен.
Аптыраған ҡатындар
Абышҡаһын "атай", ти.
Һин дә яуап яҙғанда
Бул һәр саҡта ла абай, тим.

**КӨФӨ:**

**Этҡол дуҫтың атҡан уғы**
**Килеп тейҙе миңә лә.**
**Шуға күрә яуап бирәм**
**Бер тамсы үпкәләмәй.**
**Ҡыҙым миңә "ат-тай", ти ҙә,**
**Әсәһенә "әс-сәй", ти.**
**Ҡартатаһын "катай", тиһә,**
**Өләсәһен "өсәй", ти.**
**Йәш тә ун ай ғына уға**
**Февралдә тула ике.**
**Башҡортса, саф үҙебеҙсә**
**Илауҙарына тиклем.**
**Беҙҙең ғаилә мөхитендә**
**Дәүләт теле - телебеҙ.**
**Шулай булған өсөн гена**
**Милләтебеҙ тере бит.**
**Был Этҡолдоң теле үткер**
**Барыбыҙҙы бейетә.**
**Тағы кемгә тейҙе уғы,**
**Йә, тағы кем ни әйтер?**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әйтеш дауам итә. Яңы йыл яҡынлаша, ҡорҙаштар, әйҙәгеҙ, әүҙемерәк ҡатнашығыҙ, дәртлерәк ҡуҙғалығыҙ. СМС өсөн телефон: 8-917-477-09-74.**

*ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ*

# ӘТҮЛӘЙ БИТ УЛ...

**Сәпсәнләү** - ашар-ашамаҫ ултырыу.
**Шым-шырыҡ** - тауышһыҙ, иплә кенә.
**Бәлшәйеү** - бөлеш һымаҡ; йомшап китеү.
**Фигелһеҙ** - холоҡһоҙ.
**Зелташ** - бик ҡаты; бик ауыр.
**Бырҙымы юҡ, бырҙымһыҙ** - эшлекһеҙ, егәрле түгел (ҡатын-ҡыҙға ҡарата әйтелә).
**Барымы юҡ** - ҡулынан эш килмәй (ир-атҡа ҡарата әйтелә).
**Әтүләй** - етешеңкерәмәй.
**Ылдым** - ыңғай, тыңлаусан.
**Сымыры** - эшлекле, егәрле.
**Әрпеш** - эшлекһеҙ, бөхтә түгел.
**Лаштайып** - йәйелеп ултырыу.
**Әргендек** - ҡулынан эш килмәй, эшлекһеҙ.
**Ҡойолдороҡ** - бөхтә түгел.
**Алла биҙәр, мин биҙәр** - биҙҙереүсе.
**Абата** - быҫраҡ, йыйнаҡ түгел.
**Аңыш** - иғтибарһыҙ.
**Шымтайыу** - ҡапыл тынып ҡалыу.
**Шомбай** - өндәшмәҫ кеше.
**Һәтәү** - аҡылға бер төрлө.

**Булат АҠМАНОВ.**
**Ейәнсура районы**
**Иҙелбай ауылы.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БАЙҒА ЯЛЫНҒАНСЫ...

## ике ҡулыңа ялын

Ҡатыныңды хөрмәтлә, теҙгенен ҡулға көрмәклә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бәхет эҙләп донъя ҡыҙырмағыҙ, ул һеҙҙең эргәлә, ҡул һуҙымы арала ғына.

**(Гораций).**

Айыҡ саҡта эскән ваҡытта биргән бар вәғәҙәләрегеҙҙе үтәргә тырышығыҙ, был телегеҙҙе тыйып торорға ярҙам итер.

**(Эрнест Хемингуэй).**

Кем үҙ тормошон тулы ҡанлы итеп файҙаланған? Уның яртыһын - хыяллаһып, күпмелер өлөшөн ахмаҡтар менән әңгәмә ҡороп, күпмеһендер мөхәббәт утында тилереп, буштан бушҡа ваҡыт әрәм итеп үткәрмәгән берәйһе бармы?

**(Платон).**

Хаталарҙан ҡасыу өсөн тәжрибә туплау кәрәк; тәжрибә туплау өсөн хаталанырға кәрәк.

**(Лоуренс Питер).**

Беҙҙең тормош ике дәүергә бүленгән: беренсеһен беҙ киләсәктә, икенсеһен үткән заманда үткәрәбеҙ.

**(Николай Карамзин).**

Әгәр ҙә ҡырҡ йәшкә тиклем кешенең йорто балалар тауышына тулмаһа, ул алама ығы-зығы тауышы менән туласаҡ.

**(Шарль Огюстен).**

Тормош уйын майҙансығы кеүек: берәүҙәр унда ярышырға, икенселәр сауҙа итергә, иң бәхетлеләр тамаша ҡылырға килә.

**(Пифагор).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Батша бер кешене үлем язаһына хөкөм итә. Әммә теге батшаның алдына теҙләнеп: "Батшам, әгәр минең ғүмеремде өҙмәһәң, ике йыл эсендә һинең атыңды осорға өйрәтер инем", - тип ялбара. Батша быйндай тәҡдимде ҡыҙыҡып ҡабул итә һәм хөкөм ителеүсегә: "Ярай, тәҡдимеңә күнәм. Ләкин вәғәҙәңде үтәмәһәң, барыбер хөкөм итергә бойорасаҡмын", - ти. Хөкөмдән ҡотолоуына шатланып, был кеше өйөнә йүгерә. Әммә туғандары "Вәғәҙәңде нисек үтәмәксе булаһың инде?" тип, тағы ла оло ҡайғыға ҡала. Шунда был кеше: "Ҡайғырмағыҙ юҡҡа, - ти. - Был ике йыл эсендә кем бар ҙа кем юҡ: батшаның да, минең дә донъя ҡуйыуыбыҙ ихтимал. Аттың да ятып йән биреүе мөмкин. Бәлки, ул... осорға ла өйрәнер әле!"**

1 582218 911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 2 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5203
Заказ 4766